✓ Һәр кем күңелендә изгелек символы булып урын алған аҡ һаҡаллы Ҡыш бабайға ҡушылып, Яңы йыл алдынан уҡыусыларыбыҙға тағы ла "Әйҙәгеҙ!" тип дәртле өндәшәбеҙ. Әйҙәгеҙ, аңлы, рухлы, көслө ихтыярлы һәм оптимист булайыҡ! Әйҙәгеҙ, рәхмәтле, изгелекле, аҡ уйлы булайыҡ! Әйҙәгеҙ, яҡшылыҡтар кәтәп, шул яҡшылыҡтарҙың күберәк булыуына үҙебеҙ ҙә булышлыҡ итеп йәшәйек! Әйҙәгеҙ, еңеүселәр булайыҡ! Әйҙәгеҙ...



ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

27 ДЕКАБРЬ -
2 ҒИНУАР
(АҠЪЮЛАЙ - ҺЫУЫҒАЙ)
2014 йыл

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы иреркле

№52 (626)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Өҫтөнлөктө үҙебеҙ бешергән ризыҡтарға бирәйек!**



5

**Ҡыш бабайға тигән хатты...**




8

**Башыма ҡыҙыҡлы идея килә икән,**

мин шунда уҡ уны ғәмәлгә ашырырға тотонам



9

**Шәл бәйләйек!**



11

14 ТВ-программа


*ӘЙҘӘГЕҘ...*

# ЯҠШЫҒА ӨМӨТ ИТЕП...

## башҡаһына әҙер булып йәшәйек!

**Яңы йыл байрамы алдынан ҡыҙыҡ иттеләр булды инде: доллар, евро ҡиммәтләнеү менән бәйле хәбәрҙәрҙән күптәрҙә байрам ҡайғыһы китте. Урамда ла, транспортта ла, хатта мунсала ла шул хаҡта һөйләйҙәр. Кемдер сит ил көнкүреш техникаһы ҡиммәтләнеүгә зарлана, бәғзеләр ҡарабойҙай, он, шәкәр, башҡа ризыҡтарға хаҡ күтәрелеүен билдәләй.**

Бер аҙ аҡсаһы булғандар сауҙа үҙәктәре юлын тапай. Телевизор, һыуытҡыс, башҡа көнкүреш техникаһы һатып ала. Икешәрҙе, өсәрҙе хатта. Шул арала интернетта шундай көлкө лә барлыҡҡа килде: "Рәсәй кешеһе хаҡтар күтәрелә башлау менән магазиндарға йүгерә һәм өсәрләп телевизор һатып ала. Телевизорҙары ни тиклем күп булған һайын, уның күңеле лә тыныс..."

Ә бына бер танышым бөтөнләй күңел тыныслығын юғалтҡан. Машина һатып алырға йыйынып йөрөгән булған икән. Үҙе ниәтләгән машинаны алырға барһа, ун көн элек кенә бер хаҡ менән һатылған машина 100 меңгә күтәрелгән. Етмәһә, ул көндө уны һатыуға ла ҡуймағандар, "Яңы хаҡ көтәбеҙ", тигәндәр салонда. "Инде ни эшләргә икән? Кредит һаҙлығына инмәй, тинләп йыйғайным аҡсаны. Хәҙер кредит та алып булмаясаҡ, уның ставкаһын да күтәрҙеләр", - тип өҙгөләнә танышым. "Бына-бына барыһы ла яйланыр, доллар хаҡы ла төшөр..." тип тынысландырыуым бушҡа ғына булды, барыбер ышанманы...

Бына шулай, һәр хаҡ үҙгәреүе ығы-зығы, сәбәләнеүҙәр, күңел төшөнкөлөгө тыуҙыра, әллә күпме фәстернамәләр уйлап сығарта беҙҙең халыҡтан. Хәйер, дефолт була, аҡса арзаная, тигәнде күптәр йыл башынан теленә лә, аңына ла индергәйне инде. Хәүефен үҫтерә торғас, шул хәл алдына килеп баҫты ла ҡуйҙы. Уй ҙа, һүҙ ҙә тиҙ арала матдиләшә, шуға ла уйҙарығыҙ менән дә, һүҙҙәрегеҙ менән дә һаҡ булығыҙ, тип иҫкәртәләр түгелме ғалимдар. Шик-шөбһәләрҙе лә, матдиләшмәҫ, сиргә әйләнмәҫ элек, башығыҙҙан сығарып ташлағыҙ, аңығыҙҙы таҙартығыҙ, тиҙәр...

**(Дауамы 2-се биттә).**

# КУЙ ЙЫЛЫ

*Этеш-төртөш, ығы-зығы,*
*Миктәнә халыҡ арып...*
*Мәңгелектең туғайында*
*Тын ғына утлай һарыҡ.*

*Аңлай малҡай: бер ни ҡылып*
*Булмайҙыр тамаҡ ярып;*
*Ҡоро һүҙ бит тамаҡ йырта,*
*Һарыҡ түгел - ил арыҡ.*

*Ә көтөүҙә мал уңмаһа,*
*Ғәйепле тиҙ табыла:*
*Көтөүсене бейетәләр*
*Ҡыҙҙырылған табала.*

*Көтөү түгел, ил миктәһә,*
*Эҙләп ҡара сәбәпте -*
*Нисәнсе ҡат һуң кирегә*
*Борола тарих сәғәте?..*

*Халыҡтарҙы һарыҡ итеп*
*Әйҙәмәйек ҡәбергә -*
*Ҡәберҙәрҙә бейеп кенә*
*Кем ҡойонған ҡәҙергә?..*

*Имеш, ғәйеп беҙҙә түгел,*
*Бөтә каза - үткәндән,*
*Мал артырмы,*
*Дан ҡайтырмы*
*Илде ҡат-ҡат һүткәндән?*

*... Мәңгелектең туғайында*
*Тын ғына утлай һарыҡ.*
*Беүк тәңре һаҡлай күрһен -*
*Һарыҡ булмаһын халыҡ!*

*Яңы йылға аяҡ баҫа*
*Йәнгенәм, арып-талып.*
*Һарыҡ - арыҡ тигәндәрҙе*
*Онотһа икән халыҡ!..*

**Сафуан ӘЛИБАЙ.**



*КИЛЕШМӘЙЕМ!*

# БАЛАЛАР МЕНӘН...

## кәүҙәң бейеклегенән тороп һөйләшмә!

**Минең дә үҙемә оҡшамаған, "Килешмәйем!" тиер күренештәр бар был тормошта. Мәҫәлән, ололар менән балалар араһындағы мөнәсәбәттәр хаҡында бәйән итмәксе булдым әле гәзит биттәрендә.**



Мин бәләкәй малайҙарға: "Нимә ҡыҙыҡай һымаҡ илап тораһың? Хәҙер үк туҡта!" тип әйтеүҙәре менән **килешмәйем.** Бында нимәһе насар икәнен дә аныҡ ҡына әйтеп булмай - малай булып тыуған өсөн генә үҙенең хис-тойғоларын күрһәтеүҙе тыйыумы, әллә улар күңеленә "ҡыҙҙар илаҡ, йомшаҡ", тигән фекер һеңдереүме? Кисерештәрҙе күрһәткән өсөн ғәйепләргә ярамай. Әгәр ҙә бала илай икән, малаймы ул, ҡыҙмы - мөһим түгел, тимәк, уға әлеге ваҡытта ауыр, уны нимәлер борсой, шомландыра, ҡурҡыта. Ошо мәлдә уға "Нимә ебеп тораһың!" тип ҡысҡырыуҙан уның хәле яҡшырмаясаҡ, киреһенсә, тағы ла хөртәйәсәк. Терәк-таяныс тойоу урынына ул шелтә ала. Күңеле кителгән, ололарҙың үҙен аңламағанынан төшөнкөләккә бирелгән бала йомоҡҡа, аралашмаусанға әйләнә. Шунан: "Улым менән уртаҡ тел таба алмайбыҙ", тип бар донъяға яр һалып аптырайбыҙ. Кем ғәйепле? Миңә ҡалһа, яуап асыҡ.

Уйынсығын бер кемгә лә бирмәгән баланы, һаран, тип әйтеүҙәре менән дә **килешмәйем.** Ул уның шәхси мөлкәте. Уйынсығын бирмәҫкә тулы хоҡуғы бар. Уйынсығы менән бүлешергә теләмәгән баланы көсләп, мыҫҡыл итеп, әллә ниндәй исемдәр тағып мәжбүр итеү дөрөҫ түгел. Теләге бар икән - уйынсығын биреп торһон, теләге юҡ икән - бирмәһен. Бында төп һәм мөһим һүҙ - теләк. Ололарҙың бурысы - балала бүлешеү теләген формалаштырыу. Ул бар өлкәгә лә ҡағыла - уйынсыҡ, кәнфит, буш ваҡыт, күңел йылыһы менән бүлешеү. Һәм быны иң дөрөҫ һәм аңлайышлы ысулы - шәхси өлгө.

Ололарҙың бала менән үҙ кәүҙәһе бейеклегенән һөйләшеүе менән **килешмәйем.** Мин, мәҫәлән, бәләкәс бала менән һөйләшкәндә һәр ваҡыт уның алдына сүкәйеп ултырам. Мөһим һөйләшеүҙәр алып барғанда әңгәмәсегә фекерҙе көсләп тағыу өсөн ҡулланылған алым-манипуляция бар - бер яҡ ҡапыл тороп баҫа һәм өҫтән аҫҡа ҡарап, үҙ дәлилдәрен килтерә башлай. Бындай осраҡта ике яҡтың тигеҙлеге юғала, ихласлыҡ бөтә, һөйләшеүҙең һөҙөмтәһе лә уңышлы булмай. Ә хәҙер көнө буйы аҫтан өҫкә ҡарап һөйләшергә мәжбүр булған баланың хәлен күҙ алдына килтереп ҡарағыҙ. Һеҙ үҙегеҙгә ҡарата шундай уҡ мөғәмәлә теләр инегеҙме?

Бала алдында ололарҙың уның хаҡында өсөнсө затта һөйләүҙәре менән **килешмәйем.** "Бөгөн ул үҙен нисек тотто? Ул берәй нәмәне ватманымы?" Бәләкәй генә булһа ла, бала шәхес һәм уны ошо рәүешле тикшереү уның күңелен яралай. Ни өсөн был һорауҙарҙы баланың үҙенә бирмәҫкә йәки бик булмаһа, исемен әйтеп һорамаҫҡа? Ике оло кеше араһында торған һәм ошондай һөйләшеүгә шаһит булған бала бындай шарттарҙа үҙен йәнһеҙ ултырғыс йәки телевизор итеп тоймаймы икән? Үҙегеҙҙе ошондай хәлдә күҙ алдына баҫтырһағыҙ, ситуацияның ни тиклем мәғәнәһеҙ икәнлеген яҡшы аңларһығыҙ.

Яслегә йөрөгән балаларҙан тәрбиәсеһен исем-шәрифе менән әйтерергә тырышыуҙары менән **килешмәйем.** Беренсенән, ике-өс йәшлек балаларға "Айгөл Салауат ҡыҙы" (ғәҙәттә, урыҫсаға һабыштырып Айгөл Салаватовна, тиҙәр) тип әйтеү бик ауыр. Икенсенән, яслегә килгәнсе барыһына ла исемдәре менән генә өндәшеп өйрәнгән балаға был өйрәнелмәгән һәм ҡатмарлы бурыс. Был ваҡыт бала өсөн былай ҙа ауыр осор. Көнө буйы ят апайҙар менән аралашыу бер стресс булһа, уларға исем-шәрифе менән өндәшеү бурысы был стресты тағы ла көсәйтә. Исем менән генә өндәшеү бала һәм тәрбиәсе араһында ышаныслы һәм ныҡлы бәйләнеш булдыра, бала яслегә теләп бара. Быны мин үҙемдең ғаиләләге шәхси миҫалдан алып әйтәм. Күптәр минең менән ризалашмаҫ һәм бала бәләкәйҙән "һеҙ" тип һөйләшергә өйрәнергә тейеш, тип әйтер. Был - бәхәсһеҙ, ләкин бындай бәләкәй йәштә түгел, минеңсә. "Һеҙ" тип дистанция, субординация тотоу кәрәк булғанда өндәшәләр. Ә ике-өс йәшлек бала быны аңлаймы? Әлбиттә, юҡ. Бындай рәсмилек аралашыуға ҡамасаулай ғына. Бер йылдан һуң, бала тәрбиәсеһенә яҡшылап өйрәнгәс, исем-шәриф менән өндәшеүгә күсереү урынлыраҡтыр, моғайын.

Әйтегеҙ әле, туйһағыҙ ҙа, йәки ашһыу күңелегеҙгә ятып бөтмәһә лә, тәрилкәне ялтыратҡансы ашап ҡуяһығыҙмы? Юҡ. Ә ни өсөн улай булғас беҙ, ололар, балаға тәрилкәләге ризыҡты бөткәнсе ашатырға тырышабыҙ? Мин быны менән **килешмәйем.** Шулай уҡ балаға "ашыңды ашап бөткәс кенә котлетты алаҫаҡһың", "тәрилкәндә бер билмән дә ҡалмаған осраҡта ғына компотыңды эсәсәкһең", тигән шарттар ҡуйыу ҙа урынһыҙ, минеңсә. Әгәр ҙә бала теләй икән, ашаһын тәүҙә котлетын, ашап бөтмәҫ элек компотын эскеһе килә икән - әйҙә, эсһен. Ашханала төшкө аш ашағанда эргәгеҙҙә ашхана хеҙмәткәре баҫып тороп, нимәне нисек һәм ниндәй эҙмә-эҙлелектә ашарға кәрәклеген тылҡып торһа, реакцияғыҙ ниндәй булыр? Иманым камил, башҡаса ул ашханаға аяғығыҙҙы ла баҫмаясаҡһығыҙ. Шулай булғас, бала хәленә лә керә беләйек һәм уны мәжбүрләмәйек.

**Йәмғиәттә шундай ҡағиҙә бар - һинең менән нисек аралашыуҙарын теләйһеҙ, башҡалар менән шулай аралаш. Ләкин ни эшләптер был ҡағиҙә балаларға ҡарата ҡулланылмай. Ә кәрәк ине...**

**Рәйлә ХӘЛИТОВА.**
**Мәләүез ҡалаһы.**

*ӘЙҘӘГЕҘ...*

# АҢЛЫ БУЛАЙЫҠ!



**Аңлылыҡ - ул фәҡәт кешелек нәҫеленә бирелгән сифат, тап ана шул аңлылыҡ һәләте кешене хайуандан айырып тора ла инде. Донъя айышын аңлау, уны танып-белеү һәләтен аңлылыҡтың киңерәк һәм бәхәсһеҙ мәғәнәһе тип ҡараһаҡ, икенсе яҡтан, аңлылыҡ - кешене теге йәки был аҙымға этәреүсе, уның тойғоларын, выжданын көйләүсе категория булараҡ та аңлашыла. Аңлылыҡ - выждан, намыҫ күрһәткесе лә ул.**

Ҡайһы саҡ кеше үҙенең ана шул өҫтөнлөгө хаҡында "онотоп" ебәрә икән, тимәк, ул яңылыш юлда. Хәйер, үҙенең хайуан түгеллеген бер кем дә, бер ҡасан да онотмай, быны яҡшы аңлай, тик үҙ файҙаһына выжданы ҡушыуынан баш тарта. Ә аңлы кеше үҙ принциптарына, мәнфәғәтенә ҡаршы барырға тура килгәндә лә иҫәпләшеп тормай: һис икеләнеүһеҙ дөрөҫ юлды һайлай. Тимәк, аңлы булыу, бөйөк Эйнштейн әйтмешләй, кешелек прогресын алға этәреүсе, әйҙәүсе. Аңлылыҡ булмаһа, үҫеш тә, әхлаҡ та, кешелек тә булмай. Был дөйөм, глобаль төшөнсә лә, бер үк ваҡытта шәхси тойғо-кисереш тә. Ул йәшәйешебеҙҙең һәр өлкәһендә, бер үк ваҡытта һәр кешенең намыҫында сағылыш таба. Әгәр бөгөн кешелек донъяһы "һуғыш йә солох" тигән дилемма алдында тора икән, Ер шарын фәҡәт аңлылыҡ ҡына ҡыйралыштан ҡотҡара ала. Аңлы булыу, тимәк, тыныслыҡты, планетаны, ватаныңды, телеңде һөйөү. Әгәр ҙә берәү үҙ ғүмерендә күп нәмәгә өлгәшкән һәм бер ниндәй мохтажлыҡһыҙ көн күрә, ләкин туған теленә йә иле яҙмышына битараф икән - бындай әҙәмде аңлы тип кем һуң әйтер? Тимәк, ул йәшәмәй, ә инстинкт кимәлендә көн күрә - тамаҡ ҡайғырта ла хәжәтен башҡара. Быны иһә, бая әйткәнсә, хайуандар донъяһынан әллә ни айырмаһы юҡ.

Аңлы булыу, әйткәндәй, бөгөнгө Рәсәйҙең элиталы байҙарына ла бер тигәндәй ҡағыла, сөнки ил өсөн хәүефле һынау мәлдәрендә капиталын аҫтыртын-йәшертен сит илгә сығарып бөтөп, артабан ни булырын тыныс ҡына күҙәтеүсе әҙәмдәрҙе, серегән бай булһалар ҙа, аңлы, тип әйтергә тел әйләнерме? РФ Федераль Йыйылышына Мөрәжәғәтнамәһендә ил Президенты Владимир Путин, ватанибыҙ именлеге хаҡына эшләһен өсөн кире ҡайтарылған хәлдә, беҙ ул аҡсаларҙың ниндәй юл менән эшләнеүенә лә, алыныуына ла "күҙ йомасаҡбыҙ", тип, тап әлеге ҡалын кеҫәлеләрҙең аңлылығына иҫәп тотто түгелме? Әммә ләкин аңлылыҡ менән байлыҡтың Рәсәй варианты ни күрһәтер - әйтеүе ҡыйын...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Волга буйы федераль округы төбәктәре һәм Янцзы йылғаһының юғары, урта ағымы провинцияларының сауҙа-иҡтисади һәм гуманитар хеҙмәттәшлек буйынса Эшсе төркөмдөң сираттағы ултырышы Ульяновскиҙа Рәсәй Президентының Волга буйы федераль округындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле урынбаҫары Алексей Сухов һәм Ҡытай Халыҡ Республикаһының сит ил эштәре министры урынбаҫары Чэн Гопин рәйеслегендә үтте. Осрашыуҙа республика Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Евгений Маврин ҡатнашты. Унда билдәләнеүенсә, 2015 йылдың июлендә Өфөлә үтәсәк ШОС саммиты барышында Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы илдәре башлыҡтарының Волга буйы федераль округы төбәктәре етәкселәре менән осрашыуы планлаштырыла.

✓ Голландияның Хилверсюм ҡалаһында шашкала тиҙ уйнау буйынса халыҡ-ара донъя чемпионаты үтте. Турнирҙа Рәсәйҙән, Голландиянан, Белоруstan, Латвиянан, Польшанан, Италиянан, Бениндан 32 уйынсы ҡатнашты. Рәсәй йыйылма командаһы составында Башҡортостан вәкилдәре - Александр Георгиев, Айнур Шәйбәков һәм Муродулло Амриллаев сығыш яһаны. Шуларҙың иң көслөһө - Александр Георгиев чемпион исемен яуланы.

✓ Миәкә районы Советы Ришат Аҡтуғановты контракт буйынса район хакимиәте башлығы вазифаһына тәғәйенләү тураһында ҡарар ҡабул итте. Ришат Ғәбдрәшит улы Аҡтуғанов 1959 йылдың 12 ноябрендә тыуған. Башҡорт дәүләт аграр университетын тамамлаған. Төрлө йылдарҙа Ғөбәйҙуллин исемендәге СПК-ның баш ветеринары һәм баш зоотехнигы, "Сулпан" СПК-һы, "Оло Кәркәле", "Миәкә һөт заводы" асыҡ акционерҙар йәмғиәттәре етәксеһе булып эшләй.

✓ Республика киң мәғлүмәт сараларының иң яҡшы хеҙмәткәрҙәрен бүләкләү тантанаһы үтте. Быйыл онлайн-тауыш биреү ярҙамында еңеүселәрҙе билдәләүҙең элекке тәртибе һаҡланды. 3 декабрҙән 10-на тиклем сайтта тауыш биреү барҙы. Шуның һөҙөмтәһендә "Йыл журналисы" исеменә Күгәрсен районының "Мораҙым" гәзите хәбәрсеһе Айгөл Арыҫланбәкова лайыҡ булды, "Атайсал" темаһын иң яҡшы яҡтыртыусы тип Башҡортостан юлдаш телевидениеһының үҙ хәбәрсеһе Гөлназ Ғәлиуллина, "Мәҙәниәт һәм сәнғәт" темаһына иң яҡшы материалдар авторы тип "Башинформ" агентлығы хәбәрсеһе Ләйлә Ишморатова танылды.

**“Башинформ”дан.**

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# БАЛАЛАР КҮҢЕЛЕН КҮРЕП...

**Өфөлә Яңы йыл тамашалары башланды. 5 ғинуарға тиклем кескәйҙәр һәм уларҙың ата-әсәләре өсөн ҡаланың иң яҡшы театрҙары, филармония, рестарандар һәм клубтарҙа байрам тамашалары әҙерләгән.**



22 декабрҙә "Башҡортостан" дәүләт концерт залында Президент шыршыһы үтте. Байрамға бөтә республиканан 800-гә яҡын бала саҡырылғайны. Уларҙың барыһы ла уҡыуҙа, спорт ярыштарында, бейеү һәм йыр конкурстарында, олимпиада һәм фестивалдәрҙә уңыштарға өлгәшкән уҡыусылар. Байрамда шулай уҡ "Мәрхәмәт" хәйриә ойошмаһы аша килеүселәр, хәрби бурысын үтәгәндә һәләк булған хәрбиҙәрҙең балалары, күп балалы, аҙ тәьмин ителгән ғаиләләрҙә тәрбиәләнгән балалар ҙа ҡатнашты.

Тантанала ҡунаҡтарҙы Ҡыш бабай менән Ҡарһылыу ҡаршы алды. Дәүләт концерт залы фойеһында улар әкиәт персонаждары менән бергәләп күңел асты. Байрамса кейенгән балалар шыршы тирәләй әйләнде, шиғыр һөйләне, йырланы, бейене. Башҡортостан Президенты исеменән республика Хөкүмәтенең Премьер-министры урынбаҫары Салауат Сәғитов уҡыусыларҙы етеп килгән Яңы йыл менән ҡотланы. Артабан балаларға музыкаль әкиәт күрһәтелде. Президент шыршыһы иҫтәлеге итеп уҡыусыларға йомшаҡ уйынсыҡтар, Мостай Кәримдең "Беҙҙең өйҙәң йәме" китабы һәм татлы бүләктәр тапшырылды.

23 декабрҙә "Башҡортостан" дәүләт концерт залында Баш ҡала шыршыһы үтте. Иртәнге сәғәт 11-ҙә - һәләтле, сәғәт 3-тә етем һәм ата-әсә ҡарауынан мәхрүм ҡалған балалар өсөн тамаша ойошторолдо. Тамашала 1700 бала ҡатнашты.

Өфө балалары өсөн Социаль шыршы байрамдары М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры бинаһында ойошторолдо. Унда күп балалы, аҙ тәьмин ителгән ғаиләләрҙән, шулай уҡ мөмкинлектәре сикләнгән, балалар йорттарында тәрбиәләнгән 960 бала саҡырылды.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**25 декабрҙә Өфөлә Яңы йыл йәрминкәләре башланды. Бөтә районлрҙа ла шыршы ҡаласыҡтары биләмәһендә сауҙа киоскылары эшләй. Ай дауамында унда республика етештереүселәренең, шул иҫәптән "Мәктәп туҡланыу үҙәге" муниципаль унитар предприятиеһы һәм "Ағиҙел" башҡорт художество кәсептәре дәүләт унитар предприятиеһы продукцияһы һатыласаҡ. Бынан тыш, 4-5 һәм 9-10 ғинуарҙа баш ҡаланың бер нисә майҙанында ауыл хужалығы йәрминкәләре эшләйәсәк. Һатыу итеү "Моторҙар төҙөүсе", Йәштәр һарайы алдындағы майҙандарҙа, С.Перовская һәм А.Мөбәрәков, СССР-ҙың 50 йыллығы һәм Р.Зорге урамдары киҫелешендә (Спорт һарайы эргәһендә), "Тулҡын" скверы ҡаршыһында ойоштороласаҡ. Йәрминкәләрҙә Яңы йыл һәм Раштыуа байрамдарына арналған мәҙәни саралар уҙғарыу ҡаралған.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

**Һуңғы ваҡытта сит ил валютаһының артыуы фонында күҙәтелгән көрсөк халыҡты тағы ла билдәһеҙлек алдында ҡалдырҙы, ниндәйҙер күҙгә күренмәгән хәүефте көсәйтә төштө кеүек ине. Әммә Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов үткәргән матбуғат конференцияһы күп нәмәләргә асыҡлыҡ индерҙе һәм күп һорауҙарға яуап бирҙе. Тағы шуны ла һыҙыҡ өҫтөнә алыу кәрәк: ҡағыҙҙа булараҡ, йылға һуңғы йомғаҡ февралдә яһала, шуға күрә мәғлүмәттәрҙе аныҡ тип әйтеп булмай. Уларға тағы ла төҙәтеүҙәр индерелеүе мөмкин. Шулай ҙа өлгәшенгәндәр ҡыуандыра. Уларҙы тармаҡтарға бүлеп ҡарағанда, шундай картина күҙ алдына баҫа.**

# КӨРСӨКМӨ? УЛ ВАҠЫТЛЫСА КҮРЕНЕШ!



**Сәнәғәт.** Етештерелгән һәм һатылған тауар, сәнәғәт предприятиеларының башҡарылған эше һәм күрһәтелгән хеҙмәте былтырғы осор менән сағыштырғанда 56 миллиард һумға, йәғни 5 процентҡа артып, 605 миллиард һумға етәсәк.

**Төҙөлөш.** Быйыл 880 мең квадрат метр торлаҡ төҙөләсәк. Уларҙың яртыһынан күбеһе - индустриаль төҙөлөш. Әммә бында шуны ла иҫәпкә алыу зарур: йорттарҙы тапшырғанда ҡабул итеү комиссияһы ҡәтғи талаптар ҡуя, шуға күрә атап үтелгән күләм тулыһынса ҡабул ителә тип әйтеп булмай. Муниципалитет өсөн төүге урында күләм түгел, сифат тора.

**Инвестициялар.** Йыл дауамында уның күләме 104 миллиард һумға етәсәк. Әлеге ваҡытта баш ҡалала дөйөм суммаһы 170 миллиард һумлыҡ 100 инвестпроект тормошҡа ашырыла. Инвестицияларҙың 90 проценты - шәхси средстволар. Ошо проекттар барыһы ла тормошҡа ашырылһа, был өҫтәмә рәүештә 16400 эш урыны булдырасаҡ.

**Спорт объекттары.** Йыл дауамында 29 төрлө спорт ҡоролмалары, майҙансыҡтары төҙөлгән, 5-һенә реконструкция эшләнгән, 3-һөндә эш дауам итә. Уларҙың күбеһе муниципаль-шәхси партнерлыҡ сиктәрендә тормошҡа ашырыла. Маҡсат - һәр кем спорт менән шөғөлләнеүҙе йортонан алыҫҡа китмәй генә тормошҡа ашырһын.

**Төҙөкләндереү.** Баш ҡалала парктарҙы, скверҙарҙы, аллеяларҙы төҙөкләндереү буйынса ҙур эш алып барыла. Коммуналь хужалыҡ предприятиелары тарафынан 940 миллион һумлыҡ эш башҡарылған.

Өфөлә дүртенсе йыл йорт ихаталарын капиталь ремонтлау буйынса программа тормошҡа ашырыла. Быйыл дөйөм суммаһы 50 миллион һум тәшкил иткән 80 ихата ремонтланған.

Күп фатирлы йорттарҙы капиталь ремонтлау һәм лифттарҙы алмаштырыу буйынса ла эштәр дауам итә. Ул РФ-ның Торлаҡ-коммуналь хужалығын реформалау фонды ярҙамы менән тормошҡа ашырыла. Дөйөм алғанда, 165 күп фатирлы йорт ремонтланған һәм 18 йортта лифт алмаштырылған. Был маҡсатҡа 600 миллион һум йүнәлтелгән. Шуныһы иғтибарға лайыҡ, капиталь ремонт йәйге миҙгелдә генә түгел, йыл әйләнәһенә алып барыла.

28 миллион һумлыҡ 78 балалар майҙансығы һәм спорт комплексы йыһазландырылған.

**Балалар баҡсалары.** Быйыл Һупайлыла - 190, Черниковкала 200 урынлыҡ ике балалар баҡсаһы файҙаланыуға тапшырылды. 2015 йылдың беренсе кварталында Нуғай ҡасабаһында балалар баҡсаһы сафҡа инәсәк. Шаҡша, Инорс һәм Дим биҫтәләрендә эш дауам итә. Тағы өс биҫтәлә төҙөләсәк объекттар әлегә экспертарҙың һығымтаһын үтә.

Һуңғы ике йылда шәхси балалар баҡсаларының һаны ике тапҡырға артып, йөҙгә еткән. Муниципалитет эшҡыуарҙың ошо йүнәлештәге эшмәкәрлегенә һәр саҡ ярҙам итә, уларға льготалы шарттарҙа бина, займ, белем биреү эшмәкәрлеген ойоштороуға субсидиялар бирә. Сабыйҙарын шәхси балалар баҡсаһына йөрөтөүсе ата-әсәләрҙең сығымдарының бер өлөшө ҡаплана.

**Ҡулланыу баҙары.** Йыл йомғаҡтары күмәртәләп һатыу тауар әйләнешенең 450 миллиард һум күләмендә буласағын күҙаллата. Был былтырғы менән сағыштырғанда 2,5 процентҡа күберәк. Йәмәғәт туҡланыуы әйләнеше лә былтырғы осорҙан 6,5 процентҡа артыраҡ буласаҡ. Өфө предприятиелары өлөшөнә республика йәмәғәт туҡланыуы әйләнешенең 48 проценты тура килә.

Йылдың туғыҙ айында түләүле хеҙмәт күрһәтеү былтырғы кимәлдән 11 процентҡа артып, 91 миллиард самаһына еткән. Халыҡҡа түләүле хеҙмәт күрһәтеү күләменең дә артыуы көтөлә.

Баш ҡалала әленән-әле яңы сауҙа объекттары сафҡа инә. Һөҙөмтәлә баш ҡаланың мең кешеһенә 1122 квадрат метр сауҙа майҙаны тура килә.

**Мәшғүллек.** Йылдың һуңғы айында эшһеҙҙәр һаны 6 мең кеше тип теркәлһә, ҡаланың мәшғүллек хеҙмәте органдарына 16 мендән ашыу вакансия тәҡдим ителгән.

**Демография.** Ун айҙа баш ҡалала 15 мең бала донъяға килгән. Был былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда 5 процентҡа күберәк. Тәбиғи артым былтыр 3900 булһа, быйыл 4,5 мең. Шул уҡ ваҡытта 10 айҙа миграция ағымы 3200 кеше тәшкил иткән.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ирек Ишмөхәмәт улы һәр даим ҡабатлаған кредоһына был юлы ла тоғролоҡ һаҡлап: "Иң мөһиме - граждандар өсөн уңайлы тормош һәм эш шарттары булдырыу", - тине. Ә 2015 йыл - баш ҡала өсөн ШОС һәм БРИКС илдәре саммиттарын уҙғарыу менән дә әһәмиәтле һәм яуаплы. Ошо сара алдынан бөгөн баш ҡала тотош төҙөлөш майҙанын хәтерләтә икән, тимәк, был да хакимиәттең алған курстарының береһе. Сөнки Ирек Ялалов белдереүенсә, саралар үтә, ә төҙөлгән, төҙөкләндерелгән объекттар ҡала. Һәм улар оҙаҡ йылдар халыҡҡа хеҙмәт итәсәк. Көрсөк тә шулай - ваҡытлыса ғына күренеш...**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✔Башҡортостан вәкилдәре, Санкт-Петербург Тау университеты студенттары Нева йылғаһы буйындағы ҡала Хөкүмәтенең грантына лайыҡ булды. Наградалар XIX Йәш ғалимдар һәм белгестәр ассамблеяһы сиктәрендә тапшырылды. Санкт-Петербург Хөкүмәте грантына Тау университетының 11 студенты һәм 17 аспиранты лайыҡ булды. Улар араһында Башҡортостан вәкилдәре лә бар: Күмертауҙан Руслан Ғизәтуллин һәм Әлшәй районы Раевка ҡасабаһынан Әлиә Шәймөхәмәтова.

✔Башҡорт дәүләт педагогия университетында мәғрифәтсе, шағир Мифтахетдин Аҡмуллаға арналған халыҡ-ара аҙналыҡ үтте. Саралар араһында төрки халыҡтары шиғриәте кисәһе, Аҡмулла шиғырҙарын донъя телдәренә тәржемә итеү конкурсы, Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан ғалимдары ҡатнашлығында халыҡ-ара түңәрәк өҫтәл, "Мәҙәниәттә һәм белем биреүҙә мәғрифәтселәрҙең гуманистик мираҫы" халыҡ-ара ғилми-практик конференцияһы ла бар. БДПУ-ла "М. Аҡмулланың ижади мираҫын традицион башҡарыу" онлайн-конференцияһы үтте. Унда магистранттар, БДПУ һәм С. Баишев исемендәге Аҡтүбә университеты студенттары ҡатнашты.

✔Яңы йыл алдынан "Башҡортостан - Болгария" дуҫлыҡ йәмғиәте вәкилдәре дуҫлыҡ визиты менән Башҡорт дәүләт филармонияһына килә. Күптән түгел филармонияның солисы, бөтә донъяға танылған ҡумыҙсы Миңлеғәфүр Зәйнетдинов Болгар мәҙәни үҙәгендә булып ҡайтты. Ул "Кейеҙ сәнғәте" күргәҙмәһен асыуҙа сығыш яһаны. Сара йәмғиәттә ҙур резонанс тыуҙырҙы. Артабан хеҙмәттәшлек итеү, башҡорт сәнғәтен үҫтереү һәм пропагандалау, республиканың төрлө халыҡтары араһында тыныслыҡты һәм татыулыҡты нығытыу маҡсатында Болгар йәмғиәте "Дуҫлыҡ веноғы" акцияһын башлай.

✔Башҡортостан умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәге менән Ҡытайҙың "Йәшел тамыр" компанияһы араһында 3 миллиард һум күләмендә бал оҙатыу буйынса оҙайлы килешеүгә ҡул ҡуйылды. Башҡортостан умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәгенән хәбәр итеүҙәренсә, тәьмин итеүҙең ысын күләме Ҡытайҙың ғаризалары буйынса билдәләнәсәк. Килешеүҙең базалы параметрҙарынан сығып, иң юғары күләм яҡынса 10 тонна продукт тәшкил итәсәк.

✓ *Аш-һыу күп булып артып ҡалһа ла насар, сөнки бер-ике көн ултырһа, уның күркәмлегә китә, тәме бөтә, шуға күрә бар нәмәнең дә самаһын белеп, етерлек кенә итеп бешерәм.*

*ӘЙҘӘГЕҘ...*



# ӨҪТӨНЛӨКТӨ ҮҘЕБЕҘ БЕШЕРГӘН РИЗЫҠТАРҒА БИРӘЙЕК!



**Бөгөн Өфөлә һәм башҡа ҡалаларҙа ғына түгел, һәр ауылда Яңы йыл алдынан ғына була торған күңелле ығы-зығы күҙәтелә. Майҙандарҙа биҙәлгән шыршылар, боҙ һындар урын алған, сауҙа үҙәктәрендә генә түгел, төрлө ойошма-учреждение биналары алдында ла төрлө төҫтәге уттар, биҙәктәр күҙҙәрҙе ҡамаштыра. Өйҙәрҙә лә Яңы йылды ҡаршылыу өсөн күңелле әҙерлек бара. Бөгөн беҙ ошондай күтәренке кәйеф менән тулған, яҡты һәм матур өйҙәрҙең береһендә ҡунаҡтабыҙ. Йылайыр районы Йылайыр ауылында йәшәүсе оҫта хужабикә Миңһылыу АБДУЛЛИНА Яңы йыл табыны әҙерләү хаҡындағы серҙәре менән бүлешә.**

- Беҙҙең ғаиләлә өс бала - ике ҡыҙ һәм бер малай - үҫә. Бала йөрәгендә тыуған йортҡа, ғаиләгә, туғандарына ҡарата йылылыҡты һәм ихтирамды атай-әсәй тәрбиәләй. Был ҡоро һүҙгә, күрһәтмәләргә йәки кәңәштәргә генә ҡайтып ҡалһа, ыңғай һөҙөмтәгә өлгәшеп булмай. Шуға күрә ундай тойғоларҙы үҙебеҙҙең өлгөбеҙҙә, эшләгән эшебеҙҙә күрһәтергә тырышабыҙ. Берҙәмлек, ҡәрҙәшлек хистәрен нығытыуҙа бергә уҙғарған байрамдар ҙа ҙур роль уйнай. Әлбиттә, календарҙа ҡыҙыл менән билдәләнгән һәр иҫтәлекле датаны ҙур өҫтәл әҙерләп уҙғарыу урынһыҙҙыр, сөнки бар нәмәлә лә сама белеү кәрәк. Ләкин ғаиләбеҙҙең иң яратҡан байрамына - Яңы йылға - беҙ ентекле һәм ихлас әҙерләнәбеҙ. Был өйҙө биҙәүҙән алып байрам өҫтәленә тиклем ҡағыла. Бергәләшеп етеп килгән Яңы йылды ҡаршыларға әҙерләнгәндәге күңелле ығы-зығы беҙҙе тағы ла яҡынайта, ғаилә усағы янына нығыраҡ туплай, өйҙө шатлыҡҡа һәм бәхеткә күмә.

Байрамдың "иң тәмле" өлөшөн - өҫтәлдә әҙерләү минең инемдә. Ләкин ирем дә, балалар ҙа был эштән ситтә ҡалмай. Тормош иптәшем, мәсәлән, көҙөн Яңы йыл табынына йыл һайын мотлаҡ бешерелеүсе бәлеш өсөн балан йыя. Был йылдан-йыл үҙгәрмәйенсә һаҡланып килгән ғаилә традицияһы. Әгәр ҙә баланды мин йәки балаларҙың береһе йыйһа - уның тәме лә икенсе төрлө кеүек, йәмле булмаған һымаҡ тойола. Шулай уҡ барыбыҙ ҙа яратып ашаған ҡуҙғалаҡ бәлешенә эслекте балалар йәйгеһен махсус рәүештә йыйып, һыуытҡыста тундыра. Был үҙенсәлекле лә, тәмле лә бәлеш һыуыҡ ҡыш кисендә йәйҙең бер сәләме кеүек күңелгә йылылыҡ бирә.

Әсәй беҙҙе "Өҫтәлгә иң беренсе икмәк ҡуйылыҙ", тип өйрәтте. Шуға күрә 31 декабрь иртә менән тороп, кистән әсеткән ҡамырҙан икмәк әүәләп, мейескә ҡуям. Икмәгем әҙер булғансы, балалар тороуға ҡоймаҡ бешерәм. Был да беҙҙең ғаилә йолаһы. Тәмле ҡоймаҡ еҫенә уянған балалар менән бергә иртәнге сәй эсеү көнө буйына етәсәк көс-ҡеүәт бирә, дәрт өҫтәй. Иртәнге сәйҙән һуң байрамға дәррәү әҙерлек башлана - һәр кем үҙенә тәғәйен эшкә тотона. Малайым ит өйрөлтә, ҡыҙҙарҙың берәүһе ҡамыр баҫып, һалма йәйә. Әбйәлилдән төшкән килен булараҡ, Яңы йыл өҫтәленә һәр ваҡыт буҙа ҡуям, шуға күрә икенсе ҡыҙым буҙа һыға. Унан инде күмәкләшеп өҫтәл тирәләй ултырып, күп итеп билмән эшләйбеҙ, сөнки ул байрам өҫтәленең иң мөһим "ҡунағы". Билмән янында мотлаҡ рәүештә традицион "Кышҡы салат" була. Ҡыҙҙарым хәҙер башҡа төрлө салаттар ҙа әҙерләргә әүәҫләнде. Улар араһында үтеп барыусы һәм буласаҡ йыл символына оҡшатып эшләнгәндәре өҫтәлдең түрендә урынлаша. Ошо рәүештә балалар был йылда булған матур ваҡиғалар өсөн йыл хужаһына рәхмәт белдерә, ә киләһе йыл символына хөрмәт күрһәтеп, ғаиләбеҙгә, илебеҙгә тик шатлыҡ-ҡыуаныстар ғына килтереүен һорай.

Яңы йыл - ғаилә байрамы. Шуға күрә уны ғаилә менән үҙ өйөңдә ҡаршылау мөһим, тигән ҡараштабыҙ. Был ҡағиҙәне бәләкәй саҡтан үк балаларҙың аңына һеңдерә киләбеҙ, шуға күрә үсмер ҡорона етһәләр ҙә, Яңы йылды ҡайҙалыр ситтә ҡаршылау тураһында уйламайҙар. Ләкин сәғәт телдәре 12-не һуғып, Яңы йылға аяҡ баҫҡандан һуң улар, ғәҙәттә, дуҫтары янына бара, ә беҙгә күрше-тирә ҡунаҡҡа инә. Хөрмәтле ҡунаҡтарға тип иң ҙурын һәм һимеҙен һайлап, алма менән тултырып ҡаҙ бешерәм. Яңы йылды мул, аш-һыуҙан һығылып торған өҫтәл артында ҡаршылау киләһе йылдың етеш булыуына юл аса. Шуға ла һәр ваҡыт ҡаҙы һәм тултырма ла әҙерләйем. Улар янында картуф һәм үҙебеҙ үҫтереп, ҡышҡылыҡҡа әҙерләгән төрлө йәшелсә урын ала. Аш-һыу күп булып артып ҡалһа ла насар, сөнки бер-ике көн ултырһа, уның күркәмлегә китә, тәме бөтә, шуға күрә бар нәмәнең дә самаһын белеп, етерлек кенә итеп бешерәм.

Байрам өҫтәлен йыуасаһыҙ, сәксәкһеҙ, балһыҙ күҙ алдына килтермәйем. Был тәмлекәстәр янына шулай уҡ балалар бик яратҡан халҡыбыҙҙың татлы ашамлығын - ҡарағаттан һәм еләктән эшләнгән ҡаҡ та ҡуям. Һәм, әлбиттә, Яңы йыл табынына мандарин, әфлисун, алма һәм башҡа төрлө еләк-емеш ултыртам. Ғаиләбеҙҙә спиртлы эсемлектәр бөтөнләй инҡар ителгәнлектән, куранттар һуҡҡанда ҡымыҙ күтәрәбеҙ. Шулай уҡ төрлө һуттар һәм сәй менән һыйланабыҙ.

Яңы йыл табыны беҙҙең ғаиләлә ошолай әҙерләнә. Әллә ниндәй сит ил деликатестары артынан ҡыумайбыҙ, ә үҙебеҙсә ябай, әммә заулыҡлы, халҡыбыҙҙың аш-һыуына өҫтөнлөк биреп өҫтәл хәстәрләйбеҙ. Байрам өҫтәлендәге ризыҡ көндәлек тормошта йыш бешереләһә лә, Яңы йыл табынына әҙерләнгәне тағы ла тәмлерәк булып, ауыҙҙа иреп кенә тора кеүек. Бар ихласлығыбыҙҙы, күңелебеҙҙе үҙенә һеңдергән аш-һыуыбыҙҙан ауыҙ итеү алдағы йылға етерлек көс-ғәйрәт бирә, дарман өҫтәй. Барлыҡ гәзит уҡыусыларға ла Яңы йылда табындарының мул, күңелдәренең тыныс, йөҙҙәренең көләс булыуын теләйем.

**Сәй табынында Гөлназ МАНАПОВА булды.**

*ӘЙҘӘГЕҘ...*

# ОҪТАЛЫҠТЫ АҠСАҒА ӘЙЛӘНДЕРӘЙЕК!



**Һөнәрем буйынса хоҡуҡ белгесе булһам да, күңелем менән рәссаммын. Һүрәт төшөрөү, ҡышын ҡарҙан төрлө һындар эшләү, пластилиндан уйынсыҡтар яһау һәм фантазия менән оҫта ҡул талап ителгән башҡа төрлө шөғөлдәр буш ваҡытымда яратып башҡарған эштәрем. Былтырҙан алып миңә өҫтәмә аҡса килтереүсе кәсебем, тип тулыландырырға мөмкин.**

Яңы йыл байрамына әҙерлек состар һәм оҫталар өсөн аҡса эшләп ҡалыу осоро. Бының шулай икәнен үҙем былтыр ғына аңланым. Ҡала һәм район, ауыл майҙандарында боҙҙан Ҡыш бабай һәм Ҡарһылыу, башҡа төрлө һындар яһап аҡса эшләүселәрҙең барлығын беләм, әлбиттә. Ләкин барлыҡ оҫталарға ла бындай заказдарҙың етмәүе көн кеүек асыҡ. Шуға күрә минең өлгәмдә кемдер үҙенә аҡса эшләү мөмкинлеге тапһа, шат булыр инем.

Мин Яңы йыл экстерьерын булдырам. Нимә ул экстерьер һәм уның ярҙамында нисек аҡса эшләргә мөмкин? Интерьер - йорттоң, бинаның эске күренеше булһа, экстерьер иһә кешелә ыңғай эстетик тойғолар тыуҙырыусы художестволы йәки архитектуралы тышҡы йөҙ. Ә аҡса эшләү юлы ябай ғына. Хәҙер өйҙәрҙе, ҡала ситендәге йорттарҙы, эш урындарын Яңы йылға матур итеп биҙәү модала. Берәүҙәр ҡул аҫтында ниндәй ялтыр-йолтор мишура бар - шуны тәҙрәгә һәм стенаға элеп сығыу менән хушыһа, икенселәр төрлө тематикалы итеп, үҙенсәлекле биҙәүҙе ярата. Уларҙың ошо теләге минең кеҫәмә аҡса булып инә лә инде. Мин күберәген ҡала ситендәге коттедж хужалары менән эшләйем. Уларҙың фантазияһы ла иҫ китерлек, аҡсаны ла йәлләмәйҙәр. Өйҙәрен, ҡоймаларын, башҡа ҡаралтыларын биҙәү өсөн нимә генә алмайҙар: әллә нисә метр гирлянда, бихисап һауа шарҙары, төрлө флагтар. Шуларҙы матур, уларҙың күңеленә оҡшаған итеп ҡуйып сығыу, тәү ҡарашҡа, еңел күренһә лә, эшләй башлаһаң, төрлө нескәлектәре килеп сығып ҡына тора. Шулай уҡ ишек алдында Ҡыш бабай һәм Ҡарһылыуҙы, беҙ өйрәнгәнсә, тоҡ аҫтырып, ябай ғына баҫтырып ҡуйыу эшкә лә һанланмай. Улар мотлаҡ пар ат егелгән санала ултырырға тейеш. Сананың артында хужаларҙың ҡунаҡтары өсөн дә урындарҙың булыуы мотлаҡ, сөнки Яңы йыл кисендә шунда ултырып "елеү" уларҙы балалыҡ иленә алып ҡайта, күрәһең. Ишек алдында тағы ла ҡар бабайҙар, йыл символы һәм башҡа хайуан һындары, әкиәт геройҙары урын ала. Ғөмүмән, клиенттың фантазияһына үҙеңдеңдекен дә ҡушып, Яңы йыл мөхите тыуҙыраһың. Шулай итеп, оҫта ҡулыңдың мәнфәғәтен күрәһең, кешеләрҙе лә шатландыраһың. Беренсе йылда эшеңде урын еренә еткереп башҡарһаң, икенсе йылына клиенттар бермә-бер арта, сөнки һәр кем үҙ ихатаһында ла ошондай матурлыҡ булыуын теләй.

**Шәфҡәт ҒӘЙНЕТДИНОВ.**

## ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Шеш булғанда

❖ Сей ҡарабойҙай ярмаһын сәйнәргә һәм япраға һалып, бәйләп ҡуйырға. 4 сәғәт һайын алыштырырға.

❖ Шулай уҡ ҡара икмәкте сәйнәп яраға һалғас, уның өҫтөнән кәбеҫтә япрағын бинт менән ҡушып бәйләргә һәм 1 тәүлектән генә алырға.

❖ Һуғанды урталай ҡырҡып, яраға бәйләргә. 3 сәғәт һайын алыштырырға.

❖ Бал да эренле шештәрҙе дауалауҙа яҡшы сара иҫәпләнә.

### Авитаминоз

Гөлйемеште ваҡларға һәм төнө буйы термоста төнәтергә. 1 литр ҡайнар һыуға 10-15 бөртөк гөлйемеш, тәменә ҡарап бал йәки шәкәр кәрәк. Үт ҡыуҙырыу өсөн дә яҡшы сара.

### Анемия

❖ С витамины (аскорбин кислотаһы) ризыҡта булған тимерҙе үҙләштерергә ярҙам итә. Ашар алдынан 1 стакан һыуға ярты лимондың һутын һығып эсергә кәңәш ителә.

❖ Аҙ ҡанлылыҡ ваҡытында һөт тимерҙең үҙләштерелеүенә ҡамасаулай. Шуға һөт ризыҡтарын әҙерәк ашарға тура килер. Кальций дефициты булмаһын өсөн фасоль, борсаҡ, соя, тауыҡ һурпаһы, йәшел төҫтәге йәшелсәләр ашарға.

❖ Спиртлы эсемлектәр В төркөмө витаминдары һәм ҡайһы бер микроэлементтар запасын юҡҡа сығара, был анемияны тағы ла көсәйтә. Шулай уҡ шәкәрҙе аҙыраҡ ҡулланығыҙ, ул да В-комплексҡа кире тәьҫир итә.

❖ Анемия мәлендә ҡәһүә, ҡара сәй, кола, шоколад һәм составында кофеин булған башҡа ризыҡтар ашау тыйыла, сөнки кофеин тимер үҙләштереүҙе тотҡарлай.

❖ Анемиянан эфир майҙары ярҙамында дауаланырға була. Мәсәлән, анемия һөҙөмтәһендә эс ҡата икән, көнөнә бер тапҡыр баш бармаҡ менән һуҡ бармаҡ араһындағы тире ярыһына 1 тамсы кипарис (сәрүи ағасы) һәм 1 тамсы имбер майы тамыҙырға. Әгәр ҙә тире гел дә һыуыҡ һәм дымлы икән, эскә 1 тамсы яран майы һөртөргә.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# БҮРЕНЕҢ...

## Тәңреһе бар

**Бүренең изге йәнлек булыуы башҡорт халҡының башҡа төрлө ҡараштарында ла күренә. Бик тиҙ генә байып киткән кеше тураһында "Уның бүреһе олоған", тиҙәр. Ғалимдар фекеренсә, Волга буйында йәшәгән халыҡтарҙың барыһында ла бүре бәхет килтереүсе булып иҫәпләнә.**

Бүренең изге зат булыуы ҡайһы бер йолаларҙа ла сағылыш алған. Төнгө ҡараңғыла торған кеше: "Корайт, ҡорайт, ҡиу!" - тип, тирә-яҡты яңғыратып ҡысҡырырға тейеш булған. Йәшен мәлендә йортто, тирмәне йәшен утынан һаҡлау өсөн уларҙы уратып: "Корайт, ҡорайт!" - тип әйтеү йолаһы бар. Әгәр ҙә яңы тыуған быҙау йоҡлап ятҡанда тертләй һәм сәйер тауыштар сығара икән, уны ошо уҡ һүҙҙе әйтеп, иләп кенә уяткандар. Ҡот ҡойоусылар ҙа был һүҙҙе даими ҡуллана. Яуға киткән улдарын әсәләр, ҡорайт, ҡорайт, тип оҙата. "Кор" һүҙе боронғо төрки телендә "бүре", ә "-ай-" ижеге "юғары һәм урта донъяның изгеләре" тигәнде аңлата. "-Т" иһә күплекте белдерә. Тимәк, ҡорайт, тип әйтеп, боронғо ата-бабаларыбыҙ изге бүренән ярҙам, мәрхәмәт һораған. "Күк бүре" тигән эпитет бүренең төҫөн түгел, ә уның күктәргә, күк тәңреһенә ҡарауын белдергән.

"Эттең хужаһы булһа, бүренең тәңреһе бар", ти халыҡ мәҡәле. Тәңрененң ҡурсыуы аҫтындағы йәнлекҡә ярҙам һорап мөрәжәғәт итеү күренеше шуның өсөн ғәҙәти булған, күрәһең. Бүре олоғанда ололарҙын: "Бүре хоҙайҙан хәләл өләшен һорап олой", тигәнендә лә был хәҡиҡәт сағылып ҡала. Күп халыҡтарҙа бүрене үлтереү, һунарҙа саҡта уның балаларын алып ҡайтыу тыйылған. "Бирәнһылыу - бире ҡыҙы" әкиәтендә бүре шулай уҡ батырҙарҙы урлап, уларҙы йотоп йөрөүсе зат булараҡ һүрәтләнә.

Шулай ҙа мифологияла бүре кире герой булараҡ сығыш яһаған осраҡтар ҙа бар. "Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу" эпосында әсә, улын йәрәшелгән кәләшен әҙләү маҡсатынан сығып китеүенә ҡаршы булып, уның юлына "ете ҡабып бер йота" торған ете бүрене сығара. Әммә геройҙы уларҙан ҡанатлы толпары ҡоткара. Йылайыр районында яҙып алынған бер легендала ен балаһын "аҡ бүре" тип атап йөрөтөүҙәре билдәле. Бүре олоуы йортҡа, ғаиләгә килгән бәлә тураһында белдереүе лә бар. Мәҫәлән, "Саҡ менән Суҡ бәйете"ндә аталары әйҙә юкта үгәй инәй улдарын ҡарғай һәм улар ҡошҡа әйләнеп, урманға осоп китә. Тауҙарға һунарға киткән ата кешегә был ҡайғы тураһында бүреләр олоп еткерә. Төрөктәр бүре олоуына ҡарап, яуҙың аҙағы нисек булыуын билдәләгән. Тимәк, халыҡ ижадындағы был өлгөләр һунғараҡ, бүре тотем булыуҙан туҡтағас барлыҡҡа килгән. Убырҙар бүре сүрәтендә була тигән ышаныу ҙа бар. Бүре осрағанда мәрхүм өс туғанылдың исемен әйтһәң, ул һинә теймәй тигән ышаныу урыҫ халҡында бөгөн дә йәшәй.

Тотем булараҡ, башҡорттарҙа бүрене исеме менән атау, уны үлтереү, бүре ите ашау, бер сәпһеҙ ул йәшәгән территорияға инеү тыйылған була. Был тыйыуҙарҙы үтәмәгән кешене ҡаты яза - ауырыу йәки үлем көтә, тигәндәр.

**Ф. Илембәтов, А. Илембәтова. "Башҡорт мифтары һәм йолаларында хайуандар культы" китабынан. (Дауамы бар).**

ӘЙҘӘГЕҘ...



**Ошо көндәрҙә баш ҡаланың "Динамо" спорт комплексында милли көрәш буйынса Бөтә Рәсәй чемпионаты үтте. Башҡортостан көрәшселәре, ҡунаҡсыллыҡ өлгөһө күрһәтеп, был юлы күрше Татарстан спортсыларына беренселекте бирергә булды. Һөҙөмтәлә, командалар буйынса Валерик Зөлҡәрнәйев тәрбиәләнеүселәре, йәғни, беҙҙекеләр - икенсе, Ульяновск өлкәһе егеттәре өсөнсө урынға ҡалды. Шәхси беренселектә Салауат батыр, Алдар батыр вариҫтары: 60 килограмм ауырлыҡ категорияһында - Илфаҡ Ибәтуллин, 65-тә - Рәмил Ғәлимов һәм 100 килограмдан ауырыраҡтар араһында Рөстәм Арыҫлановтар бронза миҙал яулаһа, 70, 85 һәм 90 килограмм ауырлығы категорияһындағы спортсыларҙан - Артур Зөлҡәрнәйев, Наил Мөхәмәтйәнов, Айгиз Зәйнетдинов республика йыйылма командаһы иҫәбен көмөш миҙалдар менән тулыландырҙы. Мәсетле районы Һөләймән ауылы егете, милли көрәш буйынса спорт мастеры, быйыл ғына өс тапҡыр Рәсәй чемпионы титулын яулаған Айгиз Зәйнетдинов менән ярыш алдынан бер талай әңгәмәләшеп алғайныҡ. Әңгәмә барышында геройыбыҙҙың бик үҙенсәлекле һыҙаттары асылды. Мәҫәлән, ул үҙ ғүмерендә бер тапҡыр ҙа спиртлы эсемлек эсеп, тәмәке көйрәтеп ҡарамаған. Замандаштарынан айырмалы рәүештә, егет социаль селтәрҙәрҙә ултырыу сире менән дә "ауырымай" икән. Батырыбыҙға көрәшсе булып китеүенең сәбәбе, көрәштә була торған ҡайһы бер хәүеф-хәтәрҙән һаҡланыу саралары, нисек баһадир кәүҙәле булыу сере тураһында һәм бөгөнгө ярышҡа ҡағылышлы бер-нисә һорау бирҙек.**



# МИЛЛИ КӨРӘШ МЕНӘН ШӨҒӨЛЛӘНӘЙЕК!

**➔ Айгиз, бөгөнгө ярышҡа әҙерһеңме, тип һораһаҡ, моғайын, урынһыҙ булыр. Шулай ҙа...**

- Физик торошом буйынса тулыһынса әҙермендер, тип уйлайым. Ни тиһәң дә, ике аҙна буйы йыйылма команда йыйынында Ҡыйғы районынан килгән талантлы тренер Валерик ағай Зөлҡәрнәйев етәкселегендә көнөнә өсәр мәртәбә бик ентекле, ҡыҙыу, хатта ҡаты күнекмәләр үттек. Унан ике аҙнанан һуң тыуған яҡтарыбыҙға ҡайтып, ял иттек. Хәйер, ял иттек, тиһәм дә, йәнә ике аҙна һуҙымында өйҙә шөғөлләндек.

Рәсәй кимәлендәге турнирҙарҙа, фестивалдәрҙә быйыл өс мәртәбә еңеп сығырға тура килде. Һуңғыһында, октябрь айында, Красноуфимск ҡалаһында (Свердловск өлкәһе) үткән "Урал кубогы"нда бала саҡтағы хыялымды тормошҡа ашырҙым - "Милли көрәш буйынса спорт мастеры" титулын яулау бәхетенә өлгәштем. Бәхет тигәндәй, шул ярыш алдынан ғына улыбыҙ донъяға килде. Ислам тип исем ҡуштыҡ. "Урал кубогы"нда еңеүемде улыма арнаным. Шулай итеп, үҙем тыуған йылҡы йылында уллы ла булдым, өс тапҡыр Рәсәй чемпионы титулын да яуланым. Кемгә нисектер - ағымдағы йыл миңә бәхет килтерҙе. Таныштарым: "Һин быйыл үҙеңдең йылың булғанға ла еңәһеңдер", - тип, уныштарымдың сәбәбен ниндәйҙер мистикаға лә бәйләй. Ә мин еңеүҙәремдең бары үҙ тырышлығым арҡаһында ғына яуланыуына инанам.

**➔ Һине әленән-әле көрәш майҙанына баҫырға, яңы үрҙәргә ынтылырға нимә мәжбүр итә? Еңеүҙәр тәмеме, үҙеңдең физик торошоңдо һаҡлау теләгеме, әллә башҡа сәбәпме?**

- Күптәр минең уңыштарымды күреп, көрәштә аҡса эшләргә була икән, тип уйлай. Көрәшеп, аҡса эшләргә була ул, әммә бының өсөн ныҡ әҙерлекле булырға кәрәк. Мин әле көрәш ярҙамында ғаиләмә етерлек аҡса эшләй алғаным юҡ. Ата-бабаларым көрәшкәс, атайым мине көрәшсе итеп күрергә хыялланғас, ошо спорт төрөн һайлағанмындыр, моғайын. Шуға күрә мине, берҙән, атайым мәрхүмдең рухын шатландырыу теләге, икенсенән, үҙемдә барлыҡҡа килгән сәмалға әйҙәй. Физик торошҡа килгәндә, алдараҡ әйтеп үткән күнекмәләргә өҫтәп, сәләмәт йәшәү рәүеше алып барыуым да ярҙам итәлер, тип уйлайым. Әгәр кеше спиртлы эсемлектәр эсмәй, тәмәке тартмай икән, уның тормошо үҙенән-үҙе яҡшы яҡҡа үҙгәрә, тормошона ҡот, йәм, бәрәкәт инә. Ә бер уңышың һинең тормошоңа ике уңыш алып килә.

**➔ Һүҙҙе йомғаҡлау рәүешендә йәштәргә "Әйҙәгеҙ, спорт менән шөғөлләнәйек!" тигән саҡырыу ташла әле.**

- Минең кәүҙәмде, физик торошомдо күргән күп кенә егеттәр минең һымаҡ көслө булырға теләптәр инде, нисек ашауҙан башлап, ниндәй күнекмәләр яһарға кәрәклегенә тиклем йыш һораша. Физик күнекмәләрҙең файҙаһы тейһен өсөн сама белергә кәрәк. Саманан тыш артыҡ көсөргәнеш алыу ҙа, саманы онотоп, үҙеңде ҡарамай, физик торошоңдо ҡайғыртмау ҙа ярамай. Күркәм, күрмәлекле булам тиһәгеҙ, иртән бутҡа ашағыҙ, тип кәңәш бирәм.

Күңел тыныслығын, рухи ҡәнәғәтләнеүҙе кешегә спорт менән шөғөлләнеү генә килтерәме икән? Бәлки, килтерәләр ҙә. Еңелсә генә темпта йүгергән саҡта барлыҡ насар уйҙар онотола бит. Йәштәрҙе мин тәү сиратта айыҡлыҡҡа, унан - сәләмәт йәшәү рәүешенә саҡырыр инем...

**Илгиз ИШБУЛАТОВ әңгәмәләште.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# ТАТЫУ БУЛАЙЫҠ!



**Ғүмер тигәнең һәр кемгә бер тапҡыр ғына, бер мәл итеп кенә бүләк ителә. Бала саҡта ғына, ошо бүләк һиңә мәңгелеккә бирелгән икән, тип уйланыла. Кем белә, бәлки, кешегә бер-нисә ғүмер ҙә биреләләр. Йән - үлемһеҙ, тигән фекер бар бит. Ә, бәлки, киреһенсә, бер кеше был донъяла тик бер генә тапҡыр йәшәйҙер. Ни булһа ла, дөрөҫ йәшәү өсөн балаларҙан фәһем алырға кәрәк.**

Улар ҡыуанысты мәлдәрҙә - ихлас ҡыуана, күңелһеҙ саҡтарҙа - ихласлап, илап ебәрә. Йәнә, сабыйҙар үтә итәғәтле, кеше йәнле, татыу, ярҙамсыл. Ә ололарҙа яһалмалыҡ, икейөҙлөлөк көслө. Оло кешеләр, намыҫы ҡушһа ла, башҡалар минән көләр бит, тип, мохтаждарға ярҙам итеүҙән дә тартынырға мөмкин.

Эшем буйынса командировкаларға күп йөрөргә тура килгәнгә күрә, кешеләр менән күп аралаштым. Ҡайҙа ниндәйерәк холоҡло халыҡ йәшәүен танып-белеп бөттөм. Үҙебеҙҙең коньяҡ-консыйыш төбәкте генә алғанда ла, ете районды аркырыһын-буйына иңләп сығырға тура килде. Иң татыу халыҡ беҙҙең күрше Әбйәлил районында, иң ойошҡан ауылдар - шунда, тип, әйтмәксемен. Һоҡланам мин уларға: береһен-береһе дәртләндереп, ярышып, донъя көтәләр, яйы сыҡҡанда, гөрләтеп, төрлө саралар үткәрәләр, күмәкләп, төрлө мәсьәләләрҙе хәл итәләр. Айырыуса Ишкилде ауылы халҡы шәп. Уларҙа эскелек тә күҙгә бәрелеп бармай, шулай булғас, тәртип боҙоу ҙа күренмәй.

Яңы йылда мин халҡыбыҙҙы татыулыҡҡа саҡырыр инем. Әйҙәгеҙ, Аллаһы Тәғәлә биргән һәр көнөбөҙҙө татыулыҡта, берҙәмлектә, ҡыуанып, шатланып үткәрәйек. Шул саҡта ғына уҙған ғүмер үкенесле булмаҫ. Һәр кем хөрмәт күреп йәшәр. Был һүҙҙәр минеке генә түгел - улар быуындан-быуынға тапшырылған, беҙҙең көндәргәсә аманат рәүешендә "Үҙеңдән башҡаны әүлиә тип бел" ише әйтемдәребеҙ рәүешендә килеп еткән. Беҙҙең бурыс - ошо аҡылды балаларыбыҙға, ейәндәребеҙгә еткереү.

**Самат БИКБИРҘИН, хеҙмәт ветераны. Баймаҡ районы Төмәс ауылы.**

**✓ *1771-1772 йылдарҙағы Польша походында башҡорт ғәскәрҙәренең составында Йәнәй улысы сташиналары Шәрип Айҙаров менән Ғәли Йәрмөхәмәтов командаларынан торған 130 йәнәй яугиры ҡатнаша.***

*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

**"Башҡорт ырыуҙары тарихы" серияһының тәүге томдары сыға башлауы тураһында хәбәр иткәйнек инде. Бөтә башҡорт ырыуҙарын да үҙ эсенә аласаҡ күләмле хеҙмәттең йәнәй, балыҡсы, гәрәй (кирәй, гирей) ырыуҙарына ҡараған өс томы сыҡты ла инде, яҡын арала унлар һәм ҡаңлы ырыуҙарына арналған томдарҙың тиражы әҙер буласаҡ. Салауат Хәмиҙуллин, Юлдаш Йосопов, Рәфил Аҫылғужин, Рөстәм Шәйхиев, Радик Рыҫҡолов, Айгөл Ғүмәрова һәм башҡаларҙан торған авторҙар коллективының хеҙмәте халыҡта лайыҡлы баһаһын табып, күптәргә үҙ тамырҙарын белергә тырышыуға, өйрәнә башлауға, аңлауға һәм таныуға этәргес булыр, тип ышанып ҡалабыҙ. Тарих фәндәре кандидаты, Башҡортостан юлдаш телеканалының билдәле журналисы Салауат ХӘМИҘУЛЛИНдың "Башҡорт ырыуҙары тарихы" серияһы, халҡыбыҙ тарихының ҡайһы бер биттәре тураһындағы яҙмаларын дауам итәбеҙ.**

# ҠАН БУЙЫНСА БАШҠОРТТАР...

## тамырҙарын иҫкә төшөрһән



### Истәктәр хаҡында

Башҡорттарҙың Көньяҡ Уралда йәшәй башлаған осоронан алып уҡ улар составына йәнәй, юрматы, юрмый, ғәйнә, бөрйән ырыуҙары инә. Н. А. Мәжитов яҙыуынса, IX-X быуаттарҙағы башҡорттарҙың мәҙәниәте күп компонентлы була, сөнки уны формалаштырыуҙа турбаслы һәм кушнаренко ҡәбиләләренең вариҫтары ҡатнаша.

Шулай итеп, йәнәй, юрматы, ғәйнә, юрмый ырыуҙары вәкилдәре Көньяҡ Урал башҡорттары араһында иң боронғоларҙан һанала. Күрәһең, тап башҡорт этносының ошо өлөшө истәк атамаһын йөрөтә. Был атама менән уларҙы башҡорттар үҙҙәре лә, башҡа халыҡтар ҙа атай. 1578 йылда нуғайҙар "Кама йылғаһы буйлап йәшәгән башҡорттарға һәм Ҡаҙан өйәҙенең истәктәренә һөжүм итәләр". Ләкин башҡорттар истәктәр менән бергә йыйылып, уларҙы ҡыуып ебәрә.

Билдәле булыуынса, Ҡаҙан өйәҙендә бер ҡасан да хантылар йәшәмәгән (һуңғы осорҙа урыҫтар тап хантыларҙы истәктәр тип атай). Тимәк, был йылъяҙмала ике айырым этнографик төркөм булараҡ күрһәтелгән башҡорттар хаҡында һүҙ бара. Икенсе ҡайһы бер яҙмаларҙа истәктәр тип бар башҡорттар телгә алына. Ҡаҙаҡтар башҡорттарҙы һуңғы осорға тиклем истәктәр тип йөрөтә. Ғөмүмән, дала ерлегендә йәшәгән төрки халыҡтар урман зонаһында йәшәгән халыҡтарҙы истәктәр тип атай.

Бында икенсе төрлө һорау килеп сыға. Ни өсөн ҡайһы берҙә башҡорттар, ҡайһы берҙә истәктәр тип телгә алына? Беҙҙең уйлауыбыҙса, башҡорттарҙың үҙҙәренең араһында шундай шартлы бүленеш була. Көньяҡ-көнсығышта йәшәгән башҡорттар төньяҡ-көнсығышта йәшәгән башҡорттарҙы истәктәр тип атай. В. В. Трепавлов "...существовало какое-то территориальное и этнографическое различие двух групп средневековых башкир: западная группа - истяки, восточная - собственно башкиры", - тип яҙа. Был бүлеү ниндәйҙер милли айырмалыҡтарға түгел, ә хужалыҡ юлдарын алып барыуға бәйле була. Ләкин улар бөтәһе лә үҙҙәрен башҡорт тип һанай. Ике төркөмдөң дә хоҡуҡи статусы бер төрлө, йәғни икеһе лә аҫабалыҡ хоҡуғына эйә була.

### Йәнәйҙәр

Йәнәйҙәр хаҡында башҡорттар рус дәүләтенә ҡушылғанға тиклем күп нәмә билдәле түгел. 1909 йылда "Шура" журналында "Йәнәй бабай" тигән риүәйәт баҫылып сыға. Был риүәйәттән күренеүенсә, йәнәйҙәрҙең ата-бабалары Әй йылғаһы буйында йәшәгән. Әммә 300 йыл элек, Йәнәй исемле бабай, уҡ һәм һөңгө менән ҡоралланып, тыуған яғын яңы ерҙәр эҙләү маҡсатында ҡалдырып китә. Ул көнбайышҡа табан Ағиҙел менән Солманға (Камаға) еткәнсе бара. Бында ул 100 мең дисәтинә ерҙең һәм урмандарҙың хужаһы була. Уның ерҙәре Йәнәй улысы, йәки Йәнәй ерҙәре исемен ала.

Был риүәйәттән сығып, йәнәйҙәрҙе Урал аръяғынан Кама буйына яҡынса XVII быуатта күсенгән, тип уйларға була. Ләкин йәнәйҙәрҙең Кама буйында йәшәүен XVII быуат менән генә сикләү дөрөҫлөккә тап килмәй. Күрәһең, был риүәйәттә йәнәйҙәрҙең Башҡортостандың көнсығыш өлөшөнә припущенниктар итеп ебәрелгәндән һуң, ҡабаттан тыуған яҡтарына ҡайтыуы тураһында һүҙ бара (Мәҫәлән, 1685 йылда Себер даруғаһы Күсәй улысы башҡорто Баҡый Аҡбулатов Әй һәм Ҡариҙел йылғалары буйындағы үҙ ерҙәренә Йәнәй улысының ауылдарынан килгән башҡорттарҙы индерә).

Рәсәй дәүләтенә ҡушылғандан һуң, башҡорт ырыуҙары батша хөкүмәтенән үҙ ерҙәренә аҫабалыҡ хоҡуғы биргән грамота алалар. Был грамотала аҫаба ерҙәрҙең сиктәре күрһәтелә. Бына шуларҙың береһе: "Лета 7148 (то есть 1640 г.) марта в 3 день били челом государю царю и великому князю Михаилу Федоровичу всея Руси, а воеводе Ивану Ивановичу Салтыкову подали челобитную Уфимского уезда, енейския волости, ясашные башкирцы Янбахтычко Кудабахтин сын Магозячко Байбахтин сын с товарищами, а в челобитной их написано: вотчина де дедов и отцов их вниз по Ику реке по обе стороны бортныя ухожия и всякие зверевые ловли и с озеры, а межи де той вотчине по Ику реке вверх тадума озера исток, да нижняя межа той вотчине по Ику реке вниз завод Уртаря, да в той вотчине озера Таралы и сыстоками и со всякоми угодьи".

Йәнәй улысының территорияһына Ыҡ йылғаһының аҫҡы ағымы, Ағиҙел, Солман (Кама) йылғалары бассейндары инә. Үҙенең географик урыны менән ул Башҡортостандың башҡа төбәктәренә ҡарағанда иртәрәк колониялаштырыу объектына әйләнә. Шул сәбәпле йәнәйҙәр күпләп башҡорт ихтилалдарында ҡатнаша. Мәҫәлән, 1704-1711 йылдарҙағы ихтилалда Мөхәммәт Яҡупов исемле мулла әүҙемлек күрһәтә. Шул уҡ ваҡытта йәнәйҙәр Рәсәй ғәскәрҙәренең тышҡы дошманына ҡаршы күп походтарҙа ҡатнаша. Мәҫәлән, 1771-1772 йылдарҙағы Польша походында башҡорт ғәскәрҙәренең составында Йәнәй улысы сташиналары Шәрип Айҙаров менән Ғәли Йәрмөхәмәтов командаларынан торған 130 йәнәй яугиры ҡатнаша.

Йәнәй ырыуы башҡорттары бер нисә түбәгә бүленә. Бөгөнгө көндә был ерҙәр ике республика территорияһында тороп ҡалған. Уларға Башҡортостандың Краснокама районы Сауыҙ һәм Сауыҙбаш ауылдары, Илеш районының Йәйләү, Ҡыпсаҡ, Турасы ауылдары, Дәүләкән районынан Сапай, Шланлыкүл, Иҫке Шығай ауылдары, Бүздәк районының Иҫке Боғаҙы ауылы, Татарстан республикаһы Әгерҙе районының Иҫәнбай, Девятерня (бер фараз буйынса - "Дәфтәр" һүҙенән, икенсе фараз - Туғыҙбай һүҙенән. Бер-береһенә яҡын урынлашҡан 9 ауыл, "Девятерня" шуларҙың туғыҙынсыһы), Үтәгән, Ҡаҙыбаш, Иҫке һәм Яңы Слак, Карат, Касай, Ғәли, Аҡтаныш районында Боғаҙы, Яңы Боғаҙы, Боғаҙкүл, Ҡалмаш, Суксы, Түбәнге һәм Үрге Үргәҙе, Салманарат, Шабыҙ ауылдары инә.

**Азамат САЛАУАТОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Ғаилә көнкүреше һәм халыҡ байрамдары

Ҡайһы бер урындарҙа халыҡ байрамдары йыйын тип йөрөтөлгән. Элегерәк, XVI - XVIII быуаттарҙа йыйын тип халыҡ вәкилдәренең съезы аталған. Унда мөһим сәйәси мәсьәләләр хәл ителгән. Көньяҡ башҡорттарында йыйын тип туй тантаналарын, йәш кәләштең күсеп китеүе алдынан ҡунаҡ ҡабул итеү һәм уларҙы һыйлау аталған. Көнсығыш райондарҙа йыйын атамаһын һабантуй урынына ҡулланғандар. Төньяҡ башҡорттарында йыйын йәрминкәгә әйләнеп киткән. Көнбайышта, һабантуйҙан башҡа, бәйге һәм көрәш йыйындарҙа ла ойошторолған. Уларға ҡунаҡтар саҡырылған һәм табын ҡоролған.

## Сәнғәт һәм фольклор

Һынлы сәнғәт башҡорттарҙа башҡарыу техникаһы һәм биҙәктәр буйынса күп төрлө булған. Мин уларҙың һәм ауыҙ-тел ижадының киң таралған төрҙәренә туҡталмаҡсымын.

Ағасҡа һырланып эшләнгән биҙәк башҡорттарҙа киң ҡулланылмаған. Уны бары тик ҡымыҙ йәки әсе бал ҡойоу өсөн файҙаланылған ижауҙарҙа, ҡымыҙ һалыу өсөн тәғәйенләнгән ҙур ағас һауыттарҙа (тәпән), һандыҡ аяҡтарында (**һүрәттәр**), ҡалаҡ һалыу кәштәләрендә (**һүрәт**), бик һирәк тәҙрә баштарында (**һүрәт**) күрергә мөмкин.





Башҡорт ижауҙары формаһы буйынса бер-береһенән әллә ни айырылмай, әммә уларҙың һаптары төрлөлөгө менән айырыла. (**һүрәттәр**) Тәпәндәр, ат егеү ҡорамалдары, ҡатын-ҡыҙҙар эйәре, ҡамыт баштары ла һырлап биҙәлгән.



Бик һирәк кенә еп иләүес, ҡабатөбө (**һүрәт**), блоктар (**һүрәт**), туҡыу станоктарының һоҫаларына (**һүрәт**) ла геометрик биҙәк төшөрөлгән. Өй эсендә бик һирәк кенә һикеләр ҙә биҙәлгән.



Тартмалы өҫтәлдәр башҡорт торлағының мотлаҡ йыһаҙы түгел, шуға күрә улар кемдәлер бар икән, тимәк, күрше халыҡтарҙан алған. Башҡортостандың көньяҡ-көнсығышында осраған шундай ике өҫтәл (**һүрәт**) биҙәлештәре менән ҡыҙыҡлы. Тап шундай биҙәктәр көнбайыш ҡаҙаҡтарҙың ҡәбер таштарында ла осрай.



Тәҙрә баштары (**һүрәт**) биҙәктәре туҡымаларҙа һәм сигелгән әйберҙәрҙә лә булыуы менән ҡыҙыҡлы. Улар араһында бигерәк тә интеграл, өтөр, йөрәккә оҡшаш фигуралар иғтибарҙы йәлеп итә. Таулы Алтайҙағы ҡаҙыныу эштәре һөҙөмтәләре күрһәтеүенсә, былай элементтар беҙҙең эраға тиклем беренсе мең йыллыҡтың урталары тирәһенә тап килә.





БАЛАЛАР ҠОРО

# ҠЫШ БАБАЙҒА ТИГӘН ХАТТЫ...

## атайға бирергә кәрәк

**Бала саҡта тыуған көндән башҡа тағы ла бик-бик көтөп ала торған бер байрам бар. Эйе, эйе, һүҙ мөғжизәле Яңы йыл тураһында. Шуның өсөн дә ул, тәү сиратта, балалар байрамы тип аталырға хаҡлылыр, моғайын. Яңы йыл, уның менән бергә килә торған бүләкле Ҡыш бабай тураһында Һупайлы бисҭәһендә урынлашҡан 308-се балалар баҡсаһы тәрбиәләнеүселәре Лиә Усманова, Айбулат Ғәлин, Арыҫлан Күсмәев, Сабина Ғибаҙуллина менән әңгәмәләшәбеҙ.**

**▶ Яңы йылды башҡа байрамдарҙан нисек айырырға була?**

**Лиә:** Иң тәүҙә күп итеп йыр өйрәнергә кәрәк. Был байрамда йырлайһың да йырлайһың инде...

**Арыҫлан:** Башҡортса тыпырлап бейергә лә кәрәк унда.

**Сабина:** Был байрамда Ҡыш бабай була. Ә әсәйҙәр байрамына ул килмәй, йылынан ҡурҡалыр инде. Ана шул Ҡыш бабайға шиғырмы, әкиәтме һөйләп күрһәтергә кәрәк.

**Арыҫлан:** Телевизорҙан күрһәткән Ҡыш бабай урыса һөйләшә, ә беҙҙең балалар баҡсаһына башҡорт Ҡыш бабайы килә! Ул беҙҙең менән башҡортса һөйләшә, йырҙар йырлай.

**▶ Ни эшләп Ҡыш бабай йылынан ҡурҡа икән һуң әле?**

**Лиә:** Ул бит Ҡыш бабай! Ул ҡышын ғына ғына килә беҙгә, ә башҡа ваҡытта һыуыҡта, төньяҡта йәшәй. Йәй килһә, Йәй бабай тип йөрөтәр инек.

**Айбулат:** Ҡыш бабайҙың таяғы була, ул таяҡ беҙҙән дә ҙур. Ул ныҡ ҡарт, шуға ҡолап китмәҫ өсөн, таяҡҡа таянып йөрөй. Ҡышын тышта ҡолап тик йөрөйөң дә инде, шунан дә ҡурҡалыр инде. Бына мин Сурай тигән ауылға өләсәйҙәргә ҡунаҡҡа ҡайтып йөрөйөм, унда Ҡыш бабайға оҡшаған бабай бар. Тик ул икенсе бабай шикелле, Ҡыш бабай ул ауылда йәшәмәҫ ине ул.

**Арыҫлан:** Танауы ҡыҙыл булһа, шул инде. Ул бабай ныҡ ҙурмы? Зәңгәр тунынан да Ҡыш бабайҙы танырға була.

**Лиә:** Беләгеҙме Ҡыш бабайҙы нисек танырға? Уның ҡулында бүләктәр һалынған ҙур тоҡ бар. Бүләктәрҙе, кәнфиттәрҙе магазиндан ала.

**Сабина:** Ҡыш бабай тураһында йәнһүрәт ҡарағайным, ул унда бүләктәрҙе үҙе эшләп ултыра ине.

**Айбулат:** Ә пингвиндар уға ярҙам итә.

**▶ Ҡыш бабай бүләк бирһен өсөн нимә эшләргә кәрәк?**

**Сабина:** Тәүҙә уға әкиәтме, шиғырмы һөйләйһең, ҡысҡырып йырлайһың, шунан ғына ул бүләк бирә.

**Арыҫлан:** Алдан хат яҙаһың, уны балконға һалаһың, ул ала ла, бүләк алып килә. Был сер инде, шулай ҙа әйтәйем әле, мин сәкән һораным. Әсәйем менән "Салауат Юлаев"тың уйындарын гел ҡарайбыҙ, үҙем дә хоккей уйнарға яратам.

**Айбулат:** Ә мин хоккей яратмайым. Боҙҙа тайып йығылып ятыуҙан ҡурҡам.

**Лиә:** Мин хат яҙырға кәрәк икәнен белмәнемсе. Шулай ҙа яҙһам, хатты балконға һалмаҫ инем, уны атайға бирер инем. Шулай нисектер ышаныслыраҡ. Ҡыш бабай ҡурсаҡ алып килһә, атай уны тапшырырға онотмаған була.

**Сабина:** Гәзиттә бер уйынсыҡ күргәйнем, шул оҡшап ҡалды, хәҙер гел шуның тураһында ғына уйлап йөрөйөм. Әсәйем Ҡыш бабайға хат яҙғанда, шул уйынсыҡты һораныҡ. Ә беләһеҙме, Ҡыш бабайҙан һораған бүләкте аҡса йыйып, үҙенә һатып алырға ла була инде.



**Арыҫлан:** Ә мин үҙемә планшет һатып алдым тыуған көнгә биргән аҡсаға. Балыҡ формаһында аҡса йыйыусым бар, Шәһит исемле ағайым бар, ул да аҡса йыя. Уның планшеты бар, аҡсаһына нимә алыр икән?

**Сабина:** Аҡса булһа, уны һалырға аҡса муҡсаһы кәрәк, унһыҙ уны юғалтаһың, тип, гел ҡарап йөрөргә кәрәк, бигерәк мәшәҡәт инде.

**▶ Бәләкәй балалар Яңы йылға нисек әҙерләнеүе тураһында һөйләштек, ә өлкәндәр был байрамды нисек үткәрә?**

**Лиә:** Улар иң тәүҙә шыршы ҡуялар, шунан беҙгә бик күңелле була. Шыршының аҫтына бүләктәр һалалар.

**Сабина:** Шарҙар эләһен, тәрлә төҫтә. Беҙ байрам алдынан ғына ҡуябыҙ шыршыны. Былау, бәлеш бешерә әсәйҙәр. Сәй ҡайнатабыҙ. Матур сынаяҡ ҡуяһың өҫтәлгә. Салют аттырырға була. Балаларға салютҡа, теге таяҡлы бенгаль утына тейергә ярамай. Сөнки уларҙы тоҡандырыу өсөн шырпы кәрәк. Ә шырпы менән уйнаһаң, янғын сығыуы бар.

**Арыҫлан:** Беҙ ағайҙар менән шыуа торған тау эшләйбеҙ. Ҡарҙы өйәһең дә, һыу ҡойоп ебәрәһең.

**Сабина:** Әсәйҙәр балаларын видеоға, фотоға төшөрә, был байрамда уларҙың төп эше шул. Аҙаҡтан атайға, апайҙарға күрһәтер өсөн. Балалары ла аҙаҡтан ҡарай ҙа, нисек матур булып йөрөгәндәрен белә. Ҡыҙҙар байрамға күлдәктәрҙә килә, малайҙар - костюм менән шортикта. Ҡыҙҙар баштарына таж кейә, матур булһын өсөн.

**Айбулат:** Матур булһалар ҙа, ҡыҙҙар менән уйнарға яратмайым. Малайҙар менән генә дуҫлашам.

**Арыҫлан:** Мин ҡыҙҙар менән дә уйнайымсы. Шулай ҙа малайҙар менән ҡыҙығыраҡ инде.

**Лиә:** Атай менән әсәйҙәр был байрамда беҙҙең менән конькиҙа шыуа, ҡар бәрешеп уйнай, ҡар бабай эшләй.

**▶ Ә Ҡыш бабай менән Ҡар бабай бер-береһенән нимәһе менән айырыла?**

**Арыҫлан:** Улар оҡшамағандар, ҡар бабайҙы ҡарҙан эшләйһең, ул йоморо ғына.

**Сабина:** Ҡар бабайҙың бына ошо ере - эсе түңәрәк. Ҡыш бабайҙың танауы беҙҙеке һымаҡ, ә Ҡар бабайҙыҡы - кишер. Ҡулы таяҡтыҡай, төймәһе ҡара төҫтә. Тишек тишеп, күҙ, ҡаш менән танау эшләргә була. Ҡар йәбешкәк булғанда ғына Ҡар бабай эшләргә ярай.

**Арыҫлан:** Күҙе лә төймәләре кеүек, ҡыҙыҡ ҡына. Ҡыш бабай бүләк таратһа, ул тик тора, ә бына уның эргәһендә йырҙар йырларға була.

**▶ Яңы йылда бер-берегеҙҙе нисек ҡотлайһығыҙ?**

**Сабина:** Яңы йыл менән, дуҫтар, тип әйтергә кәрәк.

**Арыҫлан:** Балалар тыңлаулы булһын, шул саҡта әсәйҙәр ҙә, Ҡыш бабай ҙа уларҙы яратасаҡ, бүләктәр бирәсәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Йыл һайын ҡабатланған был Яңы йылды өлкәндәр ғәҙәти байрам ғына итеп ҡабул итһә лә, балалар өсөн ул һәр ваҡытта ла ысын мөғжизәләр мәле булып ҡаласаҡ. Шулай ҙа был мөғжизәләр өсөн өлкәндәр яуаплы булыуын иҫәпкә алғанда, бөгөнгө ҡунаҡтарыбыҙ Ҡыш бабайға тәғәйенләнгән хатты урынына еткереп тапшырыусы ышаныслы атайҙарынан, балаларҙың байрамы яҡшы үтеүе өсөн күп тырышлыҡ һылған әсәйҙәренән, бала өсөн милли мөхиттең мөһимлеген аңлаған тәрбиәселәренән дә уңған. Улар байрамға туған телендә йырҙар, шиғырҙар әҙерләй, хатта Ҡыш бабайҙары ла уларҙың телендә һөйләшә. Ә һеҙҙең Ҡыш бабайығыҙ башҡорт телен аңлаймы?**

**Ләйсән НАФИҠОВА әңгәмәләште.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# ЙОҠОҒА ВАҠЫТТЫ АҘЫРАҠ БҮЛӘЙЕК!



**Был хәл студент саҡта булды. Төнгө 4-кә тиклем имтиханға әҙерләнеп ултырғанда Арсен Ниязголов атлы Әбйәлил районы Асҡар ауылы егете, экология бүлеге студенты, бер хәбәр әйтеп аптыратты: баҡтиһәң, ул йоҡоға ваҡытын бик аҙ бүлә икән.**

"Ни өсөн үҙеңде улай яфалайһың?" тип һорауыма: "Аҙ йоҡлау минә бер ниндәй ҡыйынлыҡ тыуҙырмай. Кеше ғүмере былай ҙа ҡыҫҡа ғына, үҙ ғүмеремдә ул ошо донъяның бөтөн матурлығын аңлап та бөтә алмайһың, моғайын. Ә мин көндөҙ ҙә, төнөн дә ошо донъя менән танышам, төнгө ҡүктәге йондоҙҙарҙы байҡайым, ҡоштар тауышын, төнгө тынлыкты тыңлайым", - тип яуап бирҙе. Мин уның һүҙҙәрен сәйерһенеберәк ҡабул иттем."Йоҡоң килеүен нисек баҫаһың һуң?" тип һорауыма, Арсен: "Минең йоҡом да килмәй ул, өс-дүрт сәғәт серем итеп алһам, көн буйына уяу йөрөйөм", - тип яуапланы.

Кәмендә 5-6 йыл үтһә лә, был һөйләшеү оҙаҡ онотолманы. Яңыраҡ, төн уртаһында уяныып, күҙҙе йоҡо алмай ятҡанымда, ошо һөйләшеү тағы иҫкә төштө. Иртәгеһенә Арсендың телефонын табып, шылтыратырға булдым. "Аҙнаһына бер тапҡыр ҡәҙимгесә йоҡлайым да, ҡалған көндәрҙә өс сәғәт йоҡлау ҙа етә", - тип яуапланы баяғы сәйер ғәҙәте тураһында һорауыма.

Ғәжәп бит! Ә белгестәр, кешегә тәүлегенә 7-8 сәғәт йоҡо талап ителә, ти. Был ниндәй тикшереүҙәргә нигеҙләнеп раҫлана икән? Ә бит көн-төн хеҙмәттә ҡайнаған оло быуын кешеләренән - олатай-өләсәйҙәрҙән дә аҙ йоҡлап, күп эшләүҙәре тураһында ишеткән булды.

Бәлки, беҙҙең быуын өсөн уйлап сығарылғандыр был "тәүлегенә 7-8 сәғәт йоҡо талап ителә" тигән кәңәш. Беҙҙең быуындың олатай-өләсәйҙәребеҙ быуыны һымаҡ уҡ физәҡәр хеҙмәт эйәләре булмауыбыҙҙа, бәлки, ошондай рецепт та ҡамасау итәлер? Беҙ бит, ваҡыт юҡ, өлгөрмәйбеҙ, тип йәшәйбеҙ. Телебеҙҙә ошо зар булмаһын өсөн, бәлки, Арсен кеүек, йоҡоға ваҡытты аҙыраҡ, ә ҡыҙыҡһыныуҙарға, асыштар эшләүгә, маҡсаттарҙы ысынбарлыҡҡа әйләндереүгә күберәк бүлергә кәрәктер, ә?

**Иҙел РӘХИМОВ.**

**"Егерме йылдан "Мин халҡыма файҙа килтерерлек ҡайһы бер эштәр эшләнем" тигән уй менән йәшәргә теләр инем", - тип йылмая Илдар. Ысынын әйткәндә, унан мин башҡа яуап көтмәгәйнем дә. Илдар Кинйәбулатов башҡорт интернеты булдырыуға тәү башлап юл ярыусыларҙың береһе - ул "Бәйләнештә" социаль селтәренең интерфейсын туған телгә тәржемә итте, Android һәм Mac OS өсөн башҡорт клавиатураһын сығарҙы, "Юлдаш" һәм "Ашҡаҙар" радиолары ҡушымтаһын булдырҙы. Әлеге көндә иһә ул башҡорт электрон китапханаһы өҫтөндә эшләй. Ә егерме йылдан унан нимә көтөргә? Уның үҙе менән әңгәмәләшәбеҙ.**

# БАШЫМА ҠЫҘЫҠЛЫ ИДЕЯ КИЛӘ ИКӘН,

## мин шунда уҡ уны ғәмәлгә ашырырға тотонам

**➔ Илдар, тәүҙә һинең тамырҙарың тураһында һөйләшеп үтәйек...**

- Сығышым менән Стәрлетамаҡтанмын. Ҡала мөхитендә үҫһәм дә, миндә бала саҡтан милли мәҙәниәткә һөйөү тәрбиәләп үҫтерҙеләр - әле лә әсәйем һөйләгән башҡорт халыҡ әкиәттәре хәтерҙә. Мәктәптә уҡыған йылдарҙа һүрәт төшөрөү, дизайн һәм музыка менән ҡыҙыҡһындым. Композитор булам, тип хыялланған ваҡыттар ҙа булды. Юғары кластарҙа автомобиль дизайны менән ныҡлап мауыға башланым. Ул ваҡытта был һөнәргә Рәсәйҙең өс ҡалаһында - Мәскәүҙә, Санкт-Петербургта һәм Екатеринбургта ғына уҡыталар ине. Атай-әсәйем ҡаршы булыуына ҡарамаҫтан, мин илдең баш ҡалаһын һайланым. Күрәһең, интуитив рәүештә үҙәккә тартылғанмындыр. Бында Мәскәү дәүләт машина төҙөү университетында (МАМИ) уҡып сыҡтым.

**➔ Белеүем буйынса, хеҙмәт юлын һин Өфөлә башлағанһың?**

- Эйе, Өфөгә күсеп ҡайтырға тура килде. Йәшәргә урының, бер ниндәй ярҙамһыҙ һәм тәжрибәһеҙ көйө хеҙмәт юлын Мәскәүҙә башлау ауыр булыр ине. Өфөлә полиграфияла график дизайнер булып эшләй башланым. Был үҙенсәлекле өлкәлә миңә бар нәмәгә яңынан өйрәнергә тура килде. Әммә тиҙҙән мин үҙемдә икенсе тармаҡта һынап ҡарарға теләнем һәм веб-дизайн менән шөғөлләнә башланым. Тейешле кимәлгә еттем, тигән ышаныс тыуғас, тағы Мәскәүгә юлландым. Тәүҙә "Комсомольская правда" гәзитендә эшләнем, әйтеп үтергә кәрәк, уның әлеге сайтына минең дә ҡулым тейгән. Тиҙҙән мине Мәскәүҙең топ студияларының береһенә эшкә саҡырҙылар.

**➔ Нисек итеп һин башҡорт проекттары менән шөғөлләнә башланың?**

- 2010 йылда III Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайын ойоштороуҙа ҡатнашҡан апайым минән башҡорт халҡының үсеш проблемалары тураһында фекеремде һораны. Был темаға тәүге етди уйланыуҙарым тап шул саҡҡа тура килә, буғай. Ә тәүге проектымдың барлыҡҡа килеүе атайымдың планшет алыуына бәйле. Унда башҡортса яҙа алмауы яҡын кешемә ҡыйынлыҡ тыуҙырҙы. Мин был хәлде төҙәтергә булдым һәм ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә дуҫтарым ярҙамында Android өсөн башҡортса клавиатура булдырҙым. "Бәйләнештә" селтәрен башҡортсаға тәржемә итеү артабанғы ҙур эшем булды. Был эштә бихисап яҙыусылар, журналистар, уҡытыусылар һәм студенттар ҡатнашты. Улар ҙа ошо дөйөм эштән ҙур тәжрибә һәм кинәнес алғандыр, тип ышанам. Mac OS өсөн клавиатураны иһә тәү сиратта үҙем өсөн сығарҙым. Аҙаҡтан бәләкәйерәк күләмле проекттар барлыҡҡа килде, улар араһында башҡортса радио ҡушымтаһын, башҡорт һәм татар теленә ҡулайлаштырылған яңы шрифттарҙы, "Бәйләнештә" селтәрендәге иң популяр туған телдәге төркөмдәр рейтингын билдәләп үтә алам.

**➔ Һеҙҙән һәр ваҡыт шундай көтөлмәгән проекттар көтөп өйрәнгәнбеҙ инде - киләһе аҙымығыҙ ниндәй булыр?**

- Бөгөнгө көндә башҡорт электрон китапханаһы булдырыу буйынса эшләйбеҙ. Был проект башҡалар менән сағыштырғанда иң мөһиме булырға оҡшай, сөнки ул милли әҙәби ҡомартҡыны һаҡлап алып ҡалыуҙа бик ҙур роль уйнаясаҡ. Әйтеп үтергә кәрәк: сайтты булдырыу - ул эштең иң бәләкәй өлөшө. Китапхананы тултырыу күпкә ауырыраҡ буласаҡ. Уйыбыҙ буйынса, унда күпселек башҡортса китаптар инергә тейеш. Шулай уҡ буласаҡ етди проекттар исемлегенә быйыл Өфөлә үткәреләсәк вики-һабантуйҙы индерер инем. Был масштабтағы сара быға тиклем тик Мәскәүҙә уҙғарылды. Ғөмүмән, мине башҡорт википедияһының үсеше ҡыуандыра.

**➔ Илдар, бөтә был эштәр һиңә матди файҙа килтермәй шикелле...**

- Рунет әлеге ваҡытта Башнет үсешкән схема буйынса ошо кимәлгә еткән. Уны булдырыу өҫтөндә энтузиастар эшләгән - әлеге ваҡытта улар ҙур интернет-бизнесмендар. Был йәһәттән минең эшмәкәрлегемдә ҙур күләмле бизнес-проект тип ҡарарға була. Икенсе яҡтан, бөтә нәмәнән тик файҙа ғына көтөп ултырып булмай бит. Халҡыбыҙҙың үсеш кимәлен, башҡа милләттәр алдындағы йөҙөн беҙ билдәләйбеҙ. Шуға күрә үҙемдә ҙур яуаплылыҡ тоям.

**➔ Башҡорт интернетының күләмен рунеттыҡы менән сағыштырып булмайҙыр ул...**

- Миҫалдарҙы тик Рәсәй интернет киңлегендә генә эҙләү дөрөҫ юл түгел - ҡайһы саҡ донъя тәжрибәһенә таяныу бик файҙалы. Беҙҙең һөйләшеү сиктәрендә Эстония һәм Баскылар иле миҫалдары бик уңышлы. Эстон милли интернеты бөгөнгө көндә бик алға киткән, ул хатта беҙҙең рунет өсөн өлгө булып тора. Ә уның халҡы ни барыһы 1 млн. кеше тәшкил итә (ә



башҡорттар - 2 млн!) Эстон телендә 34 мең сайт иҫәпләнә! Ә Баскылар иле миҫалы нисек итеп икенсе дәүләт эсендә уңышлы үҫешеп була икәнен күрһәтә. Шул иҫәптән милли интернет йәһәтенән дә.

**➔ Башнетта һиңә конкурент булырлыҡ кешеләр бармы?**

- Барлығында шигем юҡ. Беҙҙең халыҡ алдында етди мәҙәни проблемалар торғанын иҫәпкә алғанда, ундай кешеләрһеҙ булмай.

**➔ Етди мәҙәни проблемалар тиһеңме?**

- Тап шулай. Беҙҙең мәҙәниәттең эстәлегенә ҡараш 90-сы йылдарҙан бирле бөтөнләй үҙгәрештәр кисермәне. Үкенескә күрә, беҙгә күп йылдар араупында совет заманы миҫалы берҙән-бер өлгө булып торҙо. Хатта был ҡарашты үҙгәртергә маташыуҙар ҙа булманы. Хәҙер был процесс урынынан ҡуҙғалды кеүек - мәҫәлән, башҡорт рок өлгөләре ошо хаҡта һөйләй. Музыканттар төп мәҙәни кодтарҙы ҡулланып, беҙҙең музыкаль сәнғәттең үҙ вариантын тәҡдим итә.

**➔ Милли процесс дизайн һәм архитектура өлкәһендә нисегерәк сағылыш таба?**

- Был өлкәләрҙә ниндәйҙер алға китеш тураһында бөтөнләй һүҙ алып барып булмай. Дизайн өлкәһен ҡарайыҡ. Бөгөн беҙҙең мәҙәниәткә хас булмаған бер нисә орнамент ҡына бар ерҙә ҡулланыла. Ә башҡорт архитектураһы тигән төшөнсә бөтөнләй юҡ. Ни эшләптер, бөгөн һәр кем башҡорт тирмәһен ҡулланырға ынтыла. Урамда XXI быуат, ниндәй тирмә ти ул! Бөгөнгө көндә Өфөлә туристар ҡарарлыҡ бер нимә лә юҡ. Берҙән-бер уңышлы өлгө - Конгресс-Холл бинаһы, һәр хәлдә, унда архитектор милли үҙенсәлекте күҙ уңында тоторға тырышҡан. Әйткәндәй, Татарстанда был эш күпкә алға киткән.

**➔ Бөгөн Рәсәйҙә генә түгел, ә бөтөн донъя кимәлендә мәғлүмәти һыуһыш бара. Ошо өлкәлә эшләгән кеше булараҡ, дөрөҫ мәғлүмәтте эҙләү буйынса ниндәй кәңәштәр бирерһең?**

- Мәғлүмәт сараһының намыҫлылығы уның аудиторияһының күплегенән тормай икәнен онотмаҫҡа кәрәк. Бөтә фекерҙәрҙе лә тыңлау, мәғлүмәт табыу өсөн альтернатив юлдар эҙләргә кәрәк - тик шунда ғына донъяның объектив картинаһын күҙ алдына килтереү мөмкин. Әйткәндәй, социаль селтәрҙәр ҙә бындай мөмкинлектәрҙе бирә. Пропаганданан иһә бөтөнләй ҡасырға кәрәк.

**➔ Патриоттар үҙ тыуған ерендә йәшәргә тейешме?**

- Үҙ өлгөмдә яуап бирәм. Мин белгес булараҡ, Мәскәү дизайнерҙары төркөмөнә, корпоратив мөхиткә тулыһынса ингәнмен. Баш ҡала шарттары миңә профессиональ яҡтан камиллашырға киң мөмкинлектәр бирә. Шул уҡ ваҡытта мине башҡорт халҡы менән ныҡлы ептәр бәйләй, ҡулымдан килгәнсе, уның үҫешенә үҙ өлөшөмдө индерергә тырышам. Был осраҡта Мәскәү ҡалаһында йәшәүем һәм милли ҡиммәттәргә тоғро булып ҡалыуым бер-береһенә ҡамасау итмәй, киреһенсә, минең тормошома мәғәнә өҫтәй. Иң уңышлы халыҡтар үҙ үсешен ниндәйҙер территорияға ғына бәйләмәй. Был йәһәттән татарҙар һәм йәһүдтәр миҫалын килтерә алам.

**➔ Илдар Кинйәбулатовтың тормош ҡағиҙәләре бармы?**

- Әлбиттә! Әгәр башыма ниндәйҙер ҡыҙыҡлы идея килә икән, мин шунда уҡ эшкә тотонам. Кешеләрҙе лә һүҙенә түгел, ә эшенә ҡарап баһалайым.

Мин һәр саҡ нимәлер өйрәнәм. Минең өсөн белем алыу туҡтауһыҙ бара.

Ваҡытымдың күп өлөшөн үҙ тормошомдо анализлау ала. Дөрөҫ юлдан бараммы, ниндәй кимәлдә торам икәнен аңлап йәшәү минең өсөн бик мөһим.

**➔ Әйткәндәй, белем алыу тураһында. Бөгөнгө көндә уңышлы булыу өсөн диплом мөһимме?**

- Был кешенең ниндәй тармаҡта эшләүенә бәйләнгән. Ҡайһы бер өлкәләрҙә махсус белемһеҙ бөтөнләй булмай. Мәҫәлән, медицинаны алайыҡ. Ә яңы иҡтисад профессияларында был ҡағиҙә бөтөнләй эшләмәй. Шәхсән дизайн өлкәһендә шулай. Күҙ алдығыҙға килтерегеҙ - эшкә яллаусыға ике дәғүәсе килә. Беренсеһенең инендә - ошо йүнәлеш буйынса биш йыллыҡ эш тәжрибәһе, икенсеһенең ҡулында - диплом. Был осраҡта кемде эшкә алырҙар, тип уйлайһығыҙ?

**➔ Һине нимә илһамландыра?**

- Прогресс осонда йәшәүсе кешеләр илһамландыра. Ундай кешеләрҙе йәмғиәт ҡабул итмәҫкә лә мөмкин. Улар ниндәйҙер асыштар эшләй һәм бер нисә тиҫтә йылдан һуң ғына ул асыш ғәмәлгә ашырыла. Музыка өлкәһендә - композитор-минималистар Джон Кейдж, Филипп Гласс, һынлы сәнғәттә - Казимир Малевич, Василий Кандинский, Марк Шагал, Эль Лисицкий, IT өлкәһендә - Стив Джобс.

**➔ Остазың бармы?**

- Юҡ, мин үҙ хаталарымда өйрәнәм...

**Фәйгөл ЮНЫСОВА,**
**Мәскәү ҡалаһы Рәсәй дәүләт физик культура, спорт, йәштәр һәм туризм университеты студенты.**

ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Илдар Кинйәбулатовтың яратҡан китаптары: Ф. Заппа "Френка Заппаның ысын китабы", Ли Куана Ю "Өсөнсө донъянан - беренсегә. Сингапур тарихы", С. Айтматов "Быуаттан оҙайлыраҡ көн", М. Кәрим "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ";**

**Яратҡан фильмдары: А.Тарковский "Көҙгө", француз һәм итальян яңы тулҡынының фильмдары, режиссер О. Иоселианиҙың эштәре;**

**Девизы: "Аҙнаһына туҡһан сәғәт эшләйбеҙ".**

***✓ Кем булырға мөмкин? Ҡапыл яңғыраған ҡыңғырау тауышынан, ярһып ҡыуанды ла, был бары мираж ғына булып ҡуймаһын, тип, шул уҡ секундта ҡурҡып битен ҡапланы. "Кем булһа ла булһын, тик ул ғына булһын".***




Өс минуттан Ғәлиә эргәләге баҙарҙа шыршы һайлай ине инде. Быға тиклем уның бер тапҡыр ҙа үҙе һайлап шыршы алғаны булманы. Шуға ла әле ҙурҙарын, әле бәләкәстәрен тотҡолап икеләнде.

- Ҡунаҡтарығыҙ күп булһа, танцы-маҙарға ҡамасауламаһын өсөн бәләкәйерәкте ҡарағыҙ, аҙ булһағыҙ инде, ҙурырағын алырға була, - һатыусы егет бик аҡыллы төҫ сығарып, кәңәштәрен бирҙе. Ғәлиә иһә: "Ә бөтөнләй яңғыҙ булһаң?" - тип әсе генә һүҙ атмаҡсы ине лә, тупаҫлыҡтың урынһыҙ һәм ваҡытһыҙ икәнлеген аңлап, өндәшмәне. Уның яңғыҙ булыуында шыршы һатыусының ни ғәйебе бар?

- Бына ошо шыршыны алығыҙ. - Ҡыҙ таныш тауышҡа йәлп итеп боролоп ҡарауға кисәге Шакир ағайҙың ҡунағын күрҙе. Теге уртаса оҙонлоҡтағы бик ҡупшы ғына шыршыны алып, уға һондо. - Һеҙҙең фатирға ошоһо яҡшы булыр.

Ғәлиә шыршыға тотонорға ашыҡманы:

- Һеҙ минең фатирҙы ҡайҙан беләһегеҙ?

- Һеҙҙеке лә Шакир ағайҙыҡы кеүектер бит. Мин дә уға ошо ҙурлыҡтағын һайлайым.

- Шакир ағайға шыршы кәрәкме? - ҡыҙ, мыҫҡыллап, ирен ситтәрен ҡыйшайтты.

Тик тегеһенең артыҡ иҫе китмәне. Бары тик:

- Нишләп кәрәкмәһен, матурлыҡ һәр кемгә лә кәрәк, - тип, ике шыршыны ла алып, йортҡа ҡарай китте. Ғәлиәгә түләй һалып, тая-тая уның артынан йүгерергә генә ҡалды.

Ҡайтып еткәнсе ләм-мим һөйләшмәнеләр. Ир кеше ҡыҙҙың шыршыһын ишеге төбөнә һөйәне лә, үҙҙәренә инеп тә китте.

Был шыршыны ултыртыу ҙа бер мәшәҡәт икән. Ултырғысты баш түбән ҡуйып, шуның эсенә нығытып та, мөйөштәге торбаға бәйләп тә ҡараны - ҡолай ҙа китә, ҡолай ҙа китә. Нишләргә, иҙәндә ятҡан килеш биҙәп булмай бит инде. Ғәҙәттә, был фатирҙағы бар ирҙәр эшен Шакир ағай башҡара торғайны. Ул крандарҙы алмаштырһын тиһеңме, электр приборҙарын йүнәтһенме, телевизор, һыуытҡыс боҙолһонмо, яңы мебелде йыйыу булһынмы - барыһын да шул алтын ҡуллы ағай башҡарҙы... Айыҡ булғанда, әлбиттә. Ул саҡта күршеләр һәр ваҡыт татыу, гәпләшеп ултырып, яйлап сәй эсә, ҡыҙ яңғыҙаҡ өлкән кешене тәмле бәлештәр, аштар менән һыйлай, өҫ-башын йыуып, бөтәйтеп бирә, сөнки тегеһе бер ваҡытта ла хаҡ алмай, көсләп тә тottороп булмай үҙенә. Ә бына эсеп алһа - бөттө, алмаштырған кеүек була ла ҡуя кеше.

Айыҡманы микән?... Инде оҙайлы ваҡыт шыршы менән "көрәшкән" ҡыҙҙың күршеһенә барып шаҡыуҙан башҡа сараһы ҡалманы. Ишекте теге әҙәм асты.

- Һаумыһығыҙ, тағы ла бер тапҡыр. Шакир ағай ни хәлдә?

- Арыу, - ир кеше быға ни булған тигән кеүек ҡарап ҡатты.

- Айыҡмы? Айыҡ булһа, миңә шыршы ултыртып бирмәҫме икән?

- Айығыуын айыҡты ул, әммә... йоҡлай бирһә, тигәйнем.

- Ә-ә, ярай улайһа, - Ғәлиә ҡырт боролоп китеп, үҙ ишегенә тотоноуға, теге кеше уның артына уҡ килеп тә баҫты:

- Рөхсәт итһәгеҙ, мин ҡуяйым...

- Һеҙ?... Белһәгеҙ...

Иҙән уртаһында аунап ятҡан, улай-былай һөйрәткеләп йөрөткәндән арыуыҡ энәләрен ҡойоп өлгөргән мәхлүк шыршыға бер генә күҙ һалды ла, фатирына кире барып, ағас киҫәктәре, бысҡы-сүкештәр тотоп килеп, эшкә лә кереште был. Ярты сәғәттән тороп та баҫты шыршыһы һәм үҙенең ҡупшылығы, күркәмлеге менән өйҙө йәмләп ебәргәндәй булды. Был күренештән бөгөнгө көндә тәүге тапҡыр ихлас йылмайып ебәрҙе Ғәлиә. Ысынлап күңелле булып китте. Уға ла байрам килә бит!

- Һеҙгә йылмайыу килешә. Ҡышҡы ҡояш кеүекһегеҙ.

"Абау! Нимә һөйләй был әҙәм? Ни тигән була шул?.." Ҡыҙ күҙҙәрен селт-селт йомғолап, иргә боролоп уҡ ҡараны:

- Эсеп тә өлгөргәнһегеҙме?

Хәҙер инде тегегә аптырауға сират етте:

- Нишләп сразу "эсеп"?

Мәғәнәһеҙерәк хәбәр һалғанын аңланы Ғәлиә лә. Нимә әйтергә белмәй ыуаланды. Тегеһе сығыуға ыңғайланы. Ҡыҙ ашығып:

- Рәхмәт... - тине лә, исемен әйтә алмағас, туҡтап ҡалды.

- Ғаяз. Исемем Ғаяз минең, Ғәлиә, - ишек иплəп кенә ябылды.

Көндөң бер аҙ ваҡыты шыршыға уйынсыҡтар, аҙыҡ-түлек һайлап алыуға бағышланһа, ҡалған өлөшө бешеренеп-төшөрөнөүгә арналды. Зал уртаһындағы түңәрәк өҫтәлен әллә ни төр аш-һыу менән ябып, күҙ ҡамаштырырлыҡ итеп биҙәп ташланы, әйтерһең дә, бер өй ҡунаҡ саҡырған. Юҡ, был хаҡта уйламаны ҡыҙ, ә бары бик яҡын, ғәзиз кешеләрен көткәндәй, уларҙың күңелен табыу өсөн тырышҡандай ашығып, йүгермәләп йөрөп бөхтәләп теҙҙе аҙыҡтарын. Һәр бер тәрилкәһенә күңел йылыһын, берәүгә лә билдәле булмаған йөрәк наҙын, матурлыҡ яһай белеү һәләтен һалды.

Һыу менән эште бөтөргәс, ҡысҡыртып музыка ҡуйҙы, шыршыһының уттарын ҡабыҙҙы ла душ ҡойоноп алырға булды. Ләззәтләнеп йылы һыу аҫтында торғанда ла, фен менән сәстәрен киптереп, бер ыңғайға һалып маташҡанда ла, макияж һылап булашҡанда ла уның мейеһенә "Кем өсөн былар барыһы ла? Кем килә һиңә!" тигән һалҡын уйҙар быраулап инергә тырышты. Ләкин ҡыҙ, еңмешләнеп, был ҡара уйҙарҙы кире ҡаҡты, йәненә бахырланырға, бирешергә ирек бирмәне. Һикереп төшөп йә тыптырлап бейеп китте, йә ҡысҡырып йырлап ебәрҙе, күлдәгенең дә иң яратҡанын - һомғоллоҡ, нәзәкәтлек биргәндәй булған ялтыр нағыштар менән биҙәлгән ҡараһын кейҙе. Хатта быға тиклем бер ваҡытта ла ҡыланмағанын ҡыланды - әллә нисә йыл үҙ мәлен көтөп, шифоньер төбөндә ултырған осло үксәле ялтыр туфлийҙарына менеп баҫты. Унан һаҡ ҡына атлап китте. "Аһа, атлай ала ла һуң! Ә ул былдайҙа йөрөй белмәйемдер тип, көлкөгә ҡалырмын тип, яҡын да килмәгән була". Шул килеш көҙгө алдына килде. Әллә күпме тырышыуынан һуң Ғәлиәгә ҡаршыһына үтә лә сибәр ҡыҙ килеп баҫыр кеүек ине, тик һаман да шул уҡ таржыҡ танауҙы, ҡапыс күҙҙәрҙе һәм алма шикелле булып алһыуланған йоморо сикәләрҙе күрҙе. "Йә... ары нимә?.." Күҙҙәренең эсен әсе йәш өттө. "Юҡ! Ярамай! Иларға ярамай - тушь аға!" Тик йәштәре ҡыҙҙың эстән асырғанып ҡысҡырыуын ишетмәне, ҡара буяуҙы ҡушып алып, юлаҡ-юлаҡ эҙ ҡалдырып йүгерештеләр...

Кем булырға мөмкин? Ҡапыл яңғыраған ҡыңғырау тауышынан, сүллектә аҙашып хәлһеҙләнгәндә ҡоҙоҡ күреп ҡалған шикелле, ярһып ҡыуанды ла, был бары мираж ғына булып ҡуймаһын, тип, шул уҡ секундта ҡурҡып битен ҡапланы. "Кем булһа ла булһын, тик ул ғына булһын. Кемгә лә сикһеҙ шат буласаҡ ҡыҙ бөгөн, кемде лә оло ҡунаҡ итеп ҡаршы аласаҡ. Ете ят әҙәм булһын, яңылыш килеп юлыҡҡаны булһын, да хет шайтан үҙе булһын, әммә кемдер килһен бында бөгөн... Юғиһә, ул аҡылдан яҙасаҡ..."

Ғәлиә йәштәрен яҙа-йоҙа һөртөп, ишеккә ташланды. Китеп бара күрмәһен!

Унда, эстән таптыр-топтор йүгереп килеп, ишекте ҡапыл шар асып ебәреп, әллә иларға, әллә көлөргә маташҡан ҡыҙҙың сәйер ҡылыҡтарын нисек баһаларға ла белмәй, һағайып ҡарап, Ғаяз тора ине. Ҡулына ябай тәрилкәгә өймәләм итеп һалынған салат тотоп алған булған. Ҡыҙ берсә зәңгәр күлдәк, ҡара салбар кейеп, бөхтәләнеп алған иргә, берсә сөгөлдөр менән тоҙло кәбеҫтәнән әтмәләнгән салатҡа алмаш-тилмәш күҙ йүгертте. Ахырҙа, Ғаяз тәрилкәһен һуҙҙы:

- Һеҙгә Шакир ағай байрам күстәнәсе ебәргәйне.

- Ш-шакир ағай... Үҙе ҡайҙа, нишләп инмәй?

- Ауырып тора, ятты инде...

- Яттымы... Ула-ай... Ә һеҙ.... Әйҙә, үтегеҙ. Ун биш минуттан Яңы йыл бит инде.

Тегеһе был көтөлмәгән саҡырыуға ни тип яуапларға ла белмәй, ҡыҙҙың яурыны аша эскә күҙ һирпте лә:

- Һеҙ кемдәрҙелер көтәһегеҙ, буғай, - тине.

- Һеҙҙе, - был яуаптан егет тә, хатта ҡыҙ үҙе лә бер килкегә телһеҙ ҡалды.

Эйәртенешеп эскә үттеләр. Ғаяз өҫтәлдәге һығылып торған һый араһына үҙенең ҡулындағыһын ҡуйҙы ла, ирекһеҙҙән көлөп ебәрҙе. Уны күҙәтеп торған ҡыҙ ҙа көлдө.

- Бында иң шәбе минең салат булып сыҡты.

- Зыян юҡ. Әйҙә, һеҙ йәһәтерәк шарапты асығыҙ, мин аш килтерәм.

Ике-өс минут эсендә был эштәрҙе башҡарып, ҡара-ҡаршы ултырышып алдылар. Икеһе лә шундай шат, шундай ҡәнәғәт, ауыҙҙарын йыйып ала алмай теклəшәләр. Әйтерһең дә, осраҡлы ғына таныштар түгел, ә күптән бер-береһен белгән, хатта ки, бер-береһен өҙөлөп һөйгәндәр.

- Ашағыҙ! - Ҡыҙ был һүҙҙәрҙе илһамланып әйтә.

- Ашайым...

- Эсегеҙ!

- Эсәм...

Ул арала зәңгәр экранда президент һүрәте пәйҙә булды. Аяғүрә баҫып, ил етәксеһенең ҡотлауын тыңланылар ҙа:

- Яңы йыл менән!

- Яңы йыл менән! - тип, бокалдарын күтәрҙеләр. Байрам табынын асып алғас, ҡыҙ ҡунағын, әле был, әле теге яҡтан килеп, алдына төрлө һыйҙарҙы шылдырып ҡуйып, ҡыҫтап-ҡыҫтап һыйланы, үҙе лә бешергәндәренең тәмен әле генә тойғандай булып яратып ашаны. Көтөлмәгән ҡунағының ашап туйып, сығып китеүенән ҡурҡып, әүрәтергә теләгәндәй, ҡыҙ туҡтауһыҙ мөһим булмаған хәбәрҙәр теҙҙе, тын алырға бирмәй төпсөндө, бер-бер артлы һорауҙар яуҙырҙы. Әгәр ҙә был ваҡытта Ғәлиәне әхирәттәре күрһә, быға нимә булған икән, тип аптырар ине, моғайын. Бөгөн ғүмерҙә булмағанса теле асылған уның.

Эйе, ысынлап та уға әле еңел, бик еңел ине. Ҡаршыһында ултырған кеше уның кем икәнен дә, ниндәй тормош алып барғанын да белмәй. Һәм ул уға ҡыҙыҡ та түгел. Ул, моғайын, ҡыҙҙың йәмһеҙлеген дә, ҡартайғанса кейәүгә сыға алмай, ир заттары иғтибарынан мәхрүм булып ултырыуын да аңғармай. Уның өсөн шулай уҡ Ғәлиәнең бала саҡтан үҙ ҡиәфәтенән кәмһенеп үҫеүе лә, мәктәп йылдарында, институтта уҡығанда ошо кәмселеген ҡаплау һәм үҙенә саҡ ҡына булһа ла йылы мөнәсәбәт тойоу өсөн иң шәп уҡыусы булырға тура килеүе лә, сәскәләй сағын үҙен күҙгә лә элмәгән егеткә ғашиҡ булып һарғайып үткәреүе лә, ғүмерен тотошлай фәнгә бағышлап, ошо йәшендә инде профессорлыҡ хеҙмәтен тамамлап килеүе лә, әллә ниндәй ҡатмарлы китаптар авторы булыуы ла һис кенә лә мөһим түгел. Улар бөгөнгә сараһыҙҙан табындаш ҡына.

- Ә һеҙ Шакир ағайҙың кеме? - ҡыҙ сәй яһаған арала сираттағы һорауын бирә.

- Кеме, тип, мин уның һалдаты инем.

- Бәтәс, ул хәрбиме ни? Вот яңылыҡ!

- Ул заманында бына тигән хәрби, шундай командир ине. Мине ул ут эсенән алып сығып, етмеш километрҙы тауҙар аша иңендә күтәреп үткән. Ғүмерем менән бурыслымын уға...

- Ә ҡайҙа булды ул хәл... Ой! - Ишеткәндәренә хайран булған ҡыҙ сынаяҡҡа аша ҡойоп торғанын да аңғармаған икән.

- Афғанда.

- Шулай икән дә... - Шул ваҡыт Ғәлиә күршеһенең йәйҙең ниндәйҙер бер көнөндә зәңгәр берет кейеп, шундай уҡ телняшкалы, беретлы ир-аттарҙы йыйып, байрамдарының аҙағында һәр ваҡыттағыса донъя онтап һуғышып, йыш ҡына күрше-тирәләр полиция саҡыртыуға барып етеп йөрөгәндәрен хәтеренә төшөрҙө.

- Ә нишләп ул бөгөн шулай?..- Ҡыҙ хәбәрен нисек тә йомшағыраҡ итергә тырышты.

- Нисек "шулай"?

- Ну... эскесе бит инде Шакир ағай, уның нимәһен йәшерергә?

- Уның башынан үткәндәрҙе күрһәң, кисерһәң, һылыу, был донъяла йәшәмәҫкә лә мөмкин. Шакир ағай ике тапҡыр ҡаты яраланып, саҡ-саҡ тере ҡалған кеше. Һуңғы тапҡыр госпиталдә ятҡанында уны аяҡҡа баҫмаҫ тигәндәр. Шул ваҡыт ҡатыны ташлап китә. Афғанстандан беҙҙең ғәскәрҙәрҙе сығара торған йылда ул һалдаттарын күрәләтә үлемгә алып барған бер операциянан баш тарта, верховныйҙарҙы кеше ғүмерен һанға һуҡмауҙа ғәйепләй. Шул арҡала, военный трибунал аша, уны хәрби хеҙмәттән ситләтәләр. Уйлап ҡараһаң, тыуған ил алдындағы бурысыңды үтәйем тип, тиҫтә йылдан ашыу күрәләтә бер сит ил, сит халыҡ араһында ғазраил менән яғалашып йөрөп, ғаиләңде, һаулығыңды юғалт, киләсәккә өмөтөңдө, рухыңды һындыр ҙа, шул уҡ тыуған илеңә лә кәрәкһеҙ булып ҡал, имеш...

- Ә һеҙ... Һеҙ ҙә шундай хәлдәме ни?

- Минең хәлем... ундай уҡ булмаһа ла, шундайҙың бер сатҡыһы, - Ғаяз ауыр көрһөндө. - Мин дә шунда аяғымды юғалтып... һәм алты йыл пленда булып ҡайттым.

Ғәлиә был яңылыҡҡа ышанырғамы-юҡмы тигән шикелле, өҫтәл ситенә янтайып, Ғаяздың аяғына ҡараш һалды. Аяҡтары бар түгелме һуң, йәнәһе.

**(Дауамы бар).**

*ӘЙҘӘГЕҘ...*

# ШӘЛ БӘЙЛӘЙЕК!

**Ошо көндәрҙә Өфөнөң Ҡала мәҙәниәт һарайында "Башҡорт шәле" республика күргәҙмә-конкурсы үткәрелде. Шәл бәйләүсе оҫтабикәләрҙең ҡул эштәренән торған тәүге күргәҙмә 19 йыл элек Республика халыҡ ижады үҙәге тарафынан уҙғарыла. Быйыл Өфөлә һигеҙенсе тапҡыр үткән фестивалдә иһә Ейәнсура, Күгәрсен, Стәрлебаш, Хәйбулла, Көйөргәҙе, Баймаҡ, Мәләүез райондарынан һәм Стәрлетамаҡ, Күмертау, Сибай ҡалаларынан шәл бәйләүселәр ҡатнашты.**



Дебет шәл, тиһәләр, һәр ваҡыт өләсәйемдең ап-аҡ дебеттән һуғылған ҙур һуҡма шәле күҙ алдыма килә. Ул шәлде өләсәйем ҡәҙерләп, байрамдарҙа ғына сығарып ябына торғайны. Ә миңә, яратҡан ейәнсәренә, шул һуҡма шәлгә төрөнөп ултырып, кистәрен өләсәйем һөйләгән әкиәттәрҙе тыңлау, "Аҡбуҙат" журналын ҡат-ҡат уҡытыу бәхете йышыраҡ тәтей ине. Һуҡма шәлдең дебете иҫ киткес яҡшы ҡалҡҡан, һыйпап ҡараһаң, бесәй кеүек, инде йомшаҡ. Был юлы Өфө Ҡала мәҙәниәт һарайында үткәрелгән "Башҡорт шәле" күргәҙмә-конкурсына ла ошо бала сағымдың йылы хәтирәһе яңырыуын көҫәп барғайным, ышанысым аҡланды. Башҡортостандың төрлө район һәм ҡалаларының оҫта ҡуллы ҡатын-ҡыҙҙары күҙ нурын һалып, күңел йылыһын бүлеп бәйләгән дебет шәл, һуҡма шәл, ҡыя шәл, үәлдәрҙең ниндәй генә биҙәклеһе, ниндәй генә төҫлөһө юҡ! Ейәнсура районынан Фәнүзә Юбаҫарова хатта "Ләлә-Тюльпан" мәсетен төшөрөп, ҡәҙерле әсәйемә, ҡәҙерле ҡыҙыма, хөрмәтле ҡоҙағыйыма тигән махсус яҙыуҙар менән шәлдәр бәйләгән.

"Башҡорт шәле" республика күргәҙмә-конкурсының төп призына Фәнүзә Ғәйнулла ҡыҙы һәм Хәйбулла районының Вәзәм ауылы оҫтабикәләре лайыҡ булды. Һуҡҡан шәл оҫталары вәзәмдәр Башҡортостандан ситтә лә ҙур танылыу яулап өлгәрөп, күргәҙмәлә ҡатнашыусы ҡатын-ҡыҙҙарға ошо өлкәлә өйрәтеү дәрестәре ойоштороҙо. Улар һуҡҡан дебет шәлдәрҙә һатып алыусылар ҙа бик ҡыҙыҡһыныып индәренә һалып ҡарап, һоҡланып туя алманы. Мәләүез районы оҫтабикәһе Гөлшат Саҙриева бәйләгән шәлдәр бөтәндәрҙекенән дебете бик яҡшы ҡалҡыуы менән айырылып торҙо, бәхтиһән, Краснодар дебетенән бәйләнгән икән. "Дебетте ситтән һатып алып эшкәртеү энә менән ҡойо ҡаҙыуға тиң булһа ла, яратҡан шөғөлдән баш тартып буламы һуң? Республикала үткәрелгән төрлө күргәҙмәләргә, конкурстарға йыш йөрөйөм, күҙ нуры һалып эшләгән эштәремдең файҙаһын күрәм", - ти Гөлшат Саҙриева.

Әйткәндәй, шәл бәйләүсе ҡатын-ҡыҙҙарҙың береһе лә күҙлек киймәй! Хәйбулла районы Яңы Ергән ауылынан килгән Гәүһәр Рәхмәтова һөйләүенсә, уның 87 йәшлек әсәһе Миниямал Ҡадирова һаман да күҙлекһеҙ-ниһеҙ ҡатмарлы биҙәктәр төшөрөп шәлдәр бәйләүен дауам итә икән. Шәл бәйләү эше ваҡ, күп сығымдар талап итһә лә, килеме түбән булһа ла, күргәҙмә-конкурста ҡатнашыусы бер ҡатын-ҡыҙ ҙа быға зарланыуын белдермәне. Уларҙың иҫ киткес түҙемлеге, ижад ҡомары, егәрлеге барыһын да хайран итте.

"Башҡорт шәле" күргәҙмә-конкурсын асыу тантанаһында БР мәҙәниәт министры урынбаҫары Рәнис Алтынбаев: "Мәҙәниәт йылында башланғыс һалынған эштәр киләсәктә лә дауам итәсәк, Башҡортостан Президенты Грантына гариза яҙып, эшегеҙҙе артабан үҫтерегеҙ. Ә беҙ әле ойоштороусылар комитеты менән кәңәшләшкәндән һуң, башҡорт шәленә арналған музей астырыу тураһында ныҡлы уйлашырға кәрәк, тигән фекергә килдек", - тигәйне оҫтабикәләргә төбәлгән сығышында. Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов та ҡала ҡатын-ҡыҙҙарына республика оҫтабикәләренең ҡул эштәрен һатып алырға булышлыҡ иткән саралар ойоштороолоуын хупланы. Ярҙам ҡулы һуҙырға әҙер торған кешеләр булғанда, дебет шәл бәйләүсе ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ әсәй-өләсәйҙәребеҙҙән ҡалған шөғөлдө үҫтереп, киләсәк быуынға тапшырырға ла онотмаһын ине!

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

*БЕР ҺҮРӘТКӘ ҠАРАП...*

# ҺИНӘН ЕРҘӘ НИ ҠАЛЫР?

**Былтырғы йыл башында Рәсәйҙә һәм Башҡортостанда иғлан ителгән Мәҙәниәт йылына бағышлап, "Бер һүрәткә ҡарап..." бәйгеһен асып ебәргәндә, күңелебеҙгә: "Ә унда ҡатнашырға теләүселәр булмай ҡуйһа?" - тигән хәүеф яңылыш ҡына булһа ла инеп тә сыҡманы. Йәмғиәттә һынлы сәнғәтте барыһы ла аңлай алмай, тигән ҡалыплашҡан фекер йәшәһә лә, уҡыусыларыбыҙҙың юғары зауыҡлы ғына түгел, ә уйлы, фекерле икәненә тағы бер инандыҡ.**



Башҡортостандың атҡаҙанған рәссамы, Ш. Бабич исемендәге республика йәштәр премияһы лауреаты, З. Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академияһы профессоры Әмир Мәзитовтың "Балыҡтар йыры. Йылғалар башы" тигән билдәле картинаһына килгән хаттар араһынан Учалы районы Уральск ҡасабаһынан Гөлиемеш псевдонимы менән ижад итеүсе уҡыусыбыҙ еңеүсе тип табылды. Әмир Мәзитов бүләгән - Башҡортостан Республикаһы рәссамдарының эштәре тупланған каталогты һеҙгә үҙе тапшырасаҡ.

Мәҙәниәт йылында башланғыс алған был бәйгене, башҡорт рәссамдарының эштәре буйынса фекерҙәр алышыуҙы артабан да дауам итмәксебеҙ. Сөнки һеҙҙән килгән хаттар күрһәтеүенсә, һынлы сәнғәт - ул рәссамдың кеше өсөн һәм кеше тураһында һөйләгән ижад төрө. Тәҡдим ителгән һүрәттә рәссам һалған фекерҙе һәр кем тоймаҫҡа ла мөмкин. Әммә унда һәр кем үҙен, халҡын һәм уның бөгөнгөһөн, киләсәген күрә һәм уйҙарын аҡ ҡағыҙға төшөрөү теләге уяна икән, сәнғәттең көсө ана шундалыр ҙа, моғайын.

Шулай итеп, сираттағы һүрәтте уҡыусылар иғтибарына тәҡдим итәбеҙ. Совет һәм Рәсәй рәссам-графигы, РФ Рәссамдар берлеге ағзаһы Фәнил Шәймөхәмәтов төҫлө линогравюра техникаһында ижад итеүсе билдәле рәссам. "Ғүмер ағасы" картинаһы - "Беләү", "Йыр" картиналарынан торған триптихтың аҙаҡҡы өлөшө. Уҡыусыларҙың фекерен ниндәйҙер юҫыҡҡа йүнәлтеүҙән һаҡланыу өсөн һүрәт тураһында артыҡ һүҙ әйтеп тормайбыҙ, әммә бында бер төп хәҡиҡәт сағылыш тапҡан - кеше үҙенән һуң был ерҙә нимәләр ҡалдырырға тейеш.

Һүрәт тураһында фекерҙәрегеҙҙе ирекле рәүештә (мәҡәлә, һүрәтләмә, бер көлимә фекер, риүәйәт, нәҫер, хикәйә һ.б) беҙгә яҙып ебәрегеҙ. Конкурс эштәрен баһалағанда һүрәттең идея-тематик йөкмәткеһен, художестволы үҙенсәлеген, заман һулышын һынландырыуын ни рәүешле аса алыуығыҙға төп иғтибар биреләсәк. Һеҙҙән хаттар көтәбеҙ!

*ӘЙҘӘГЕҘ...*

# ТЫУҒАН ЯҠТЫ ҠӘҘЕРЛӘЙЕК!

**Нимә һуң ул тыуған яҡ? Яуабы яп-ябай һымаҡ. Тик барыбер тыуған яҡ аңлатып булмай торған сихри көскә эйә бер йылы тараф ул. Ғүмере буйына ситтә йәшәгән, бәхетле донъя көткән кешеләр ҙә бит юҡ-юҡта тыуған яҡтарын, гәзиз йорттарын һағынып, зарығыуҙары тураһында әйтеп һала. Яңыраҡ "Яңылыҡтар" тапшырыуында рәссам Ян Крыжевскийҙың ҡыҙы интернеттан: "Атайымды эҙләйем, ул аҡсаһын урлатып, асарбаҡ хәлендә ҡалған", тигән хәбәр уҡып, ҡаты ҡайғыға ҡалдым. "Уны табырға, ҡотҡарырға ярҙам итегеҙсе", - тип, йәмәғәтселеккә мөрәжәғәт итте.**

Студент саҡта, рәссам һөнәрен үҙләштергәнемдә, "Крыжевский бик һәләтле рәссам" тигән фекер нығынғайны. Әлеге "Яңылыҡтар" тапшырыуында Ян Крыжевскийҙың Америкала саҡта биргән элекке интервьюһы яҙмаһын да күрһәттеләр. Рәссам: "Йәш сағымда бик уңышлы кеше булдым. Күргәҙмәләрем Мәскәүҙә, Санкт-Петербургта гөрләп үтте. Дуҫтарым күп булды. Хатта, дәртләнеп, Америкаға сығып киттем. Тик, ниңәлер, Өфөлә йәшәгән йылдарым иң бәхетле, иң сағыу мәл булып хәтерҙә һаҡлана, һағындыра", - тине. Ошо көндәрҙә Ян Крыжевскийҙың Өфөгә ҡайтыуы тураһында белдек. Ҡыҙы мөрәжәғәт иткәндән һуң, Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов рәссамдың тыуған илгә ҡайтыуына булышлыҡ иткән икән.

Бөтөн донъяға танылған яҡташыбыҙ, балет бейеүсеһе Рудольф Нуриев тураһында ла тапшырыуҙар күп. Тик береһе мине айырыуса уйға һалды. Оло йәштәге бер француз журналисы Рудольф Нуриевтың тормошо һәм ижадына бағышланған тапшырыуҙар тураһында һүҙ алып барғанда: "Ул тапшырыуҙарҙың күбеһе дөрөҫлөккә тап килмәй. Рудольф Нуриев менән һөйләшкәндә, ул, Өфөләге кескәй генә өйөмдө һаҡлап алып ҡалһындар ине, - тип инәлде. Уның ҡуҙҙәрендә түҙеп торғоһоҙ һағыш сағыла ине", - тине.

Мин "Әллә Өфөнөң һынғай энергетикаһы, арбау көсө бармы икән?" тип тә уйлап ҡуям. Бәлки, шулайҙыр ҙа...

Йомғаҡлап...

"Сит илдә солтан булғансы, үҙ илеңдә олтан бул" тигән мәҡәлебеҙҙән дә тапҡырыраҡ, дөрөҫөрәк һәм урынлыраҡ һығымтаны яһау ауыр, хатта мөмкин дә түгелдер, моғайын. Әлеге ике миҫал - был мәҡәләнең тормоштағы сағылышы. Хәйер, миҫалдар бихисап...

**Фәүзиә ЯХИНА.**

ИНТЕРНЕТТАН



# КҮҢЕЛ КӨҘГӨҢ...

## нимә күрһәтә?

■ Бөгөнгө көндә сәләмәтлектең тән ауырлығына бәйле булыуын хатта мәктәп уҡыусылары ла белә. Тән ауырлығын нормала тотоу өсөн ғалимдар түбәндәге ризыҡтарҙы күберәк ашарға тәҡдим итә. Исемлектең тәүге урынында грейпфрут тора. Калифорния ғалимдары үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, көнөнә ярты грейпфрут ашау яман шеш сиренә дусар булыуҙан да һаҡлай. Киске аштан һуң был емеш калорияларҙы яндырырға булышлыҡ итә икән. Ҡабаҡ та сәләмәтлекте нығыта, артыҡ майҙарҙы ла яндыра. Составында аҡһым булғанға күрә, һыйыр ите лә тиҙ туйҙыра, һуңынан асыҡыу тойғоһо ла йонсотмаясаҡ. Зәйтүн емештәре күҙәнәктәргә йәшәрергә булышлыҡ итә, ул йөрәк, бауыр, ашҡаҙан эшмәкәрлегенә лә файҙалы. Шуның өсөн зәйтүн майы ла диетологтар тарафынан юғары баһалана. Йәшел сәйҙә антиоксиданттар күп, ул матдәләр алышыныуын яҡшырта.

■ "Күҙҙәр - күңел көҙгөһө", тигән бөйөк Шекспир. Күҙҙәр кешенең күңелендә нимә бар икәнен күрһәтә, тип раҫлай ғалимдар ҙа. Күҙ ҡарашы кешенең психикаһы менән тығыҙ бәйле. Доктор Вольфганг Шульц-Цеден билдәләүенсә, күҙ ауырыуҙарының нигеҙендә психик тайпылыштар ятыуы ихтимал. Мәҫәлән, кеше ҡурҡҡан саҡта уның күҙ ҡараһы киңәйә, ул көйгәндә, киреһенсә, тарая. Был реакциялар вегетатив нервы системаһы эшмәкәрлеге менән бәйле. Тулҡынланғанда, ҡурҡҡанда күҙ ҡараһы киңәйә, күҙҙәр насар күрә башлай. Кеше тыныс булған хәлдә күҙ ҡараһы тарая һәм күҙ күреү һәләте яҡшыра. Күҙҙәргә иң ҙур зыянды ҡурҡыу килтерә. Ул күҙ эсе баҫымын күтәрә, әгәр ҙә был тойғо йыш ҡабатланһа, глаукома барлыҡҡа килә. Шулай итеп, күҙегеҙ насар күрә башлаһа, эске конфликттар, баҫып ҡуйылған тойғолар юҡмы икәнлеген асыҡлағыҙ. Шул рәүешле организм һаҡлау механизмын эшкә ҡуша.

■ Бөгөнгө замандың иң модалы диагнозы - стресты дауалауҙа китап ярҙамға килә ала, Бөйөк Британия ғалимдары ошондай һығымтаға килгән. Һынауҙарҙа ҡатнашҡан кешеләр стресс тыуҙыра торған тест үткәндән һуң, үҙҙәренең ысулы менән унан сығырға маташҡан. Уларҙың һайлаған ысулының тәьҫирләген ғалимдар пульстан һәм мускул тонусынан сығып билдәләгән. Һөҙөмтәләр күрһәтеүенсә, китап уҡыу (68 процент) стресҡа ҡаршы иң яҡшы сара, тип табылған. Бер-ике бит китап уҡыу ҙа пульсты нормаға килтергән. Музыка тыңлау ҙа яҡшы, был юл менән һынауҙарҙа ҡатнашыусыларҙың 61 проценты тыныслана алған. Ҡәһүә йәки сәй эсеү - 54, саф һауала йөрөү тауыштарҙың 42 процентын йыйған.

■ Австрияла йәшәүсе психолог биш йыл дауамында бер тикшеренеү үткәргән һәм ниндәй тойғо организм өсөн иң зыянлыһы булыуын асыҡлаған. Башҡаларҙың уңышына көнләшеүселәрҙә инфаркт хәүефе ике тапҡырға юғары. Көнләшеү гормональ тайпылыштарға алып килә. Етмәһә, иң тәүҙә тестостерон бүленеп сығыу кәмей, шуға ла ир-егеттәргә был насар ғәҙәт менән дуҫлашыу уларҙың файҙаһына түгел. Үҙен ғәйепле тойған кешегә һалҡын тейеп бара, онкологик сирҙәр хәүефе ҙурая. Үҙ-үҙен йәлләүселәр бауыр сирҙәре менән яфаланыуы ихтимал. Был саҡта хәлһеҙлек гормоны күберәк бүленә, ҡанда шәкәр күләме арта. Һарандар күбеһенсә ашҡаҙан сиренә дусар була.

БЫЛАР ҠЫҘЫҠЛЫ!

# ҠЫШ БАБАЙ ҺӘМ...

## Эҫе бабай



**Яңы йылды барыһы ла ярата һәм көтөп ала. Шуға күрә Яңы йылға бәйле ҡыҙыҡлы һәм үҙенсәлекле факттарҙы иҫкә төшөрөү урынлы булыр. Шулай итеп, башланыҡ!**

● Яңы йылды ҡаршылау төрлө халыҡта ныҡ айырыла. Мәҫәлән, Боронғо Вавилонда байрам яҙ айына тура килгән. Был ваҡытта батша ярандары менән ҡаланан сығып китер булған һәм ҡала халҡы иркенләп байрам иткән, күңел асҡан.

● Микронезияла (Океанияның бер өлөшө) Яңы йыл, беҙ өйрәнгәнсә, 1 ғинуарҙа башлана. Был көндә утрауҙа йәшәүселәрҙең барыһы ла яңы исемгә эйә була һәм уларҙы шым ғына яҡындарына әйтә. Ә яңы исемде яуыз көстәр ишетмәһен өсөн байрам ваҡытында бар көскә барабан һуғыла.

● Яңы йыл төнөндә Италияла иҫке әйберҙәрҙән ҡотолоу ҡаралған. Уларҙы тәҙрә аша тышҡа ташлайҙар. Күберәк әйбер ташлаған һайын, Яңы йылда шул тиклем күберәк уңыш һәм байлыҡ киләсәк, тип ышаналар.

● X-XV быуаттарҙа Русь дәүләтендә Яңы йылды 1 мартта, 1348 йылдан һуң - 1 сентябрҙә ҡаршылағандар. Ә 1699 йылдан, Петр Беренсенең указына ярашлы, уны 1 ғинуарға күсергәндәр.

● Тере шыршылар ҡыуаныс һәм байрам рухы алып килеүҙән тыш, күңелһеҙ моменттар тыуҙырырға ла мөмкин. Ғалимдар билдәләүенсә, шыршыларҙа бөжәктәр бар. Улар йылы өйҙә тиҙ үрсей һәм йүткереүгә, йөҡөнөҙлөҡҡа, һүлпәнлеккә, ауыр тын алыуға, хатта бронхит һәм пневмонияға килтергән сан-һеркәләр бүлеп сығара. Шуға күрә яһалма шыршы ҡуйыу күпкә отошлораҡ, ти белгестәр.

● Ҡыш бабайға йәки Санта Клаусҡа балалар һына түгел, ололар ҙа мөрәжәғәт итә икән. Балалар күберәген төрлө уйынсыҡ, текә телефон, планшет, компьютер теләһә, ололар етәксеһен туңдырыуҙы һорай.

● "Ирония судьбы, йәки енел быу менән" фильмын һәр йылдың һуңғы көнөндә 35 йылдан ашыу күрһәтәләр.

● Тибетта Яңы йыл алдынан бәйөрәк бешерәләр һәм үтеп барыусыларға тараталар. Киләһе йылда байлыҡтың күләме таратылған бөйөрәктәрҙең һанынан сығып билдәләнә, тип ышаналар.

● Бразилияла Яңы йыл табынының төп ашамлығы ярмыктан (чечевица) бешерелгән аш. Ул байлыҡты һәм именлекте символлаштыра.

● АҠШ-тың Аҡ йорто алдындағы шыршыла 1895 йылда тәүге электр гирляндаһы тоҡандырыла.

● Австрияла Яңы йыл персонаждары араһында Бәхет ҡошо ла бар, шуға күрә байрам өҫтәленә ҡош ите ҡуйылмай.

● Япон телендә Яңы йыл "Akimashite Omedetto Gozaimasu" тип яңғырай.

● СССР-ҙа 1 ғинуар ял көнө булараҡ 1947 йылдың 23 декабренән, Юғары Совет Президиумы ҡарарынан һуң ғына, ял көнө итеп иғлан ителә.

● Германияла Санта-Клаус бүләктәрҙе тәҙрә төбөндә, ә Швецияла мейес янында ҡалдыра.

● Һәр ваҡыт тиерлек һыуыҡ булған Гренландияла боҙ табыу көүек мәсьәлә юҡ. Шуға күрә урындағы халыҡта берәйһенә боҙҙан ҡырҡылған аҡ айыу һәм морж һындары бүләк итеү традицияһы бар.

● Һыуыҡ та, ҡар ҙа булмаған йылы яҡтарҙа Яңы йыл өсөн икенсе персонаждарҙы ҡулланалар. Мәҫәлән, Камбоджала Эҫе бабай бар.

● Францияла Яңы йыл табынына күркә ите, сыр, ҡаҙ бауырынан паштет һәм устрица бирәләр.

● 2001 йылда Рәсәй менән Финляндия сигендә ике илдең Яңы йыл персонаждары - Йолупукки һәм Ҡыш бабай осрашҡан.

● Скандинавияла байрам өҫтәленә бер генә баҙам (миндаль) сәтләүеге һалынған дөгө бутҡаһы бирәләр. Сәтләүек кемгә эләгә, уны йыл буйы уңыш оҙатып барасаҡ, тип һанала.

● Англияла Яңы йыл ҡаршылағанда сәғәт һуға башлағас та, өйҙәң арттғы ишеген асып, уҙып барыусы йылды оҙатып ҡалалар, ә сәғәттең һуңғы һуғыуы менән бергә төп ишекте асып, Яңы йылды ҡаршылайҙар.

● "В лесу родилась елочка" шиғыры беренсе тапҡыр 1903 йылда "Малютка" балалар журналында баҫылды. Ә ике йылдан Раиса Кудашеваның шиғырын композитор Леонид Бекман көйгә һалып, билдәле йыр тыуа.

● Кубала Яңы йыл алдынан бөтә һауыт-һабаға һыу тултыралар һәм Яңы йыл төнөндә уны урамға сығарып түгәләр. Ошо рәүешле улар бар гонаһтан ҡотолабыҙ, тип уйлайҙар.

● Болгарҙар өсөн Яңы йылдың иң яҡшы моменттарын мүшмел ағасы ботаҡтары кәүҙәләндерә. Уларҙы Яңы йылға бүләк итәләр.

● Чех һәм словак балаларына Яңы йыл бүләктәрен бейек шапка кейгән һәм көләп-балҡып торған Микулаш тарата.

● Ҡар бабайҙы XIX быуатта яһай башлайҙар. Уның алыштырғыһыҙ атрибуттары булып танау урынына ҡуйылған кишер, ҡулындағы һепертке һәм башына кейҙерелгән биҙрә тора.

● Шундай ышаныу бар - 30-нан 31-нә ҡарай күргән төш алдағы йылды юрай.

● Эквадорҙа Яңы йыл алдынан бөтә күңелһеҙлектәрҙе ҡағыҙға яҙып һалам ҡараҫҡы менән бергә яндырыу киң таралған.

● Көньяҡ ярымшарҙа Яңы йыл эҫе йәйгә тура килеү сәбәпле, ғәҙәттә, эвкалипт ағасын биҙәйҙәр.

● Ҡарһылыуҙы уҙған быуаттың 50-се йылдарында яҙыусылар Лев Кассиль һәм Сергей Михалков уйлап таба.

● Грецияла ғаилә башлығы Яңы йыл төнөндә тышҡа сығып, өй стенаһына анар (гранат) емешен бәрә. Орлоҡтары төрлө яҡҡа таралһа, киләһе йыл был ғаилә өсөн уңышлы буласаҡ, тип һанала.

● Шыршыға эленгән быяла уйынсыҡтарҙы XIX быуат урталарында Скандинавияла эшләп сығара башлайҙар.

● Мексикала йәшәүселәр бүләкте - ботинка, ә ирландтар һәм инглиздәр - ойоҡбаш эсендә таба.

● Боронғо Египетта Яңы йыл Нил йылғаһы таша башлаған көндә билдәләнгән. Ул йәй башына тура килгән.

● Кубала Яңы йыл Батшалар көнө тип йөрөтөлә.

● Европала иң күп шыршылар Данияла һатыла.

● Французлар бер-береһенә Яңы йылға, ғәҙәттә, сувенир һәм открытка бүләк итә.

● Шотландияла Яңы йылдың тәүге көнөндә кейәүгә сығырға тәҡдим яһамайҙар һәм сүп-сар ташламайҙар.

● СССР-ҙа Ҡыш бабайҙы өйгә 1970 йылдарҙан башлап саҡыра башлайҙар.

● Беренсе Яңы йыл открыткаһы Лондонда, 1843 йылда баҫылды.

**Яңы йыл үҙенсәлектәрен Сәлимә АРЫҪЛАНОВА барланы.**

ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ

# ДИНҺЕҘ МЕНӘН ДИНДАР БӘХӘСЕ

## Ҡатын-ҡыҙ серле булһын ул



Дуҫым былай тине: "Ә Исламдың ҡатын-ҡыҙға ҡарата кире мөнәсәбәттә булыуы менән килешәһеңме?" Шунан ул бармаҡтарын бөгә-бөгә Исламда ҡатын-ҡыҙ кисергән кәмһетелеү миҫалдарын һанай башланы: күп ҡатынлылыҡ, ҡатын-ҡыҙҙың бикләнеп йәшәүе, пәрәнжә кейеп йөрөү, ғаиләлә ҡол хәлендә булыу, иренә тулыһынса буйһоноу, мираҫ бүлгәндә ир-атҡа икеләтә өлөш сығарыу...

- Был юлы ғәйепләүҙәр күп һәм һөйләшеү ҙә оҙаҡ буласаҡ. Алыҫтан, Исламғаса тиклем осорҙан башларға тура киләсәк. Мәжүсилек осоронда яңы тыуған ҡыҙ балаларҙы тереләй ергә күмгәндәр, ир-аттың ундан да артыҡ ҡатыны булған, хужа ҡолиһәләрен фәхишәлек ҡылырға мәжбүр иткән һәм шул юл менән күп аҡса йыйған. Ә Ислам иһә дүрт ҡатын алыу хоҡуғын бирһә лә, был бит рөхсәт, ә мәжбүрилек түгел. Әйтәйек, фәхишәлек, ике йөҙләлөк, әҙәпһеҙлек хөкөм һөргән Европала, ир-ат бер ҡатын менән рәсми никахҡа инеп, тиҫтәләгән ҡатын-ҡыҙҙар менән зина ҡылып йәшәгән Көнбайышта ҡатын-ҡыҙҙың хәле яҡшыраҡмы?

Ҡатын-ҡыҙ өсөн тирә-йүндәгеләрҙең мыҫҡыллауына дусар булып, ҡатынлы ир һөйәркәһе, йәшерен фәхишә булып йәшәү яҡшыраҡмы, әллә ирҙең икенсе, законлы, тулы хоҡуҡлы ҡатыны булыу хәйерлерәкме?

ӘЙҘӘГЕҘ...

# ШЫРШЫЛАРҘЫ ҠЫРҠМАЙЫҠ ҺӘМ...



**Яңыраҡ бер иптәш менән Яңы йылда өйгә шыршы ултыртыу тураһында бәхәсләшеп киттек. Икебеҙ ҙә шыршы ултыртып, матур итеп биҙәп, балаларҙы шатландырыуға ынғай ҡараштабыҙ. Тик беребеҙ - тере шыршы, ә икенсебеҙ - уйынсыҡ, йәғни яһалма ҡупшыҡай ултыртыу яғында. Танышым, ылыҫлы ағастың хуш еҫе тын юлдары өсөн файҙалы, тип ауыҙ һыуын ҡоротһа, мин үҙемдең дәлилдәрем менән ҡаршы сығам: "Улар урманда ултырырға, үҫергә тейеш!" - тим. Шулай итеп, оҙаҡ ҡына ваҡыт уртаҡ фекергә килә алманыҡ. Ахырҙа, мин бала саҡтағы бер хәлде һөйләп бирҙем.**

Урта синыфтарҙың береһендә булғандыр, Ноғман Мусиндың "Мәңгелек урман" романын уҡып сыҡҡас, йәшел дуҫтарыбыҙға ҡарашым ҡырҡа үҙгәрҙе. Быға тиклем йыл да атайымдың хуш еҫле шыршы алып ҡайтыуын көтһәм, ул йылды был эшкә ҡаршы төштөм. Атай менән әсәйҙе өгөтләү артыҡ ҡыйынлыҡ тыуҙырманы, ә бына кескәй туғандарымды был фекергә күндереү еңелдән булманы. Шулай ҙа әсәй үҫтергән ҙур рауза гөлөн ялтыр таҫмалар менән биҙәгәс, өй буйлап гирляндалар элгәс, шыршы юҡлыҡҡа иғтибар итеүсе ҡалманы. Мин үҙемде бер шыршыны булһа ла һаҡлаусы итеп тойоп, сикһеҙ ҡыуандым. "Быйыл бер шыршы һатылмай ҡалһа, икенсе йылды уны берәүгә аҙыраҡ ҡырҡасаҡтар", - тип уйланым...

Өйләнгәс, хәҙер инде үҙем ғаилә башлығы булғас, атай һымаҡ уҡ, Яңы йыл шыршыһын үҙем хәстәрләүҙән ҡәнәғәтлек тойғоһо кисерәм. Әлбиттә, тере шыршы һатып алыу башҡа ла инеп сыҡмай - яһалмаһын ҡорабыҙ. Балаларҙың шыршы уттары емелдәшкәнен донъяларын онотоп күҙәткәнен ҡарап торорға яратам. Улар ҙа тере шыршыларҙы һаҡлаусы булып үҫер, тигән өмөт уяна. Яңы йылда магазин шыршыларын ҡулланайыҡ, тигән саҡырыу менән мөрәжәғәт иткем килә башҡаларға ла.

**Артур ХИСМӘТУЛЛИН.**

# ...ҠУЛДАН ЭШЛӘЙЕК!

**Яңы йыл байрамының төп хужаһы - шыршы. Кемдер тәбиғәт бүләге - тере шыршыны үҙ итһә, икенселәр яһалма ҡупшыҡайҙы ғына биҙәй. Шулай уҡ был ике категориянан айырмалы рәүештә, өйҙәренә ғәҙәти булмаған шыршы ҡуйыусылар ҙа күп. Нәҡ ошондай үҙенсәлекле шыршылар яратыусылар иҫәбенә мин Яңы йыл байрамы алдынан кеҫәмде ҡалынайтып ҡалам. Гәзит уҡыусыларға ошо шөғөлөм тураһында бәйән итергә булдым.**



Яңы йыл шыршыһы - декабрь айының иң ҙур һорау менән файҙаланған тауары. Уға бары тик гирляндалар, шыршы уйынсыҡтары һәм байрамды биҙәүсе башҡа төрлө атрибутика ғына конкурентлыҡ булдыра. Тәбиғи, һорау күберәк булған һайын, уны етештереүселәр (һатыусы, эшләүсе) һаны ла бермә-бермә арта. Ләкин минең аҡса эшләгән юлым беҙҙә әлегә сағыштырмаса ят һәм яңы күренеш. Мин заказдар буйынса төрлө әйберҙәрҙән шыршылар эшләйем. Уларҙың бер-нисә варианты бар. Мәҫәлән, конус-шыршыны эшләү еңел дә, тиҙ ҙә. Бының өсөн ватманда кәрәкле үлсәмдә һыҙылған түңәрәкте ҡырҡып алып, конус формаһында бөгәһең. Уға елем һөртөп, бер йәки бер-нисә төҫтәге ялтырауыҡ (мишура) йәбештерәһең. Шулай уҡ шыршы уйынсыҡтары йәбештереп ебәрергә лә мөмкин. Ябай ғына итеп яһалған шыршыны эшләү барыһының да ҡулынан килә, ләкин бөтәһенең дә уның менән булышып ултырырға теләге юҡ йәки ваҡыты тығыҙ. Шуға күрә минән эшләтеүселәр етерлек. Күптәр бындай шыршыны эш урындарында йәки өйҙәрендә өҫтәлгә ҡуйыу өсөн һатып ала. Бер шыршы эшләү өсөн 70-100 һум аҡса китә, ә һатыуҙан 150-180 һум аҡса килә. Айырма һиҙелерлек. Ғөмүмән, конус формаһын ҡулланып шыршы эшләгәндә уға күңел ни теләй һәм ҡул аҫтында нимә бар, шуны йәбештереп, оригиналь шыршы барлыҡҡа килтерергә була.

Шулай уҡ ашарға мөмкин булған шыршыны әҙерләргә лә була. Уның өсөн төрлө кәнфит йәки башҡа төрлө ашамлыҡты ҡулланыу урынлы. Бындай шыршыларға хаҡты, киткән сығымдарҙы һанап, сарыф ителгән ваҡытты иҫәпләп, һәр кем үҙе ҡуя ала.

Әгәр ҙә конус формаһындағы шыршы бигерәк ябай булып күренһә, башҡа төрлө әйберҙәрҙе ҡулланып та Яңы йыл ҡунағын эшләргә була. Был осраҡта, иң мөһиме, конструкцияның геометрияһын, йәғни шыршы кеүек өсмөйөш форманы, һаҡлау. Мәҫәлән, яҫтыҡтырҙан эшләнгән шыршы бик үҙенсәлекле. Бының өсөн шыршының нигеҙе өсөн ҙур яҫтыҡ алырға, уға бәләкәйерәген ҡуйырға һәм шулай итеп өҫкә тиклем һалып сығырға мөмкин. Әгәр ҙә яҫтыҡтар үҙ ҡулығыҙ менән ниндәйҙер тематиканы күҙ уңында тотоп эшләнһә, шыршы бигерәк тә оригиналь күренәсәк.

Ир-аттар араһында ағас киҫәктәренән эшләнгән шыршылар популяр. Бының өсөн шыршы формаһында таҡталарҙы бер-береһенә ҡаҙаҡлап сығырға, ә иң өҫтөнә тимерсыбыҡтан эшләнгән йондоҙ ҡуйырға кәрәк. Әгәр ҙә таҡталар иҫке һәм эшкәртелмәгән булһа, бигерәк тә яҡшы. "Шыршы" ботаҡтарын күн, металл йәки ағас уйынсыҡтар менән биҙәргә мөмкин. Бындай стилле шыршыны офис интерьерын биҙәү өсөн бигерәк тә эшҡыуарҙар яратып ала.

Ҡулдан эшләнгән шыршылар тураһында күп яҙырға була, ләкин ошо темаға арналған тематикалы интернет ресурстарҙы ҡарау күпкә отошлораҡ булыр. Унда оҫта ҡулдар тарафынан эшләнгән бихисап күп төрлө шыршы өлгөләре бар. Уларҙан илһам алырһығыҙ һәм аҡса эшләрһегеҙ, тип ышанам.

**Сөмбөл САТТАРОВА.**

Шул уҡ ваҡытта Ислам күп ҡатынлылыҡҡа ҡағылышлы ҡағиҙәләр ҙә булдырған: "Әгәр ғәҙел була алыуығыҙға ышанмаһағыҙ - берәү генә!" йә "Ә ҡатындарығыҙ араһында, ни ҡәҙәр теләһәгеҙ ҙә, ғәҙел була алмайһығыҙ". Бәйғәмбәрҙәр һәм сәхәбәләрҙән тыш, хатта бик теләгәндәр ҙә ғәҙел була алмай.

Ә бикләнеп йәшәү - бәйғәмбәр ҡатындарының бурысы булған, сөнки улар һәр яҡлап идеал, үрнәк булырға тейеш: "Үҙ өйҙәрегеҙҙә булығыҙ!" Тимәк, ҡатын-ҡыҙ өсөн иң дәрәжәле урын - уның үҙ йорто, ғаиләһе, уның вазифаһы - ғаилә усағын һаҡлау, башҡа ҡатындарға үрнәк булыу һәм үҙен тулыһынса балалар тәрбиәләүгә бағышлау. Ҡөрьән аяты бәйғәмбәр ҡатындарына идеал булараҡ адресланған, ә идеал менән ысынбарлыҡ араһында айырма бик ҙур.

Пәрәнжә ябыныу - ҡатын-ҡыҙҙың үҙ мәнфәғәттәре өсөн. Уның кәүҙәһенең йәшеренгән булыуы уға ҡарата ҡыҙыҡһыныуҙы ғына көсәйтә, ул тағы ла серлерәк, тағы ла мауыҡтырғысыраҡ һәм гүзәлерәк була.

Йәй көнө пляждарҙа яланғас тәндәр күп була, улар үҙҙәренең йәлеп итеү көсөн юя, мауыҡтырмай, шәрәлек ғәҙәтигә әйләнә, дәртләндермәй, хисләндермәй. Бәлки, ҡатын-ҡыҙ өсөн серле, йәшерен, мауыҡтырғыс булыу яҡшыраҡтыр.

Ир-аттың талаҡ хоҡуғы булған кеүек, ҡатын-ҡыҙҙың да был хоҡуғы бар. Ислам ҡатын-ҡыҙға Европа бирмәгән хоҡуҡтарҙы бирә - беҙҙә ҡатын-ҡыҙ өсөн ҡалым түләйҙәр, ә Европала ул бирнәле булырға тейеш. Беҙҙә ҡатын-ҡыҙ үҙ милке менән үҙе теләгәнсә эш итә ала, ә Европала был хоҡуҡҡа ир генә эйә, туйҙан һуң ир ҡатынының милкенә тулы хужа була.

Дәүләт идараһы өлкәһендә ир-аттарҙың процент яғынан күберәк булыуы, уларҙың ижтимағи тормошта ла күберәк ҡатнашыуы - был күренеш мосолман илдәренә генә хас түгел бит, христиан илдәрендә лә шулай.

Инде Исламдың мираҫ бүлгәндә ир-атҡа ниңә ике өлөш сығарыуының сәбәбе ябай: ир-ат - ғаилә терәге, уны булдырыусы, туйындырыусы, яҡлаусыһы һәм таянысы. Исламдың ҡатын-ҡыҙға мөнәсәбәте - ғәҙеллектең үҙе. Бәйғәмбәрҙең ҡатындары менән йәшәүе - уларға ҡарата ҡайғыртыусанлыҡ, наҙлылыҡ, мәрхәмәтлелек өлгөһө булып тора. Уның һүҙҙәре лә шуны раҫлай: "Минең өсөн был донъяла иң рәхәте - ҡатын-ҡыҙҙар һәм хушбуй еҫе, ә һөйөнөсөм - доға уҡыу!"

Ул ҡатын-ҡыҙҙы хушбуй һәм доға менән тиңләй, уларҙы бергә иҫкә ала, ә был иһә хөрмәтләүҙең иң юғары дәрәжәһе.

Алла ҡатын-ҡыҙға иң мөһим, иң ҡиммәтле вә ҡәҙерле нәмәне - кеше тәрбиәләүҙе тапшырған. Был бит ҙур ышаныс! Шулмы ҡатын-ҡыҙҙы кәмһетеү?...

**"Динһеҙ менән бәхәс" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

УҢЫШ ҠАҘАН



# НИ ӨСӨН ҺЕҘ АУЫРЫУ ҺӘМ ЯРЛЫ?

## Былар нисек тормошҡа ашырыла?

Үҫә барған һайын һеҙ мәғлүмәт йоғонтоһона нығыраҡ биреләһегеҙ: дуҫтарығыҙ һәм туғандарығыҙ яйлап ҡына хыял ҡанаттарығыҙҙы ҡырҡа һәм үҙбаһағыҙҙы төшөрә. Аҙым һайын шәхесегеҙҙе билдәләгән инаныуҙар табылып тора. Һеҙ уларҙың барлығын белмәйһегеҙ ҙә, әммә улар аҫтыртын эшмәкәрлеген тормошҡа ашыра. Мөнәсәбәттәр, аҡса, уңыш тураһындағы барлыҡ тәрән һәм фундаменталь күҙаллауҙарығыҙ аңығыҙҙа 10 йәшкә тиклем нығына.

Ярлылыҡҡа һәм сикләүҙәргә программалanғас, һеҙ инстинктив рәүештә ярлылар һәм аҙ тәьмин ителгәндәр кимәленә төшә башлайһығыҙ. Байҙарға ҡарата ышанмаусылыҡ барлыҡҡа килә, шәхси дәрәжә тойғоһо түбәнгә тәгәрәй. Хыялдарығыҙ ваҡлана һәм буй етмәҫлек булып тойола. Әгәр үҙбаһағыҙ ныҡ түбәнгә тәгәрәй икән, һеҙ "батырлыҡ юлы" уйлап табасаҡһығыҙ һәм шуның менән үҙегеҙҙе яҡшы итеп күрһәтергә тырышасаҡһығыҙ.

Үҙегеҙ ҙә аңламайынса, нимәгә генә тотонһығыҙ ҙа ҡаршылыҡтар, ауырлыҡтар һәм башҡа кәртәләр тыуҙырып, еңел генә хәл ителгән мәсьәләләрҙе лә ҡатмарлаштыра башлаясаҡһығыҙ. Ә инде уларҙың осона сыҡҡанда, үҙегеҙҙе ҡаһарманлыҡ ҡылғандай тоясаҡһығыҙ. Әммә ул эштең аҙағы һәр саҡ ыңғай буласаҡ тип әйтеп булмай. Сөнки һеҙ һәр ваҡыт маҡсатығыҙҙы артҡараҡ күсерә бараһығыҙ. Шуға ла еңелеүгә дусар булаһығыҙ, иң насары - үҙегеҙ хаҡында кире фекерҙе нығытаһығыҙ.

## Низағ

Төпкө аңды яҙып үткәнемсә программалау аңығыҙҙа эске низағ тыуҙыра. Һеҙ сәләмәт, бай һәм уңышлы булырға теләйһегеҙ, ти. Әммә төпкө аң, байҙар алдаша, хыянат итә һәм урлаша, тип хәбәр итә. Һеҙ бай булыу өсөн йәнеңде һатырға кәрәклеген аңлайһығыҙ, ә төпкө аңығыҙ, намыҫлы кеше данына тап төшөрмә, үлгәндән һуң туп-тура ожмахҡа эләгерһең, тип тылҡый.

Һеҙ яҡшы мөмкинлекте ҡулдан ысҡындыраһығыҙ һәм ниңәлер ҡапыл эштән ебәрһәләр, йыуаныс эҙләп, алкоголь ҡуллана башлайһығыҙ, никахығыҙҙы тарҡатаһығыҙ, хыялдарығыҙға хыянат итәһегеҙ һәм "реалист" булырға ҡарар ҡылаһығыҙ.

Үҙбаһағыҙ - тормошоғоҙҙағы иң ҙур фажиғә. Күпселек 5 йәшлек балалар нормаль үҙбаһаға эйә, ә инде улар уҡырға ингәндә, үҙбаһалары ҡайтанан программаланып, түбәнәйеп, уларға ҡаршы эшләй башлай. Тап шул саҡта шикләнеү барлыҡҡа килә лә инде - ә мин сәләмәт, бәхетле, бай булырға лайыҡлымы?

Үҙ-үҙегеҙгә шундай һорауҙар биргәндә, бер ваҡытта ла бәхетле булмаясаҡһығыҙ.

**Рэнди ГЕЙДЖ.**



## 29 ДЕКАБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Черно-белое" (16+).
14.25, 15.10 "Моя мама - невеста". Комедия.
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00, 04.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Под каблуком", 5-я и 6-я серии. Мелодраматический сериал (16+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
00.05 Ночные новости.
00.20 "Главное - не бояться!" Худ. фильм (16+).
02.20, 03.05 "Кейптаунская афера". Худ. фильм (16+).
03.00 Новости.

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.05, 07.35, 08.05, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Любовь, похожая на сон. Игорь Крутой". Док. фильм.
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Пока станица спит". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "По горячим следам". "Фанат" (16+).
18.30 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Полоса отчуждения". Мелодраматический сериал (12+).
00.35 "Вильям Похлебкин. Рецепты нашей жизни". Док. фильм.
01.40 "Люди и манекены". Сериал.

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.10 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
17.00 "Юлдаш йыры-2013" (Гала-концерт) (6+)
20.00 "Дарман". Яңы йылға арналған тапшырыу (2012й.) (6+)
22.00 "Башҡорт йыры-2013". (Гала-концерт) (12+)

### БСТ
**07.00 Гимн Республики Башкортостан (6+).**
**07.05 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 Новости недели (на башк. яз.).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Городок АЮЯ".**
**11.00, 16.15, 06.45 "Замандаш" (6+).**
**11.15 Новости недели (на русск. яз.).**
**12.00 "Пятый угол" (12+).**
**12.45 "Весело живем" (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.45, 05.30 "Мелодии души" (12+).**
**14.15 "Учим башкирский язык".**
**14.45 "Живое село" (12+).**
**15.15 "Царь горы".**
**15.45 "Бауырһаҡ".**
**16.00 "Борсаҡ".**
**16.30, 21.30 Новости (на русск. яз.).**
**16.45 "КЛИО".**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45, 04.45 "Бедная Настя". Сериал (12+).**
**18.45, 20.00 "Телецентр" (12+).**
**19.45 "Сэнгелдэк".**
**21.00 "Бизнес-обзор" (12+).**
**22.00 "Следопыт" (12+).**
**23.00 "Время спорта" (6+).**
**23.30 "Дознание" (16+).**
**24.00 "Ноэль". Худ. фильм, по окончании - Новости (на башк.яз.) (16+).**
**02.00 "Моя родословная" (12+).**
**03.00 М.Файзи. "Галиябану". Спектакль (12+).**
**06.15 "Орнамент".**
**06.30 "Полезные новости" (12+).**

## 30 ДЕКАБРЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Под каблуком". Сериал (12+).
14.20, 15.10 "Зимний роман". Худ. фильм.
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское".
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Под каблуком". 7-я и 8-я, заключительная, серии (16+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
00.05 Ночные новости.
00.20 "Монте-Карло". Романтическая комедия.
02.20, 03.05 "Суп". Худ. фильм (16+).
03.00 Новости.
04.00 "Наедине со всеми" (16+).

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Снег на голову". Лирическая комедия (16+).
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Пока станица спит". Сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.10 "Вести-Башкортостан".
17.30 "По горячим следам". "Отчаянная домохозяйка" (12+).
18.30 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Полоса отчуждения". Сериал (12+).
00.40 "Люблю, потому что люблю". Мелодрама (12+).
02.40 "Люди и манекены". Сериал.

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.10 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Таныш түгел таныштар" (1 бүлек) (6+)
16.00 "Сәкән һуға йондоҙҙар" (6+)
21.00 "Уңыш джентльмендары". Фильм (12+)
22.30 "Төрквижн-2014". Башҡортостан. Концерт (12+)
00.30 "Наза" дискотекаһы (2010) (6+)

### БСТ
**07.05 "Сәләм" (12+).**
**10.00 Мультфильм.**
**10.30, 15.30 "Гора новостей".**
**10.45 "Зеркальце".**
**11.00, 14.30, 16.15 "Замандаш" (6+).**
**11.15 "Дед Мороз поневоле". Худ. фильм.**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.30 "Мелодии души" (12+).**
**14.15 "Учим башкирский язык" (12+).**
**14.45 "Башкорттар".**
**15.15 "Семәр".**
**15.45 "Йырлы кәрәҙ".**
**16.00 "Ғәләмәт донья".**
**16.30 "Дорога к храму".**
**17.00 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.15 "Ирония судьбы" (12+).**
**18.00 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**18.15 "Полезные новости" (12+).**
**18.30 Новости. Итоги года (на башк. яз.) (12+).**
**19.30, 20.45 "Телецентр" (12+).**
**20.30 "Сэнгелдэк".**
**21.30 Новости. Итоги года (на русск. яз.) (12+).**
**22.30 "Уфимское "Времечко" (12+).**
**23.00 "Автограф" (12+).**
**23.30 "Кушать подано, или Осторожно, любовь!" Худ. фильм (16+).**
**01.30 "Ирония судьбы. Рождение легенды" (12+).**
**02.15 А.Бунин. "Морозное дыхание метели". Спектакль (12+).**
**04.30 "Старые песни о главном" (12+).**

## 31 ДЕКАБРЯ СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" Новогодний выпуск (12+).
10.45 "Модный приговор". Новогодний выпуск.
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Золушка". Фильм-сказка.
13.40 "Королева бензоколонки". Комедия.
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Две звезды". Новогодний выпуск.
17.10 Новости (с субтитрами).
17.25 "Пес Барбос и необычный кросс", "Самогонщики". Комедии.
17.55 "Джентльмены удачи". Комедия.
19.20 "Ирония судьбы, или С легким паром!" Лирическая комедия.
22.30 Проводы Старого года.
23.55 Новогоднее обращение президента Российской Федерации В.В.Путина.
24.00 Новогодняя ночь на Первом.
03.00 "Дискотека 80-х".

### РОССИЯ 1
05.45 "Школа для толстушек". Комедия (16+).
09.05 "Чародеи". Комедия.
11.45 "Лучшие песни". Праздничный концерт из Государственного Кремлевского дворца.
13.20, 14.20 "Карнавальная ночь". Комедия.
14.00 "Вести".
15.10 "Золотая невеста". Худ. фильм (12+).
16.50 "Короли смеха" (16+).
19.00 "Кавказская пленница, или Новые приключения Шурика". Комедия (6+).
20.25 "Иван Васильевич меняет профессию". Комедия (6+).
22.00 "Новогодний парад звезд".
23.55 Новогоднее обращение президента Российской Федерации В.В.Путина.
24.00 Новогодний "Голубой огонек-2015".

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.10 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
13.00 "Ер менән күк араһында". Фильм-концерт (12+)
14.15 "Таныш түгел таныштар" (2 бүлек) (6+)
15.30 "Таһир менән Зөһрә". Яңы йыл фильмы (6+)
17.15 "Парад планет". Концерт (6+)
18.15 "Рәхмәт". Фильм (6+)
20.15 "Аҡ моңдар". Концерт (6+)
21.00 "Еңел пар менән". Фильм (12+)
23.00 "Төрквижн-2014". Ҡазан. 1 өлөш (6+)
00.00 "Моңдан яралған мөхәббәт, йәки ҡышҡы бер кистә" (6+)
02.00 "Ваҡыт арбаһы" Музыкаль фильм (6+)
04.00 "Эш түбәтәйҙә". Фильм-концерт (6+)

### БСТ
**07.00 Гимн Республики Башкортостан (12+).**
**07.05 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Сладкая сказка".**
**10.30 "Гора новостей".**
**11.00 "Байтус".**
**11.15 "Бауырһаҡ".**
**11.30 "Новогодний звон "Сулпылар".**
**13.00 "Бэхетнэмэ".**
**13.30 "Тэмле".**
**14.00 "Үткән ғүмер".**
**14.45 "Алтын тирмә" (12+).**
**15.30 Новости. Итоги года (на башк. яз.).**
**16.30 "Президентская елка-2014".**
**18.00 Новости. Итоги года (на русск. яз.).**
**19.00, 06.20 "Дарман" (12+).**
**20.30, 05.05 "Башҡорт йыры-2014" (12+).**
**22.50 "Новогоднее конфетти" (12+).**
**23.50 Новогоднее поздравление президента Республики Башкортостан Р.З.Хамитова.**
**23.55 Новогоднее обращение президента РФ В.В.Путина.**
**01.35 "Караоке" (12+).**
**05.20 "Три мушкетера" (12+).**

## 1 ЯНВАРЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 "Дискотека 80-х".
07.00 "Две звезды".
08.40 "Ледниковый период-4: континентальный дрейф".
10.00, 12.00 Новости (с субтитрами).
10.10 "Золушка".
11.30 "Пес Барбос и необычный кросс", "Самогонщики".
12.10 "Джентльмены удачи".
13.35 "Ирония судьбы, или С легким паром!"
16.40 "Ирония судьбы. Продолжение" (12+).
18.00 "Вечерние новости (с субтитрами).
18.10 "Ирония судьбы. Продолжение" (12+).
18.50 "Точь-в-точь!"
22.35 "Аватар". Фантастика (16+).
01.10 "Дэвид Блейн. Реальность или магия" (12+).
02.10 "Легенды "Ретро FM".
04.00 "Зуд".

### РОССИЯ 1
05.00 "Лучшие песни".
06.55 "Маша и медведь". Мультфильм.
09.10 "Золотая невеста" (12+).
10.50 "Карнавальная ночь".
12.10 "Кавказская пленница, или Новые приключения Шурика" (6+).
13.35 "Песня года". Часть первая.
14.00 "Вести".
14.10 "Песня года". Часть первая. Продолжение.
16.30 "Юмор года" (16+).
18.20 "Иван Васильевич меняет профессию". Комедия (6+).
20.00 "Вести".
20.30 "Новые приключения Аладдина". Музыкальная комедия.
22.20 "Елки-3". Комедия.
24.00 "Клуши" (16+).
01.55 "Чародеи".

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.10 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Мораҙым Хан". Фильм 6+)
14.15 "Таныш түгел таныштар" (3 бүлек) (6+)
16.00 "Мөхәббәт һәм йондоҙҙар". Фильм-концерт (2013г.) (6+)
18.00 "Моңдан яралған мөхәббәт, йәки ҡышҡы бер кистә" (6+)
20.00 "Аҡ моңдар". Концерт (6+)
21.00 "Ы" операцияһы һәм Шуриктың мажаралары. Фильм (6+)
23.00 "Төрквижн-2014". Ҡазан. 2 өлөш (6+)
00.30 "Кис ултырып". "Наза" дискотекаһы (2009) (6+)
03.00 "Иң-изге теләктәр менән". Яңы йыл йыйынтығы (6+)

### БСТ
**07.00 Гимн Республики Башкортостан (6+).**
**07.05 "С Новым годом, папа!" (12+).**
**08.45 "Нико". Мультфильм.**
**10.00 "Балкас".**
**10.45 "Большой чемодан".**
**11.30 "Звездная "Гора новостей" (6+).**
**11.45 "Йырлы кәрәҙ".**
**12.00 "Учу башкирский язык".**
**12.45 "Новогодний ретро-калейдоскоп" (12+).**
**13.30 "Башҡорт йыры-2014" (12+).**
**17.15 "Ургала" (12+).**
**19.00 "Дарю песню" (12+).**
**20.30 "Умырзая".**
**21.15 "Баик-2014" (12+).**
**00.30 "Посылка с Марса". Мелодрама (12+).**
**02.30 "Ирония судьбы Барбары Брыльской" (12+).**
**03.30 Х.Зарипов "Эх, невеста, невестушка". Спектакль (12+).**
**05.30 "Знакомые-незнакомцы-1" (12+).**

## 2 ЯНВАРЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.40, 06.10 "Хроники Нарнии: принц Каспиан" (12+).
06.00 Новости.
08.20 "Ледниковый период-3: эра динозавров".
10.00, 12.00 Новости (с субтитрами).
10.10 "Морозко".
11.45 "Новый "Ералаш".
12.10 "Один дома".
14.05 "Один дома-2". Комедия.
16.20 "Поле чудес" (16+).
17.40 "Голосящий КиВиН". Музыкальный фестиваль (16+).
21.00 "Время".
21.20 "Три аккорда" (16+).
00.10 "Шерлок Холмс. Этюд в розовых тонах". Детективный сериал (16+).
01.50 "Люди Икс". Фантастический боевик (16+).
03.20 "Форс-мажоры" (16+).
04.40 "Мужское/Женское" (16+).
05.30 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
04.35 "Однажды в Новый год" (12+).
06.10 "Гюльчатай" (16+).
08.55 "Тетушки" (12+).
10.50 "Елки-3" (12+).
12.45 "Песня года". Часть вторая.
14.00 "Вести".
14.10 "Песня года". Часть вторая. Продолжение.
16.05 "Юмор года" (16+).
18.00 "Елки-2". Комедия (12+).
20.00 "Вести".
2030 "Идеальная пара". Мелодрама (12+).
22.30 "Джентльмены удачи!" Комедия (6+).
00.30 "Веселые ребята". Комедия (12+).
02.15 "Соломенная шляпка".

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.10 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Йома" (0+)
14.30 "Ваҡыт арбаһы" Музыкаль фильм (6+)
16.00 "Яңы йылда яңы хистәр". Резеда Әминева (6+)
19.00 "Ҡотлауҙар" (6+)
19.30 "Гәлсәр һандуғас". 2009й. Гала-концерт (6+)
21.00 "Иван Васильевич һөнәрен алмаштыра". Фильм (12+)
22.30 "Төрквижн-2013". Концерт (6+)
01.00 "Рәхмәт". Фильм (6+)
02.30 "Таһир менән Зөһрә". Яңы йыл фильмы 6+)

### БСТ
**07.00 Гимн Республики Башкортостан (12+).**
**07.05 "Доброе утро!"**
**08.00 "Цветущий сад моей души". Ш.Бабич (12+).**
**08.45 "Импи - суперстар!"**
**10.00 "Камыр батыр".**
**10.45 "Большой чемодан".**
**11.30 "Звездная "Гора новостей" (6+).**
**11.45 "Ал да гол".**
**12.00 "Учу башкирский язык".**
**12.45 "Следопыт". Мавзолей Тура-хана (6+).**
**13.15 "Тәмле". Лучшее (12+).**
**13.45 "Үткән ғүмер" 96+).**
**14.15 "Алтын тирмә". Лучшее.**
**15.00 "Зимняя вишня" (12+).**
**16.00 "Парад планет-2010" (12+).**
**17.30 "Дарман" (12+).**
**18.30 Новости (на башк. яз.). (12+).**
**18.45 "Вопрос+Ответ=Портрет" (12+).**
**19.30 "Дарю песню" (12+).**
**20.30 "Сируси" (12+).**
**21.15 "Мир настоящих мужчин" (12+).**
**21.30 Новости (на русск. яз.) (12+).**
**22.00 "Юлдаш йыры-2014" (12+).**
**00.45 "Мой парень - ангел" (12+).**
**02.30 "Расшифровывая майя" (12+).**
**03.30 Ф.Буляков. "Эх, холостяки, холостяки" (12+).**
**05.15 "Знакомые-незнакомцы-2" (12+).**

## 3 ЯНВАРЯ СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 Новости.
06.10 "Ералаш".
06.25 "Хроники Нарнии: покоритель зари" (12+).
08.25 "Ледниковый период-2: глобальное потепление".
10.00 Новости (с субтитрами).
10.10 "Старик Хоттабыч" (12+).
11.45 "Новый "Ералаш".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.10 Новости спорта.
12.15 "Ночь в музее" (12+).
14.15 "Ночь в музее-2" (12+).
16.15 "Подарок с характером". Комедия
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.10 "Угадай мелодию" (12+).
18.40 "Клуб Веселых и Находчивых" (16+).
21.00 "Время".
21.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
23.00 "Что? Где? Когда?"
00.35 "Шерлок Холмс: слепой банкир" (12+).
02.10 "Люди икс-2" (16+).
04.20 "Форс-мажоры" (16+).

### РОССИЯ 1
04.40 "История любви, или Новогодний розыгрыш" (12+).
06.05 "Гюльчатай" (16+).
08.35 Концерт Евгения Крылатова.
10.00 "Елки-2" (12+).
11.00, 14.00, 20.00 "Вести".
11.10 "Елки-2" (12+).
12.25, 14.10 "Идеальная пара" (12+).
14.35 "Это смешно" (12+).
17.10 Юбилейный концерт Игоря Крутого из Государственного Кремлевского дворца.
20.30 "Анютино счастье". 4 серии. Мелодраматический сериал (12=).
00.20 "Крепкий брак". Лирическая комедия (16+).
02.10 "Двенадцать стульев". 1-2-я серии. Комедийный сериал.

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.10 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Юлдаш йыры-2014". Гала-концерт (12+)
17.00 "Йондоҙло сәғәт". Яңы йылға арналған. Айнур Туҡтаев менән (6+)
18.00 "Ер менән күк араһында". Фильм-концерт (12+)
21.00 "Кавказ тотҡонбикәһе". Фильм
22.30 "Эш түбәтәйҙә". Фильм-концерт
00.30"Йондоҙ. Ҡышҡы кистә көҙгө әкиәт" Фильм-концерт (6+)
02.30 "Минең йондоҙом". Фильм (12+)

### БСТ
**07.00 Гимн Республики Башкортостан (6+).**
**07.05, 18.30 Новости (на башк. яз.) (12+).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Цветущий сад моей души". Ш.Бабич (12+).**
**08.45 "Барби и Дюймовочка". Мультфильм.**
**10.00 "Сулпан".**
**10.45 "Большой чемодан" (12+).**
**11.30 "Звездная "Гора новостей" (6+).**
**11.45 "Йырлы кәрәҙ".**
**12.00 "Учу башкирский язык" (12+).**
**12.45 "Следопыт" (6+).**
**13.15 "Үткән ғүмер" (12+).**
**13.45 "Хазина" (6+).**
**14.15 "Новогодний ретро-калейдоскоп" (12+).**
**15.00 "Зимняя вишня".**
**16.00 "Парад планет-2011" (12+).**
**17.30 "Дарман" (12+).**
**18.45 "Вопрос+Ответ=Портрет" (12+).**
**19.30 "Дарю песню" (12+).**
**20.30 "Сируси" (12+).**
**21.15 "Мир настоящих мужчин" (12+).**
**21.30 Новости (на русск. яз.) (12+).**
**22.00 "Юлдаш хит-2014" (12+).**
**00.30 "Манолете" (16+).**
**02.00 "Трансгималаи: Тибетские святыни" (12+).**
**03.00 М.Карим "Похищение девушки". Спектакль (12+).**
**05.15 "Знакомые-незнакомцы-3" (12+).**

## 4 ЯНВАРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 Новости.
06.10 "Ералаш".
06.25 "Белый плен" (12+).
08.30 "Ледниковый период".
10.00, 12.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Смак" (12+).
10.55 "Как Иван Васильевич профессию менял". Док. фильм (12+).
12.15 "Пираты Карибского моря: проклятие "Черной жемчужины" (12+).
14.50 "Народная марка" в Кремле. Праздничный концерт.
16.50 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.15 "Угадай мелодию" (12+).
18.55 "Пусть говорят" с Андреем Малаховым (16+).
21.00 "Время".
21.20 "Оттепель". 1-2-я серии. Мелодраматический сериал (16+).
23.40 "Шерлок Холмс: большая игра" (12+).
01.25 "Люди Икс: последняя битва" (16+).
03.00 "Форс-мажоры" (16+).
04.20 "Александр Михайлов. Только главные роли".
05.15 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
04.50 "Красавец-мужчина". Муз. фильм.
07.05 "Гюльчатай" (16+).
08.50 "Братья по обмену". Комедийный сериал (12+).
11.00, 14.00, 20.00 "Вести".
11.10, 14.10 "Братья по обмену". Продолжение сериала (12+).
17.45 "Петросян-шоу" (16+).
20.30 "Ты заплатишь за все". 2 серии. Мелодрама (12+).
00.15 "Начистоту". Концерт Emina.
01.25 "Двенадцать стульев". 3-4-я серии. Комедийный сериал.
04.15 "Комната смеха".

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
08.05 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.15 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
08.35 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
08.50 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
09.05 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
10.20 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
11.20 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
12.10 "Илһам". Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.25 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
12.40 "Төрки донъя". Төрки телле йырҙар (12+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Йыл йыры-2014". Хит-парад. Юлдаш тәҡдим итә (12+)
16.30 "Беҙҙең өйҙөң йәме". Фильм
17.30 "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ". Фильм
19.00 "Ҡотлауҙар" (6+)
19.30 "Йырҙарыбыҙ һөйгән йәрҙәргә". Иҙел Нурғәлин, Юнир Һағынбаев (6+)
21.00 "Мөхәббәт һәм күгәрсендәр". Фильм (12+)
23.00 "Ҡурай дуҫтарын йыя". Концерт

### БСТ
**07.00 Гимн Республики Башкортостан (12+).**
**07.05 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "На камне кровь моя густая". Ш.Бабич.**
**08.45 "Барби: Рождественская история". Мультфильм.**
**10.00 "Волшебная сказка".**
**10.45 "Большой чемодан".**
**11.30 "Звездная "Гора новостей" (6+).**
**11.45 "Семәр".**
**12.00 "Учу башкирский язык".**
**12.45 "Следопыт" (6+).**
**13.15 Новости. Итоги года (на башк. яз.). (12+).**
**14.15 "Алтын тирмә. Лучшее".**
**15.00 "Зимняя вишня".**
**16.00 "Рэхмэт" (12+).**
**17.45 "Дарман" (12+).**
**18.45 "Вопрос+Ответ=Портрет" (12+).**
**19.30 "Дарю песню" (12+).**
**2030 "Сируси" (12+).**
**21.15 "Мир настоящих мужчин" (12+).**
**21.30 Новости. Итоги года (на русск. яз.). (12+).**
**22.30 "Визит".**
**23.00 "Сердце башкурда" (12+).**
**01.00 "Авиатор" (12+).**
**03.45 М.Буракаева "Судьба, выбранная мной". Спектакль (12+).**
**05.15 "Машина времени" (12+).**

## КОТЛАЙБЫҘ!



Баймаҡ районы Ишбирҙе ауылында йәшәүсе ҡәҙерле атайыбыҙ **ИҘЕЛБАЕВ Миңнехәт Ғариф** улын тыуған көнө һәм дә Яңы йыл менән ҡотлайбыҙ!

Атай! Тормошобоҙҙа ниҙәр генә булып тормаһын - Аллаһы Тәғәлә ҡушҡанса сабыр итеп, изгелектәрең, аҡыллы кәңәштәрең менән балаларың, туғандарың күңелен күтәреп, донъябыҙҙы матурлап, бөтәйтеп, һәммәбеҙгә өлгө күрһәтеп йәшәйһең, собханалла. Артабан да Хоҙай рәхмәтендә беҙгә маяҡ булып, барлыҡта, һаулыҡта, бәрәкәттә оҙаҡ йәшә, атай, рәхмәт һиңә!

**Бөтөн балаларың, туғандарың исеменән ҡыҙың Фәүзиә.**

✓ *Һүҙ һайын иҫеңә төшөрөп торһалар, һиңә күрһәтелгән изгелек тә мыҫҡыллау һымаҡ ҡабул ителә.*

*(Бальтасар Грасиан).*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ТЕАТРҘЫҢ ОЛО ЮБИЛЕЙЫ!




**Вәсилә АБДРАХИМОВА төҙөнө.**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1435 һижри йыл.*

| Декабрь - ғинуар (Рабиғел әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш сыға | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 29 (7) дүшәмбе | 8:12 | 9:42 | 13:30 | 15:24 | 16:54 | 18:24 |
| 30 (8) шишәмбе | 8:12 | 9:42 | 13:30 | 15:25 | 16:55 | 18:25 |
| 31 (9) шаршамбы | 8:12 | 9:42 | 13:30 | 15:26 | 16:56 | 18:26 |
| 1 (10) кесе йома | 8:12 | 9:42 | 13:30 | 15:27 | 16:57 | 18:27 |
| 2 (11) йома | 8:12 | 9:42 | 13:30 | 15:28 | 16:58 | 18:28 |
| 3 (12) шәмбе | 8:11 | 9:41 | 13:30 | 15:29 | 16:59 | 18:29 |
| 4 (13) йәкшәмбе | 8:11 | 9:41 | 13:30 | 15:30 | 17:00 | 18:30 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙән алынды.*

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**27 декабрь** Муллаян Сөйәрғоловҡа - 80 йәш. **"Аты барҙың - дәрте бар"** (Н. Ғәйетбай), комедия

**28-30 декабрь "Итекле бесәй"** (Ш. Перро, В. Ганзенко), әкиәт. Башлана 11.00, 13.00, 15.00

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**"Аладдин"** (И. Казакова), әкиәт.
**27, 28 декабрь** - 12.00, 15.00, 17.00
**29 декабрь** - 10.00, 12.30, 15.00, **30 декабрь** - 10.00, 12.30

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**27-30 декабрь "Яңы йыл музейы"**, музыкаль әкиәт. Башлана 10.00, 13.00, 15.00

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**27-30 декабрь "Как Баба-Яга время остановила"**, Яңы йыл тамашаһы.

## ҠОТЛАЙБЫҘ!



Арҙаҡлы шәхес, Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты директоры, профессор, филология фәндәре докторы **Фирҙәүес Ғилмитдин ҡыҙы ХИСАМИТДИНОВА**ны күркәм юбилейы менән ҡайнар ҡотлайбыҙ.

Хөрмәтле Фирҙәүес Ғилмитдин ҡыҙы! Халҡыбыҙҙың "Ҡар өҫтөндә лә ҡаҙан ҡайнатыр" тигән тапҡыр әйтеме тап һеҙҙең кеүек милләтебеҙҙең аҫыл заттарына ҡарата әйтелгән кеүек. Хеҙмәт юлығыҙға күҙ һалһаң, ҡайһы бер ир-ат иңе лә күтәрә алмаҫлыҡ яуаплы вазифалар башҡарыуығыҙға, йәмәғәт эшендә лә ҡатнашып өлгөрөүегеҙгә ғәжәпләнмәү һәм һоҡланмау мөмкин түгел. Башҡортостан Республикаһы Дәүләт йыйылышы - Ҡоролтай депутаты, республиканың мәғариф министры, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты директоры - ҡайҙа ғына эшләһәгеҙ ҙә гел генә кешелек сифаттарын өҫкә ҡуя белһәгеҙ, һәр ваҡыт халҡыбыҙға тоғролоҡ һаҡлайһығыҙ, үҙ бурыстарығыҙға яуаплы ҡарайһығыҙ. Юғары вазифалар менән бер рәттән, фәнгә лә ҙур өлөш индерәһегеҙ, һеҙ 300-ҙән ашыу ғилми һәм ғилми-методик хеҙмәттәр авторы. Фән үҫешендәге уңышлы эшмәкәрлегегеҙ өсөн Халыҡтар дуҫлығы ордены менән бүләкләнеүегеҙ ҙә тос һәм ҙур хеҙмәтегеҙгә лайыҡлы баһа. Ҡатын-ҡыҙ булараҡ, һеҙ - бәхетле әсә лә. Балаларығыҙ менән һәр көндөң матурлығына, һәр миҙгелдең хозурлығына ҡыуанып йәшәйһегеҙ. Һеҙ хеҙмәттәштәрегеҙ өсөн аҡыллы кәңәшсе, ышаныслы терәк кенә түгел, мауыҡтырғыс фән тауы үрҙәренә дәртләндереүсе лә.

Артабан да ҡоростай һаулыҡ, тимерҙәй ныҡлыҡ, балалар бәхете, күңел бөтөнлөгө һәм барлыҡ ғәмәлдәрегеҙҙә уңыштар ғына юлдаш булыуын теләйбеҙ. Тыуыр тандарығыҙ ҡотло, шатлыҡ-ҡыуаныстарға бай булһын!

**Һеҙ етәкләгән тел бүлеге хеҙмәткәрҙәре.**

* * *



Ошо көндәрҙә мәғариф ветераны, 37 йыл ғүмерен иң изге һөнәрҙәрҙең береһе - балаларға белем биреүгә бағышлаған юғары категориялы уҡытыусы, Рәсәй Федерацияһының мәғариф алдынғыһы **Тәнзилә Усман ҡыҙы ӘХМӘТОВА** 70 йәшлек оло юбилейын билдәләй.

Тәнзилә Усман ҡыҙы 1944 йылдың 25 декабрендә Хәйбулла районы Мәмбәт ауылында тыуған. Бәләкәйҙән тырыш, талапсан ҡыҙҙы белемгә ынтылышы Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатына, һуңынан Сибай педагогия училищеһына алып килә. Училищены тамамлағас, тәүҙә башланғыс кластарҙа белем бирә, ситтән тороп институт тамамлағас, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булып эшләй, хаҡлы ялға сыҡҡансы тыуған мәктәбендә уҡыта.

Тәнзилә менән Факил Әхмәтовтарҙың ғаиләһе районда иң матур ғаиләләрҙән иҫәпләнә. Балаларының берәүҙәре - аталарының, икенселәре әсәләренең һөнәрен үҙ иткән. Хәҙерге көндә уларҙың бөтәһе лә үҙ аллы тормош көтә. Уҡытыусы һөнәрен дауам итеүсе ҡыҙҙары Милә Мәмбәтова тыуған ауылында башҡорт теле уҡытыусыһы булып эшләһә, Гөлсәсәк Әлибаева - "Башбланкиздат"тың генераль директоры. Улдары Наил, Авзал Әхмәтовтар Бүребай тау-байыҡтырыу комбинатында эшләп йөрөй, Азамат улдары "Башбланкиздат"тың директор урынбаҫары.

Хөрмәтле Тәнзилә Усман ҡыҙы! Һеҙҙе күркәм юбилейығыҙ менән ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ. Килер көндәрегеҙ аяҙ, сәләмәтлегегеҙ ныҡлы булһын, оҙон ғүмер, күңел күтәренкелеге, ғаилә имենлеге теләйбеҙ!

**Изге теләктәр менән, Хәйбулла районы Мәмбәт мәктәбе коллективы.**

ЙЫЛ ЙОМҒАҒЫ

# КЕМДӘР УЛАР, "КИСКЕ ӨФӨ"НӨ ИЖАД ИТЕҮСЕЛӘР?



**Йыл аҙағында үткәндәргә йомғаҡ яһау йолаһы бар. Йомғаҡлау һүҙҙәрен әле йыл башында ла әйтербеҙ, ләкин быйылғы йылдың һуңғы 52-се һанын ҡулығыҙға алғанда ошо осорҙа "Киске Өфө"нө ижад итеүгә кемдәр айырыуса көс һалғанын белеп тороу ҙа ҡамасауламаç.**

Гәзитебеҙҙе ҙур булмаған коллектив ярҙамында ижад итәбеҙ, уларҙы һеҙ исем-аты менән белеп тораһығыҙ. Ижадсыларыбыҙ Фәүзиә Мөхәмәтшина, Зәйтүнә Ниғмәтйәнова (Әйле), Ләйсән Нафиҡова, Илгиз Ишбулатов, Азамат Әбүталипов, Гөлназ Манапова, Сәриә Ғарипова, Артур Батыршин (гәзитебеҙҙе биҙәүсе лә, версткалаусы ла, хәбәрселәребеҙгә фекер-идеяларын еткереп тороусы ла ул). Тимәк, гәзитте гәзит итеүсе, уға тос йөкмәткө, фекер өҫтәүсе, рух өрөүсе көс - ул беҙҙең авторҙар. Республикабыҙ ҡалаларынан һәм райондарынан гәзитебеҙ форматына, асылына тап килер сығыш-мәҡәләләрен ебәреп тороусы авторҙарыбыҙ менән ысынлап та бәхетлебеҙ. Улар - Мәрйәм Бураҡаева, Гүзәл Иҫәнгилдина, Эльза Мөхәмәҙиева, Лена Абдрахманова, Айһылыу Ғарифуллина, Таңһылыу Баһаутдинова, Әғләм Шәрипов, Фәүзиә Усманова-Яхина, Илдар Ғәбитов, Хәлиҙә Алтынбаева, Спартак Ильясов, Хәйҙәр Тапаҡов, Хәлил Һөйөндөков, Мәүлит Ямалетдинов, Риф Мифтахов, Марат Ишмөхәмәтов, Әнүәрә Монасипова, Радик Өмөтҡужин, Рәхимә Мусина, Зәкирйән Әминев, Салауат Хәмиҙуллин, Ҡадир Мәғәфүров, Фәриҙә Айытбаева, Әкрәм Ҡәйепҡолов, Рөстәм Нурыев, Иҙрис Ноғоманов, Мотал Рәмов, Рәдис Дусалин, Миңһылыу Абдуллина, Урал Мостафин, Иршат Йәнбирҙин, Сәүиә Бикмөхәмәтова, Рифат Әйүпов, Әлфиә Зәбдинова, Мансур Һиҙиәтов, Исмәғил хәҙрәт Хәким, Гөлназ Ғәлимуллина, Венер Сәхәүетдинов, Айгөл Ахунова, Ринат Шәйбәков, Азат Ярмуллин, Фәрит Вәхитов, Гөлнур Яҡупова, Фәриғә Күсәкова, Шәһүрә Әхмәҙиева, Көнһылыу Ҡотлобаева, Йәмних Ҡашҡаров, Гөлшат Хажиева, Рәйлә Сабитова, Мөҙәрис Багаев, Зөлфиә Ханнанова, Лариса Абдуллина, Әнүәр Шафиҡов, Илдар Исламов, Зөһрә Бураҡаева, Йәдкәр Бәширов. Беҙ уларға, аҫыл һүҙҙең ҡәҙерен белеүселәргә, уларҙы түкмәй-сәсмәй гәзит биттәренә күсереүселәргә сикһеҙ рәхмәтлебеҙ.

**Айырыуса әүҙем авторҙарыбыҙҙы лауреат итеп билдәләү йолаһы ла бар беҙҙә. Шулай итеп быйыл лауреат исеменә лайыҡ булдылар:**

**Рәхимә Мусина,** Әбйәлил районы Асҡар ауылы китапханасыһы, бик күп һандарҙағы тәрбиәүи, донъяуи, туған телгә арналған мәҡәләләре өсөн.

**Мәрйәм Бураҡаева,** яҙыусы, "Андан - ҡанға, ҡандан - заңға" рубрикаһындағы мәҡәләләре өсөн.

**Рифат Әйүпов,** Ишембай ҡалаһының Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге башҡорт гимназия-интернаты башҡорт теле уҡытыусыһы, бер нисә һандағы педагог яҙмалары өсөн.

**Сәғит Агиш исемендәге хикәйәләр конкурсы**

Белеүегеҙсә, гәзитебеҙҙә күп йылдар күренекле башҡорт яҙыусыһы, хикәйә оҫтаһы Сәғит Агиш исемендәге хикәйәләр конкурсы бара. Был бәйге барышында күп яңы исемдәр асылды, өмөтлө ҡәләмле хикәйәселәр барлыҡҡа килеүенә шаһит булынды. Конкурс, билдәле, киләһе йылда ла дауам итәсәк. Тик шундай теләгебеҙ бар: авторҙар үҙ әҫәрҙәрендә заман һәм заманға ҡулайлашҡан, аҡыллы, көслө, лайыҡлы йәшәгән башҡорт кешеһе образын - бөгөнгө көн геройын һынландырһын ине. Был, әлбиттә, ҡәтғи шарт түгел. Ә шулай ҙа... Сәхнәлә, китаптарҙа, тормошта бөгөнгө көн геройы, лидерҙар күренмәй китте. Уларҙы беҙ әҙәби әҫәрҙәребеҙҙә булһа ла тыуҙырайыҡ. Тормошта беҙ һәр ваҡыт китаптарҙа яҙылған геройҙарға тиңләшергә тырышабыҙ бит. Ә быйылғы лауреаттар ошолар:

**Миләүшә Ҡаһарманова,** 26-32-се һанда баҫылған "Бәпәй еҫе" хикәйәһе өсөн;

**Зөлфирә Ҡаҙаҡбаева,** 34-36-сы һандағы "Йәнбикә, йәки әжәлдәрең етһә..." хикәйәһе өсөн.

**Лауреаттарыбыҙҙы, еңеүселәребеҙҙе, барлыҡ авторҙарыбыҙҙы һәм уҡыусыларыбыҙҙы Яңы йыл менән ҡотлайбыҙ. Күңелдәрегеҙгә рух, ҡот, тәнегеҙгә ныҡлы сәләмәтлек, ижад ҡомары теләйбеҙ.**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# ЕҢЕҮСЕ БУЛАЙЫҠ!

**Йылҡы йылы "Тамыр" балалар каналы өсөн еңеүҙәргә бик бай булды. Шулай ҙа улар араһында иң ҙур уңышыбыҙ - "ТЭФИ-Регион 2014" Бөтөн Рәсәй телевизион конкурсында Бронза Орфейға һәм ике махсус призға лайыҡ булыуыбыҙ.**



"ТЭФИ-Регион" конкурсында быйыл биш номинация буйынса финалға сыҡтыҡ. Өлкәндәр өсөн әҙерләнгән тапшырыуҙар менән ярышып, улар араһында үҙебеҙҙе лайыҡлы күрһәтә алыуыбыҙ ҙур ҡыуаныс. "Урал батыр" эпосы буйынса Президент грантына төшөрөлгән "Шүлгәнташ" исемле әкиәт иң ҙур баһа алды. "Физкультура уҡытыусыһы көнө" тапшырыуы махсус приз менән билдәләнде, ә "Герой-балалар" тапшырыуы "Ауырлыҡтарҙы еңеп сығыу" номинацияһында еңеүсе булды.

"Торнаҡай" проекты тураһында ла айырым әйтергә кәрәк. Ул бер юлы ике конкурста - Абхазияла һәм Һамар ҡалаһында үткән фестивалдәрҙә юғары баһа алды. Әлбиттә, был ҙур уңыштар беҙгә ҡыуаныс килтерә, эшебеҙҙән кинәнес алып эшләргә мөмкинлек бирә. Шул уҡ ваҡытта Башҡортостан сиктәрен аша атлап, Рәсәй кимәленә сыҡҡан башҡорт тапшырыуҙары, фильмдары аша башҡа халыҡтар республикабыҙ тураһында ишетә, еңеүҙәр шуныһы менән ҡиммәтле лә. Бөгөндән үк киләсәктә башҡарасаҡ эштәребеҙҙе барлайбыҙ, ҡайһы бер проекттарға тотонғанбыҙ ҙа инде. Киләһе йыл илебеҙҙә ҙур ваҡиға көтөлә, Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығы айҡанлы бер нисә проект күҙалланып тора.

"Тамыр"ҙың коллективы тик йәштәрҙән тора, уларҙың һәр береһе уртаҡ хыялдар, маҡсаттар менән йәшәй һәм эшләй. Миңә уларҙың һәр береһендә илһөйәрлек тойғоһонoң булыуы оҡшай. Ғөмүмән, уларҙы артабан да ижад итеүгә дәртләндереү, күңелдәрен үҫтереү өсөн барыһын да эшләргә тырышабыҙ, мөмкинлек табып, фестивалдәргә ебәрәбеҙ. Сөнки унда барып, аралашып йөрөп ҡайтыу һәр береһе өсөн ҙур мәртәбә лә, фәһем дә, күңел үҫешенә бер этәргес тә.

**Гөлназ ҠОЛҺАРИНА,**
**"Тамыр" балалар телеканалы директоры.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# КӘЗӘ ТИП ХУРЛАМА - кәзә ярлы һыйыры

Тел - ҡылыс: тейешһеҙ ерҙә тый, тейешле ерҙә ҡый.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Берәй судьяны уның үҙенең эшен ҡарарға мәжбүр итеп ҡарағыҙ әле - ул законадарҙы нисегерәк ҡулланасаҡ әле!

**(Пьер Бомарше).**

Һүҙ һайын иҫеңә төшөрөп торһалар, һиңә күрһәтелгән изгелек тә мыҫҡыллау һымаҡ ҡабул ителә.

**(Бальтасар Грасиан).**

Әңгәмәләшеүсе "Мин дөрөҫтө һөйләйем" тигәнде һыҙыҡ өҫтөнә алһа, икеләнмәгеҙ: ул алдай.

**(Бертран Рассел).**

Дошманыңдан да күпкә өйрәнергә була.

**(Мишель де Монтень).**

Ер йөҙөндә өс ғәли йәнәптәре хакимлыҡ итә: Көнсөллөк, Ғәйбәт һәм Яуызлыҡ.

**(Себастьян Брант).**

Кешене кәмһетәһең икән, уның бергә үҙең дә түбән төшәһең.

**(Букер Вашингтон).**

Бер бөйөк кеше әйткән һүҙҙәрҙе мин ҡат-ҡат иҫкә төшөрәм: "Алыштырғыһыҙ кешеләр булмай".

**(Франклин Рузвельт).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер министрҙың бик йыйнаҡ, намыҫлы, егәрле ярҙамсыһы була. Ләкин өс йыл эшләткәс, министр уны эштән ебәрергә ҡарар итә.**

**- Мин һинән ҡәнәғәт түгелмен һәм башҡаса һинең хеҙмәтеңә мохтажлыҡ кисермәйем, - ти ул.**

**Ярҙамсы аптырауҙан йән асыуы менән ҡысҡырып ебәрә:**

**- Мин һеҙ ҡушҡандарҙы насар үтәнемме ни? Минең ялҡауланған сағымды күргәнегеҙ булдымы ни?**

**- Юҡ, һин барыһын да һәйбәт үтәнең, - ти министр.**

**- Улай булғас, ни өсөн мине һеҙгә хеҙмәт итеүҙән мәхрүм итәһегеҙ?**

**- Һин өс йыл минең ярҙамсым булдың, - тип яуаплай министр. - Ошо өс йыл эсендә һин бер генә хатамды, етешһеҙлегемде лә шәйләмәнең йә шәйләмәҫкә һалыштың. Тимәк, һин минең тағы ла яҡшыраҡ эшләүемде теләмәнең, ә миңә ярарға тырышып ҡына йәшәнең. Шуның өсөн дә мин башҡаса һинең хеҙмәтеңә мохтаж түгелмен..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрриәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Азамат ӘБҮТАЛИПОВ,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 19 декабрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4700
Заказ 4846